ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

15-21 июль (майай) 2017

№28 (758)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Үҙ көнөбөҙҙө...

үҙебеҙ күрәбеҙ



4

Инглиз телен...

туған тел нигеҙендә өйрәнәбеҙ



5-6

Тормошта үҙ урыныңды табыу...



хыялдарҙан, ҡыҙыҡһыныуҙарҙан баш ала

8-9

Эсәктәреңде...

паразиттар зарарламаһын



12-13

ТВ-программа 14

*"Еңеү өсөн еңелә белергә лә кәрәк. Үҙгәрештәргә ҡаршылашыу урынына үҙгәрештәр ыңғайына бирәлеп йөҙөргә өйрәнергә кәрәк. Һыуҙың тәбиғәте лә бит - ағым. Һыу һәр ваҡыт үҙ ағымы менән, бер нигә лә ҡаршылашмай ғына ағыуын белә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Ерҙә һыуҙан да ҡеүәтлерәк стихия юҡ".*

***Робин ШАРМА.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Ныҡлы, иманлы, мөхәббәтле ғаилә генә илде сәйәси һәм иҡтисади көрсөктәрҙән ҡотҡара ала. Тик был хәҡиҡәт әле йәмғиәтебеҙҙә, юғары даирәләрҙә етерлек аңлау тапмай, тип әйтә алабыҙмы?

***Арсен ЗӘЙНУЛЛИН, ике балалы ғаилә башлығы, Иглин районы:*** Ниндәй генә илде алып ҡарамайыҡ, илдең социаль-иҡтисади хәле туранан-тура ошо илдә йәшәүсе ғаиләләрҙең хәлендә, көнкүрешендә сағыла. Шуның өсөн дә дәүләттең төп бурысы ғаиләләргә һәр яҡтан лайыҡлы ярҙам күрһәтеү булырға тейеш. Был ярҙам үҙ эсенә иң беренсе ғаилә хәлен иҡтисади яҡтан үҫтереүҙе, эшһеҙлек мәсьәләһен яйға һалыуҙы, йәш ғаиләләрҙе торлаҡ менән тәьмин итеүҙе алырға тейештер, тип уйлайым.

Дәүләтебеҙ был йәһәттән ғаиләләргә иғтибар бүлә бүлеүгә. Әлеһән-әле яңы программалар уйлап сығарылып ҡына тора. Ана, әсәлек капиталын ғына ла күпме ғаилә алып ҡыуанды. Был уларға ғаилә хәлен финанс яҡтан яҡшыртыуға ҙур ярҙам булды. Әйткәндәй, әсәлек капиталын үҙебеҙ ҙә алдыҡ һәм бик ризабыҙ.

Шуныһын да әйтеп китергә теләр инем: хөкүмәт программаларының күбеһендә ҡатнашыу бик ауыр. Күптәр йә сираттарын еткерә алмай ыҙалай, икенселәрҙең иҫәпһеҙ-һанһыҙ документтарҙы йыйып бөтөргә түҙемлеге етмәй. Уларын да әлеһән-әле янырытып торорға кәрәк бит әле. Бер ҡағыҙ юллар өсөн бик күп ишек төптәрен тапарға тура килә, һеҙөмтәлә, әләгәнеңме, юҡмы - шулай уҡ гарантия бирелмәгән. Шуға ла программаларҙа ҡатнашыу шарттарын бер аҙ еңеләйтерергә, тәртипкә һалырға кәрәк, әлбиттә. Аҡ ҡағыҙға ҡара менән яҙылып, шундай мөмкинлектәр бар, тип хәбәр ителеүен ителгәс, ябай кеше ҡуллана алырлыҡ булһын ине ул.

Әйткәндәй, хөкүмәттән ярҙам тойоу - ул ниндәйҙер кимәлдә йәшәүгә дәрт өҫтәй, тағы ла ҙурыраҡ ҡаҙаныштарға этәрә, дәүләткә ышаныс та уята. Тимәк, дәүләтебеҙ ғаиләләргә ни тиклем күберәк һәм лайыҡлы ярҙам ҡулы һуҙа, шул тиклем улар араһында ла мөнәсәбәт ныҡлы һәм ышаныслы буласаҡ бит. Икенсенән, ярҙамды ҡайҙандыр көтөп ултырыу ҙа дөрөҫ түгел. Алыусы ҡулға ҡарағанда, биреүсе ҡул яҡшыраҡ. Беҙҙең атай-әсәйҙәребеҙ тормошта һәр нәмәне үҙ ҡулдары менән тир түгеп тапҡан. Беҙ үҙебеҙ ғаиләлә 5 бала үҫтек, бөтәбеҙ ҙә юғары белемле, һәр беребеҙ тормошта үҙ урынын табып, матур, етеш йәшәй. Беҙҙә лә ҡайҙандыр ярҙам көтөп ултырыу ғәҙәте бөтөнләй юҡ. Ярҙам булһа, шөкөр, тип, рәхмәт әйтәбеҙ ҙә, артабан үҙ ҡулдарыбыҙ менән ялауҙы дауам итәбеҙ. Заманы шундай: хөкүмәт эшендә эшләп кенә ғаиләне тулыһынса тәьмин итеүе ауыр. Шуны аңлаған, алдынғы ҡарашлы замандаштарҙың һәр кеменең үҙенең шәхси эше, бизнесы бар. Беҙ ҙә үҙ бизнесыбыҙҙы үҫтереүгә көс һалабыҙ. Үҙебеҙҙең балаларҙың да ошо уҡ принцип менән йәшәүен теләр инем, сөнки башы булған, эштән ҡурҡмаған кеше бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла юғалып ҡалмаясаҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тамамланды. Гәзитебеҙҙе кәрәкле мәғлүмәт, аҡыл, кәңәш сығанағы итеп иҫәпләгән, ҡағыҙ баҫманы төрлө башҡа мәғлүмәт сараларынан өҫтөн күргән даими уҡыусыларыбыҙға рәхмәт белдерәбеҙ. Арағыҙҙа почтальондың килеп яҙҙырғанын көтөп ала алмағандар, баҫмабыҙға яҙылырға һуңлағандар булһа, сәләмебеҙҙе еткерегеҙ: "Киске Өфө"гә июлдә лә, августа ла, республиканың һәр ауылында һәм ҡалаһында яҙылырға була.**

Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп тороуыбыҙҙы беләһегеҙ. 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан:

Учалы районы Илтабан ауылынан Нәзирә Бижанова - **Салауат Әбүзәрҙең "Ғәмәл дәфтәре";**

Ейәнсура районы Ибрай ауылынан Гөлдәр Аҡбутина - **Рәми Ғариповтың "Сыңрау торна";**

Ишембай ҡалаһынан Рауил Әхмәров - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үләндәре";**

Күгәрсен районы Ҡалдар ауылынан Миңзәлә Юмаева - **Сәрүәр Суриналың "Кот тәңкәһе";**

Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан Миңнебикә Дауытова - **"Буракаевтар ижады";**

Федоровка районы Оло Сытырман ауылынан Фирҙәүес Солтанғолова - **"Женское рукоделие у башкир";**

Баймаҡ районы Үрге Таһир ауылынан Айҙар Байраҡаев, Мәләүез районы Сарлаҡ ауылынан М. Фазлыйәхмәтова - **Әмир Әминевтың "Бер кәмәлә";**

**(Дауамы 2-се биттә).**



ИҒТИБАР!



# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**(Башы 1-се биттә).**

Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан Сәләх Әхмәтов, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Тәнзилә Ҡыҙрасова - **Рәшит Шәкүрҙең "Ғүмер көҙө";**

Баймаҡ районы Әмин ауылынан Марат Әүәлбаев, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан А. Ҡусҡарова, Учалы районы Озерный ауылынан Муса Бирғәлин - **Флүр Ғәлимовтың "Яңы башҡорт";**

Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылынан Мәфрүзә Суфиянова, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес ауылынан Зөлфиә Мырҙағолова, Сибай ҡалаһынан Римма Аҡманова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры";**

Әбйәлил районы Әбделмәмбәт ауылынан Рәшит Ҡарабандин, Баймаҡ районы Ярат ауылынан Һәҙиә Әбдрәшитова, Ғафури районы Ерек ауылынан Гөлсинә Сәғитова, Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан Г. Ишкилдин - **Лариса Абдуллинаның "Балҡантау рухы";**

Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Фәтиха Хәкимова, Баймаҡ районы Урғаҙа ауылынан В. Хәсәнова, 1-се Этҡол ауылынан Бибисара Мәхмүтова, Аҡморон ауылынан Ғәлиә Исламғолова, Ейәнсура районы Новопавловка ауылынан Зөлиә Әлмөхәмәтова, Салауат районы Ахун ауылынан Н. Яруллина, Ишембай районы Ишәй ауылынан Әсмә Сәғәҙәтова, Архангел районы Абҙан ауылынан Ләлә Фәйзуллина, Йылайыр районы Исҡужа ауылынан Ғилмия Усманова, Әлшәй районы Ҡармыш ауылынан М. Ғәбделмәнова - **"76 оло гонаһ";**

Учалы районы Ҡорама ауылынан Алик Мораттшин, Истамғол ауылынан А. Ғәйетҡолова, Дәүләкән районы Мәкәш ауылынан Рәмилә Ғәйзуллина, "Дружба" ауылынан Юлай Ғәтиәтуллин, Мәләүез районы Арыҫлан ауылынан Ғәйнетдин Камалетдинов, Күгәрсен районы Бикбулат ауылынан Гәүһәр Сафина, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Мәрзиә Ишимова, Ейәнсура районы Трушин ауылынан Фәймә Рафиҡова, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Рәүилә Лоҡманова, Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Сажида Фәйзрахманова - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды.

Августа 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙы шулай уҡ бүләк-китаптар көтә.

Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ныклы, иманлы, мөхәббәтле ғаилә генә илде сәйәси һәм иктисади көрсөктәрҙән коткара ала. Тик был хәкикәт әле йәмғиәтебеҙҙә, юғары даирәләрҙә етерлек аңлау тапмай, тип әйтә алабыҙмы?

**(Башы 1-се биттә).**



***Фирүзә АБДУЛЛИНА, Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес мәктәбе уҡытыусыһы, шағирә:*** Ошо көндәрҙә үткән Ғаилә, мөхәббәт, тоғролоҡ көнө - Рәсәйҙең яңы байрамдарының береһе. Махсус байрамдар арналғас, дәүләт өсөн ғаиләләр әһәмиәтле, әлбиттә. Йәмғиәттә барған бар үҙгәрештәр ғаиләләрҙә сағылыш таба, сөнки ғаилә - ошо йәмғиәттең бәләкәй бер өлөшө бит. Үҙгәртеп ҡороуҙар, мәҫәлән, күп ғаиләләр өсөн киҫкен һынылыш осоро булды. Колхоздар бар саҡта ауылдағы һәр ир-аттың эш урыны бар ине. Һәр кем үҙен кәрәкле итеп тоя, аҙмы-күпме эш хаҡы ала, эш хаҡы иҫәбенә һарай тулы малына бесән-һалам, игенен етештерә ине. Ул эштән ҡайтҡанда балалары көтөп тора, ҡатыны тәмле аш менән ҡаршы ала, ир кеше үҙен ғаилә башлығы, туйындырыусы итеп тоя ине. Уға хөрмәт менән ҡарайҙар, ул әйткән һүҙ закон ине. Бына колхоздар бөтөрөлдө. Элек урам тулып йөрөгән эреле-ваҡлы тракторҙар һәм машиналар юҡҡа сыҡты, фермалар бушап, емерелеп бөттө. Колхоз өсөн янып эшләп йөрөгән ир-егеттәр урамда тороп ҡалды. Нисек аҡса эшләргә, балаларҙы ҡарарға? Ҡыйыуыраҡтары эш эҙләп, ситкә сығып китте, ғаиләләре алдында уларҙың роле үҙгәрмәне. Ләкин күп ир-ат ҡайҙалыр китергә теләмәне, китеп тә эшләй алмай, кире ҡайттылар ҙа, ҡатындарының "елкәһенә менеп ултырҙылар". Эскегә һалышып китеүселәр ҙә булды. Бындай ғаиләләрҙә элекке матур тормош бөттө, матди етешһеҙлек менән бергә тормоштан ризаһыҙлыҡ, бер-береңә ҡарата һалҡынлыҡ урын алды.

Эйе, яңы шарттар ғаиләләр алдына ла яңы талаптар ҡуйҙы. Был талаптарға күнергә теләмәүселәр өсөн ауыр заман килде. Аптыраған көндән байтаҡ ир-егеттәр Себерҙә йөрөй хәҙер, ундағы ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында һаулығын юғалта, ғүмерен ҡыҫҡарта, балалар атай тәрбиәһенән мәхрүм үҫә, ир менән ҡатындың бергә булыр йылдары айырым үтә. Бына шуның өсөн дә дәүләт кимәлендә ғаиләләрҙе һаҡлап ҡалыу өсөн күрелгән сараларҙың иң мөһиме - илдәге ир-егеттәрҙе эш менән тәьмин итеү. Тик дәүләт тарафынан был өлкәгә әллә ни иғтибар биреп еткерелмәй, тиер инем. Бөгөнгә дәүләттең бар ярҙамы - йәш һәм күп балалы ғаиләләргә бер аҙ ғына матди ярҙамға ҡайтып ҡала. Әгәр йәшәгән еребеҙҙә лайыҡлы эш хаҡы алып эшләргә мөмкинлек булһа, балаларҙың аталары бер ҡайҙа ла ситкә китмәҫ ине, көн дә иртән үҙ өйөнән эшкә китеп, кисен үҙ өйөнә ҡайтыр, балалары - атайлы, ҡатыны - ир яҡлауында йәшәр ине. Аралар һыуынмаҫ, ғаиләләр боҙолмаҫ ине. Ир кеше үҙенең борон-борондан килгән иң мөһим вазифаһын - ғаиләһен туйындырыусы ролен юғалтмаһа, уға ҡәҙер-хөрмәт тә булыр ине... Ғаиләләр тарҡалыуы илдең, йәмғиәттең тарҡалыуына килтерәсәк икәнен аңлап, кисектергеһеҙ саралар күрә башлаһын ине дәүләтебеҙ, тип теләйбеҙ. Бәлки, ысынлап та, ошондай мәсьәләләргә йөҙ менән боролоу өсөн "Ғаилә министрлығы" булдырырға кәрәктер ул?..

***Әлиә ҒӘЛИМОВА, ике бала әсәһе, Өфө ҡалаһы:*** Ғаилә һәм дәүләт сәйәсәте тураһында күп нәмә һөйләргә була. Ҡыҫҡаса әйткәндә, 57 һум балалар пособиеһы алабыҙ, әсәлек капиталыбыҙ бар барлыҡҡа, ләкин уны ла йылдан-йыл инфляция ашай. Иҫкергән поликлиникалар, бөтмәҫ сираттар, көн һайын иртәле-кисле юл тығынында тороуҙар... Берәй ярҙам йә субсидия алыр өсөн әллә нисәмә ҡат ҡағыҙ йыйырға кәрәк, закондар камил түгел. Шуға ла беҙ дәүләттән ярҙам көтөп ултырыуҙың файҙаһыҙ икәнен бик тиҙ аңлап, кредит өҫтөнә кредит алып булһа ла, өй һалып сыҡтыҡ, Аллаға шөкөр. Таныштар араһында торлаҡ мәсьәләһен хәл итә алмай айырылышҡан парҙар ҙа бар, юғиһә. Йә йәшәргә урын юҡ, йә эш юҡ. Ғаиләләр тарҡалмаһын өсөн айырылышыу хаҡын, госпошлинаны арттыралар. Пошлинаны арттырғансы, ЗАГС-тарҙа һәм мировой судтарҙа психолог ярҙамы булдырһындар ине. Ғаилә тормошо - ул туй күлдәге кейеп, фотоға төшөү генә түгел. Шулай уҡ айырылышыу ҙа проблеманан ҡотолоуҙың берҙән-бер юлы түгел икәнен аңлатһын ине психологтар. Эшһеҙ йөрөгән белгестәргә - эш, бюджетҡа аҡса булһа, ғаиләләр һөйләшеп-аңлашып йәшәргә өйрәнер ине, бәлки.

Һәм тағы... дәүләттең файҙаһы матди ярҙам менән генә сикләнмәһен ине, тигән фекерҙәмен. Мин туған тел тураһында бер-ике һүҙ әйтмәксемен. Ҡыҙымдың теле асылып, һөйләшә генә башлаған мәлендә балалар баҡсаһына бирҙек. Уныһын да саҡ эҙләп табып, башҡорт балалар баҡсаһы тигәнгә күрә, автобус менән йөрөтөргә кәрәк булһа ла, ныҡышып путевка табыуға өлгәштек. Башҡорт балалар баҡсаһы тип аталһа ла, унда бер генә башҡорт төркөмө булып сыҡты, уныһы ла 5 йәшлектәр өсөн генә. Балағыҙ беҙҙе аңламай, русса өйрәтегеҙ, өйөгөҙҙә русса һөйләшегеҙ, тигән күрһәтмә бирҙеләр. Тора-бара мин өйрәткән алма - "яблоко"ға, туп "мячик"ка әйләнде. Ошо баҡсала ике йыл йөрөгөндән һуң, бына әле икенсе башҡорт балалар баҡсаһына күстек. Ҡыҙымдың туған телен һаҡлап ҡалырға һуң түгелдер әле, тип ышанғы килә, юғиһә, теге баҡсала йөрөгәндә ҡыҙым руссаға күсеп бөтә яҙҙы. Улымды хәҙер балалар баҡсаһына бирергә ҡотом осоп тора. Башҡортса төркөмдәр юҡ, ә эшкә сығырға ваҡыт етеп килә... Бына ошо йәһәттән дә дәүләтебеҙ ярҙамына өмөт итеп булһа икән, тип хыялланам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Белогорскиҙа (Ҡырым) Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 460 йыллығына һәм Ҡырым ерҙәрен Рәсәйгә ҡуша башлауҙың 245 йыллығына арналған "Рәсәйгә ант биреп" төбәк-ара фестивале үтте. Ошо ваҡиғалар менән Белогорск районы халҡын Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов һәм Ҡырым Башлығы Сергей Аксёнов ҡотланы. Фестиваль сиктәрендә төбәк етәкселәре Белогорск районы предприятиеларының күргәҙмәһен ҡараны һәм унда етештерелгән тауарҙар менән танышты. Башҡортостан һәм Ҡырым сәнғәт оҫталарының "Беҙ бергә" концерты фестивалдең төп ваҡиғаһы булды.

✓Ҡырымдың Башҡортостан Республикаһына ҡайһы балалар шифаханаһын тапшырасағы билдәле булды. Уның исемен Ҡырым Башлығы Сергей Аксёнов Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов менән осрашыу барышында әйтте. Балалар өсөн "Юбилейный" клиник кардиология шифаханаһы ҡан әйләнеше системаһы, тын алыу юлдары сирҙәре менән яфаланған балаларҙы дауалауға һәм реабилитациялауға махсуслашҡан.

✓Башҡортостанда ҡойма ямғырҙар тупраҡтың артыҡ дымланыуына һәм игендең юҡҡа сығыуына килтерҙе. Әлеге ваҡытта төбәк хөкүмәтендә яуым-төшөм сәбәпле 107 хужалыҡ зыян күргән 13 районда ғәҙәттән тыш хәл режимын индереү тураһында документ әҙерләнә. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының үҫемлекселек һәм мал аҙығын етештереү бүлеге етәксеһе Азат Мөхәмәтшин әйтеүенсә, 22 мең гектар майҙанда иген юҡҡа сыҡҡан. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, был зыян 400 миллион һумдан ашыуға баһалана.

✓Ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов хәбәр итеүенсә, ҡойма ямғырҙар сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү буйынса агротехник эштәрҙе башҡарыуҙы, сәсеүҙең календарь сроктарын бер аҙ туҡтатты. "Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, Көньяҡ урман-дала, Урал алды дала һәм Урал аръяғы дала зоналарында ашлыҡ йыйыу 20-25 июль урынына - 10 августан, Төньяҡ-көнсығыш һәм Төньяҡ урман-дала зоналарында иһә 20 августан һуң башланасаҡ. Быйыл яҙғы иген культураларын йыйыу ужым сәсеү ваҡытына тура килер, моғайын", - тип һөйләне Илшат Фәзрахманов.

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# АСЫУҘЫ АЛҒА ҠУЙЫП...

## аҡылды артҡа ҡуймайыҡ



Бер көн автобуста бер ханым юҡтан ғына тауыш сығарҙы ла ҡуйҙы.

Ишекте бөтә көс менән тартҡайны, берәй нәмәһенә зыян килде, шикелле, уныһы яртылаш ябылмай ҡалды. Водителдең:

- Ишекте боҙҙоғоҙ инде, - тип шаяртыуын ысынға алды ла, оло ғауға ҡуптарҙы:

- Һеҙҙең кәлтер-көлтөр йөрөгән автобусығыҙға ултырғанға рәхмәт әйтегеҙ. Боҙоҡ ишек менән кеше ташырға сыҡҡан булғанһығыҙ, хәҙер тейешле урынға шылтыраттым ҡуйҙым!...

Эш аҙағы. Водитель дә көнө буйы бер туҡтауһыҙ руль артында ултырып, бик арыған, күрәһең, яуапһыҙ ҡалманы:

- Урам тулы такси, ниңә йәмәғәт транспортында йөрөйһөгөҙ һуң? Төшөгөҙ ҙә ҡалығыҙ! - тине.

- Нимә эшләргә кәрәклекте үҙем беләм! Күптән "маршрутка"ға ултырғаным юҡ ине, тағы шул хәтлем ултырмаҫлыҡ булдым инде, - ҡатын да һүҙен биргеһе килмәй.

Төрлө яҡтан тыйыуға ҡарамаҫтан, ишек ябылып, ҡуҙғалып киткәс тә, бәхәс дауам итте. Сыҡҡан ваҡытта ҡатын ишекте тәүгеһенә ҡарағанда ла нығыраҡ шартлатып япты. Үҙенән һәм водителдән тыш, салонда тағы унлап кеше барлығын уйлап та бирмәне. Шулай итеп, үҙенсә үсен алды инде.

Автобус йөрөтөүсе лә өндәшмәй ҡалыусыларҙан булып сыҡманы, ауыҙы эсенән нимәлер мығырҙаны ла, әсе телле пассажирҙың асыуын башҡаларға төшөрөргә теләгәндәй, соҡор-саҡырҙы урап үтмәй, алға елдерҙе.

Ошоноң кеүек тупаҫлыҡты, тәрбиәһеҙлекте бөгөн һәр ҡайҙа осратырға мөмкин. Поликлиникала врачҡа сират торғанда ла, магазинда ла, урамда ла.

Яңыраҡ автобустан төшкән ваҡытта тағы бер күңелһеҙ хәл булды. Оло йәштәрҙәге ир бер ҡатындың аяғына баҫҡайны, тегенеһе, "һыйыр"ҙан һалдырып, сарбайлап ҡысҡырып ебәрҙе. Ир кешенең дә нервылары ҡаҡшаған булып сыҡты - яңылыш баҫыуы өсөн ғәфү үтенеү урынына гүзәл затҡа үгеҙ кеүек тарбайып баҫырға түгел, ә боттарын йыйыбыраҡ йөрөргә кәңәш бирҙе. Элегерәк тә автобуста аяҡҡа баҫыу, тапап үтеү була торғайны, әммә бындай әрләшеү, бит йыртыуҙы осратҡаным булманы. Аяҡҡа баҫып, осрашыуға саҡыраһыңмы әллә, тип шаяртыу менән генә сикләнәләр ине. Бер-береһен кәмһетеү, мыҫҡыл итеү һүҙҙәре туҡталышта ла яңғыраны әле.

Ярһып ҡайтып, асыуҙарын ғаиләһенә лә төшөрмәгәндер тип кем әйтһен инде был кешеләрҙе.

Хаҡлы ялдағы бер танышым менән һөйләшеү ҙә минең уйымды раҫланы.

- Күптән ҡалаға сыҡҡаным юҡ ине, - ти ҡала ситендәге биҫтәләрҙең береһендә йәшәгән танышым. - Бер көн магазиндар буйлап йөрөп килергә уйлап, Мәләүезгә килгәйнем, йонсоп ҡайттым. Юҡ, күп йөрөүҙән түгел, кешеләрҙең бер-береһенә насар мөнәсәбәтенән арыным. Урамда йылмайып йөрөгән бер генә бәхетле кешене лә осратманым, тиһәм, бер ҙә хата булмаҫ, моғайын. Һәр кемдең йөҙөндә ниндәйҙер ҡәнәғәтһеҙлек, асыу, ауыр уй бар һымаҡ тойолдо. Бер магазинға ингәйнем, һатыусы менән һатып алыусы әрепләшә. Касса янына ҙур итеп "Үҙеңә ҡарата әҙәпле булыуҙарын теләһәң, үҙең дә әҙәпле бул!" тигән яҙыу элгән булғандар. Был яҙыуҙы кассаның был яғына ғына түгел, ә теге яғына ла элергә кәрәк, минеңсә, сөнки һатыусының үҙендә "әҙәп"тең "ә" хәрефе лә юҡ. Һатып алыусыны яҡлап, бер нисә урындан тауыш сыҡҡас ҡына тынысланды. Билдәле инде, ике кешенең зәһәр асыуынан сиратта торғандар араһында ауыр көсөргәнеш барлыҡҡа килде. Ҡайтҡас та оҙаҡ ҡына тыныслана алмай йөрөнөм әле...

Танышым бик тә дөрөҫ әйтә: ни эшләп кешеләр бер-береһенә, хатта бөтөнләй таныш түгел кешегә лә ҡаты бәрелә, рәнйетә, кәмһетә? Күптәр был һорауға: "Ул насар кеше, шуға бөтәһен дә әрләй, тәнҡитләй, асыулана", - тип яуап бирер. Тик асыулы кешеләрҙең бөтәһе лә насар икән, тип уйларға ярамай. Бәлки, үрҙә атап кителгәндәр үҙҙәренең тормошо менән ҡәнәғәт түгелдер. Ә бәлки, яңы ғына юғалтыу кисергәндер йәки өмөтө өҙөлгәндер, кемгәлер йәки нимәгәлер ышанысы юғалғандыр. Балаларыма бөгөн нимә бешерәйем икән, тип аптырап ҡайтып баралыр йәки фатирға, кредитҡа түләргә ҡайҙан аҡса алырға белмәй асыуы килгән ваҡыттыр. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелеү, яратҡан, аңлаған кеше булмау ҙа кешене ярһыта. Шуға күрә, тупаҫлыҡ ҡорбаны булмаҫ өсөн иң беренсе ваҡытында үҙебеҙҙең телде тыйыу мотлаҡ.

Бәндә булып тыуыу ғына етмәй әле беҙгә. Һәр әҙәм балаһы үҙенең кеше икәнен яҡшы холҡо, әҙәплелеге, тәртибе, ҡылығы менән иҫбатларға тейеш. Шуны онотмайыҡ!

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# МИЛЛИ СӘНҒӘТЕБЕҘ...

## ҡурсаланырға тейеш

***Абдрафиҡ ХӘСӘНОВ, Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһенең Башҡорт драма театры актеры:*** Яңыраҡ апрель айында республикабыҙ кимәлендә көтөп алынған театраль форум - "Театр яҙы - 2017" фестивале булып уҙҙы. Был сара, иң тәүге нәүбәттә, милли театр сәнғәтенең әлеге көндәге кимәлен сағылдырҙы, тиһәк тә булыр: береһенән береһе сағыу спектаклдәр, ҡабатланмаҫ образдар, яңы исемдәр асылды. Дөйөм алғанда, тәьҫораттар ыңғай һымаҡ, сөнки был мөһабәт айсбергтың ҡояшҡа күренеп ялтыраған, һоҡландырған өлөшө. Әммә ул мәғрур боҙҙарҙың һыу аҫтындағы күренмәгән өлөштәре ҡурҡыу уята. Мине, шәхсән, был форумда милли театрыбыҙҙың киләсәге тураһындағы уйҙар борсоуға һалды. Йәш быуын вәкилдәренең, бигерәк тә егеттәрҙең театр сәнғәтенә әҙ килеүен аңлау хәүефләндерҙе. Был мәсьәлә тиҫтә йыл элек кенә көнүҙәк түгел ине. Әммә баш ҡаланан ситтә ятҡан Стәрлетамаҡ, Салауат, Сибай милли театрҙарында хәл киҫкенләшеп, оло проблемаға әүерелә башланы, тиһәк, яңылыш булмаҫ. Мәркәзебеҙ театрҙарына был проблема ҡағылмайҙыр ҙа, бәлки. Сөнки йәш кадрҙар йәһәтенән уларҙың ҡытлыҡ кисереүе икеле: ҡулына диплом алған йәш белгес барыбер баш ҡалала эшкә ҡалырға, шунда төпләнергә тырыша. Ҡайҙа һуң милли театрыбыҙҙың киләсәге булырҙай, батырҙарҙы, башҡорт халҡының аҫыл улдарын сәхнәлә һынландырырлыҡ егеттәр? Был 90-сы йылдарҙағы демографик көрсөк касафатымы, әллә "африканлылар спортта ғәййәр, ә башҡорттар йырлап-бейеүҙә яҡшы" тигән стереотиптан тайпылып, ниһайәт, техник белемгә, бизнесҡа тартыламы йәштәр? Улай булһа, Аллаға шөкөр итергә лә булыр ине, ләкин халыҡтың мәҙәнилеге, рухиәте һағында торған милли сәнғәт тураһында ла хәстәрлек күреү кәрәк бит. Быйыл Мәскәүҙәге Щепкин театр училищеһына махсус курс йыялар, был хуплауға лайыҡ. Әммә ул тәмле "бәлештән" провинциаль театрҙарға берике киҫәк эләкһә, эләгә, эләкмәһә - юҡ. Шуға күрә, милли театрҙарҙың йәш кадрҙарға ҡытлыҡ һөҙөмтәләре аяныслы булмаһын өсөн үҙебеҙҙең театр факультетына абитуриентар ағышын көйләргә кәрәктер. Йәш таланттарҙың күңелен үҫтереп, уларҙың актер булырға тигән хыял-теләктәрен һүндермәй-дүндермәй, киреһенсә, ҡанаттар ҡуйырға өйрәнергә ине. Юғиһә, йәш егеттәр бөртөклө тауарға, дефицитҡа әүерелә бара. Әгәр ҙә киләсәкте уйламаһаҡ, иртәгә сәхнәне 35- 40 йәшлек ҡорһаҡлы малайҙар баҫасаҡ. Тәбиғәткә, кеше физиологияһына ҡаршы барып булмай шул, сәхнә түрендә бөтә нәмә ус төбөндә кеүек күренә. Бөгөндән үк ниндәйҙер кисектергеһеҙ саралар күрмәһәк, иртәгә һуң булыуы ихтимал. Әлбиттә, был эштә һәр милләттәштең үҙ роле: берәүҙәр балаларын сәхнәнән дүндермәй тәрбиәләргә, икенселәр шул балаларға таланттарын үҫтерергә мөмкинлектәр асырға, өсөнсөләр уларҙың хеҙмәтен юғары баһалай белергә тейеш. Милли театр сәнғәтенә, ғөмүмән, халыҡтың рухиәтен һаҡлауға булышлыҡ иткән өлкәләрҙең эшенә һәр бер милләттәш ҡулынан килгәнсе үҙ өлөшөн индереп йәшәһен ине.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй властары "Ғаилә автомобиле" һәм "Беренсе автомобиль" программаларында ҡатнашыусылар өсөн ташламаларға өҫтәмә рәүештә 3,75 миллион һум бүлеп, льготалы автокредитлау тәртибен үҙгәртте. Программаларға ярашлы, ике йәки өс балалы ғаиләләр, шулай уҡ тәүге тапҡыр автомобиль һатып алған рәсәйҙәр автомобиль хаҡынан 10 процент күләмендә бер тапҡыр бирелә торған өҫтәмә ташлама аласаҡ. Шул рәүешле хөкүмәт льготалы ставка буйынса 58,35 мең самаһы автомобиль һатып алыуҙы хупларға ниәтләй.

✓17 июлдән Башҡортостанда йыл һайын уҙғарылған "Трактор" операцияһы башлана. Тейешле указға республика хөкүмәте премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов ҡул ҡуйҙы. Үҙ йөрөшлө машиналарҙы һәм уларҙың тағылмаларын файҙаланыуҙа боҙоуҙарҙы иҫкәртеү айлығы 17 августҡа тиклем дауам итәсәк. Операция барышында машиналарҙың төҙөк хәлдә булыуына, номер билдәләренең теркәлгән мәғлүмәткә тап килеүенә, шулай уҡ водителдәргә махсус техника йөрөтөүгә рөхсәт биреү тәртибенә төп иғтибар бүленәсәк.

✓Өфөлә Рәсәй-Ҡытай студенттары бизнес-инкубаторы үҙ эшен башлай. Йүнсел йәштәрҙең осрашыуы өсөн үҙ майҙансығын Башҡорт дәүләт университеты бирҙе. Юғары уҡыу йортоноң матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, осрашыу сиктәрендә Рәсәйҙән һәм Ҡытайҙан ҡатнашыусылар бер-береһе менән йәштәр бизнесын алып барыу тәжрибәһе менән уртаҡлашасаҡ, шулай уҡ медицина, сауҙа, туризм, лингвистика, экология һәм ауыл хужалығы өлкәһендә үҙ проекттары менән таныштырасаҡ.

✓Башҡортостанда төбәктең Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы өлкән йәштәгеләр һәм инвалидтар өсөн ҡабул итеүсе ғаилә ҡороу мәсьәләләре буйынса "ҡыҙыу линия" ойошторҙо. Граждандарға (347) 286-21-73 телефонаһандары буйынса ҡабул итеүсе ғаиләгә урынлашырға, үҙ ғаиләһенә оло йәштәге кешене йәки инвалидты ҡабул итергә теләүселәрҙән ғаризалар ҡабул итеүсе Республика халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге белгестәре кәңәш бирәсәк.

**"Башинформ"дан.**

✔ *Өфөнө алып ҡараһаҡ, финанс ресурстарының өстән бер өлөшө - республикала, 10 процент самаһы баш ҡалала ҡала, ҡалғаны федераль үҙәккә китә.*



БАШ ҠАЛАМ

# КЕМГӘ - НИМӘ...

**Майҙан алып Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов муниципалитетҡа ҡараған райондарҙа халыҡ менән осрашыуҙар ойоштора. Уларҙа граждандар үҙҙәрен борсоған төрлө мәсьәләләр күтәрә. Кемгәлер йәшәгән йортонда ҡышын стеналарҙың туңып, күгәреүе проблема булһа, бәғзеләрҙе эттәрҙе йөрөтөү өсөн махсус урындарҙың булмауы борсой. Һәр кем үҙ күҙлегенән ҡарағанда мөһим булып торған һорауға яуап алырға тырыша. "Өфө мэры менән осрашыу насип булһа, һеҙ ниндәй мәсьәлә күтәрер инегеҙ?" - тигән һорау менән башланған әңгәмәлә эксперт ролендә - баш ҡаланың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гүзәл ИЛЕМБӘТОВА.**

➔ **Бөгөн баш ҡаланың ғына түгел, республиканың киләсәге булған йәштәрҙең төп проблемаһы нимәлә икән?**

- Баш ҡалала тыуып-үҫмәгән, әммә юғары уҡыу йортон тамамлағандан һуң ошонда эшкә ҡалырға тырышҡан йәштәр өсөн төп проблема - торлаҡ юҡлығы инде. Сөнки Өфөнөкөләр өсөн ата-әсәләре торлаҡ хәстәрләгән инде. Ә бына ауылдан сығыусылар өсөн был төп баш ауырыуы. Беренсенән, ниндәйҙер льготалы программаға инер өсөн мотлаҡ баш ҡалала теркәлеүең булырға тейеш. Торор урыны булмаған кешенең ҡайҙан теркәлеүе булһын? Икенсенән, ипотека проценттары ябай кешенең хәленән килмәҫтәй, күтәрә алмаҫтай ҙур булыуы ла бәкәлгә һуға. Ҙур процентлы ипотеканы түләү өсөн эш хаҡы арыу булған эш урыны булыуы ла зарур. Әммә яңы ғына уҡыуын тамамлаған йәш кешенең ундай эш урыны табыуы бик икеле, ундай урындарға, ғәҙәттә, ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ принцибы буйынса урынлашалар.

➔ **Бер нисә йыл элек баш ҡаланың ИТ-белгестәрен Татарстан Республикаһының күпләп үҙенә ылыҡтырыуы тураһында һүҙ булғайны. Ғөмүмән, Өфөлә үҫеү өсөн мөмкинлектәр бармы?**

- Мөмкинлектәр бар һәм бик күп, әммә барыһы өсөн дә түгел. Шунлыҡтан, йәштәрҙең алдынғы ҡарашлылары сит ҡалаларға, сит өлкәләргә, хатта сит илдәргә китеп үҙ урынын таба. Сөнки уларҙа хеҙмәткәрҙе танышлыҡ буйынса түгел, ә һәләте һәм етештереү ҡеүәте, идеялары, предприятиеға йәки ойошмаға килтергән файҙаһы буйынса баһалайҙар. Иғтибар итһәгеҙ, Мәскәү, Санкт-Петербург һәм башҡа ҡалаларға уҡырға китеүселәрҙең күпселеге республикаға кире әйләнеп ҡайтмай, ҡайтҡан осраҡта ла үҙенә шарттар булдырылыуын беренсе урынға ҡуясаҡ, әммә республика уларҙың талаптарын үтәйәсәге шикле.

➔ **Һуңғы йылдарҙа баш ҡалаға ауылдарҙан эшкә килеүселәр күбәйҙе. Улар, ғәҙәттә, ҡара эш башҡарыусылар. Шулай яйлап ҡала ауылды "йота" тип уйламайһығыҙмы?**

- Ауылдан килеп эшләүселәр ауылдарҙа эш булмағандан, сараһыҙҙан килеүселәр инде ул. Әгәр ауылдарҙа хеҙмәт йәшендәге кешеләр эш урыны менән тәьмин ителһә, берәү ҙә ғаиләһен ҡалдырып, аҡса артынан ил гиҙмәҫ ине. Ләкин улар бер ваҡытта ла тулы хоҡуҡлы ҡала кешеһе булып китә алмай һәм күпмелер ваҡыттан һуң, йәки пенсия йәшенә еткәс, ауылына кире ҡайта. Әле уларға балаларын уҡытырға, аяҡҡа баҫтырыға кәрәк - ошо мохтажлыҡ һәм ихтыяр ғаиләләренән айырылырға мәжбүр итә тип уйлайым. Әммә уларҙың балаларының ауылдан сығып китеп, кире ҡайтыуы бик икеле...

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

МӨҺИМ САРА

# ҮҘ КӨНӨБӨҘҘӨ...

## үҙебеҙ күрәбеҙ

**6-12 июлдә илдең баш ҡалаһында Мәскәү урбанистика форумы (Moscow Urban Forum - 2017) - глобаль мегаполистарҙы үҫтереүгә арналған ҙур халыҡ-ара конгресс үтте. Ул 2011 йылдан даими уҙғарыла һәм Рәсәйҙең, донъяның ҡалалар хакимиәттәре вәкилдәрен, архитекторҙарҙы, ҡала үҫешен күҙаллаусыларҙы, финанс компаниялары етәкселәрен, инвесторҙарҙы һ.б. бергә туплай.**



Быйыл Мәскәү урбанистика форумы тарихында беренсе тапҡыр 400-ҙән ашыу спикер, эшлекле программала донъяның 40 иленән 11 мең ҡатнашыусы һәм сараға килеүсе 30 мең кеше теркәлә. Сараның төп темаһы: "Агломерациялар дәүере. Донъяның яңы картаһы".

Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов йыл һайын унда эксперт булараҡ сығыш яһай. Быйыл ул ҙур ҡалаларҙа һалым һәм һалым булмаған түләүҙәрҙән һуң финанс ресурстарының 8-10 проценты ғына ҡалыуын билдәләп: "Һуңғы ике йылда Өфө Ҡытайҙың өс ҡалаһы менән туғанлашыу тураһында килешеү төҙөнө. Уларҙа бюджет сәйәсәте түбәндәгесә ҡоролған: 33 процент ҡалала ҡала, 33 процент - төбәк хөкүмәтенә, 33 проценты Пекинға күсерелә. Өфөнө алып ҡараһаҡ, финанс ресурстарының өстән бер өлөшө - республикала, 10 процент самаһы баш ҡалала ҡала, ҡалғаны федераль үҙәккә китә. Әгәр Рәсәйҙә шундай бюджет-ара сәйәсәт тормошҡа ашырыла икән, беҙгә ҡабаттан Советтар Союзы дәүеренә кире ҡайтырға кәрәк", - тине. Былай тип әйтеүҙең етди нигеҙе лә бар, сөнки 100 йыл элек Өфөлә 60 мең самаһы кеше йәшәй, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында - 200 меңдән ашыуыраҡ. Уҙған быуаттың 50-се йылдарында Өфө менән Черниковка тоташа, 80-се йылдарҙа ҡала халҡының иҫәбе миллионға барып етә. Барлыҡ инфраструктура, шул иҫәптән трамвай юлдары, күперҙәр һ.б. ул саҡта үҙәктән финанслана.

Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, бөгөн миллионлы ҡалалар бигүк уңышлы старт һыҙығында түгел, яҡшы методологик һәм финанс ярҙамы булғанда ғына уның етди үҫешенә өлгәшеү мөмкин. "Шуға ла беҙгә миллионлы ҡалаларҙағы һәм эре агломерацияларҙағы алдынғы инфраструктура проекттарын федераль үҙәк тарафынан финанслау мәсьәләһенә кире ҡайтырға кәрәк", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

ҠЫҪҠАСА

# ПАРКТАР, ЮЛДАР ЙҮНӘТЕЛӘ

✔ **Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов И. Якутов исемендәге паркта барған ремонт эштәрен тикшерҙе.** Былтыр бында өс йылға иҫәпләнгән киң реконструкция эштәре башланып, күҙалланған күләмдең бер өлөшө тормошҡа ашырыла. Быйыл балалар уйын майҙансығы эшләнә, йәйәүлеләр йөрөгән юлдар һәм яҡтыртыу саралары терәүҙәре ҡоймалана, экоплитка һалына, газондар төҙөкләндерелә, Мәңгелек ут урынлашҡан үҙәк архитектура композицияһы ремонтлана һәм башҡа эштәр башҡарыла. Ҡала мэры реконструкция темптарын түбәнәйтмәү бурысын ҡуйҙы һәм кәңәштәрен бирҙе.

✔ **"Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" өҫтөнлөклө проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә баш ҡалала 29 урам-юл селтәре, дөйөм алғанда 1 млн 112 мең квадрат метрҙан ашыу майҙан ремонтланасаҡ.** Капиталь ремонт эшләнгән урамдарға махсус билдә ҡуйылыуға ҡарамаҫтан, автомобилселәр бик йыш яңы һалынған асфальт өҫтөнән үтеп китә. Бындай ғәмәлдәр кире һөҙөмтәгә килтерә: тәгәрмәс покрышкалары тороšо насарая, асфальт-бетон ҡатламының бөтөнлөгө боҙола, ҡатмаған асфальтта колея барлыҡҡа килеүе ихтимал. Шуға күрә, ҡала хеҙмәттәре автомобиль хужаларынан башҡаларҙың хеҙмәтенә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыуҙарын, шулай уҡ ваҡытлыса уңайһыҙлыҡтарға аңлап ҡарап, йөрөү маршруттарын алдан планлаштырыуҙарын һорай. Әле, мәҫәлән, ҡала үҙәгендә М. Кәрим менән киҫелештә Коммунистик урамының яртыһы транспорт өсөн ябылды. Июль аҙағына тиклем бында тәүлек әйләнәһенә йылылыҡ трассаһын ремонтлайҙар. Мэрияла хәбәр итеүҙәренсә, 20 июлдә ярты төнгә тиклем - урамдың таҡ яғы, 21 июлдә иртәнге сәғәт 8-ҙән 30 июлдә ярты төнгә ҡәҙәр йоп яғы ябыҡ буласаҡ.

✔ **Баш ҡалала Экология йылына арналған "Урманды ҡотҡар!" экологик акцияһы үтте.** Уның маҡсаты - урмандарҙы һаҡлау, ҡала халҡының иғтибарын көнкүреш ҡалдыҡтарын айырып йыйыу проблемаһына йәлеп итеү булды. Акцияны ҡаланың 20-нән ашыу предприятиеһы хуплап сыҡты һәм "Башкирэнерго" яуаплылығы сикләнгән ширҡәт хеҙмәткәрҙәре 460 килограмм макулатура тапшырып, еңеп сыҡты. Был көндә барлығы 2164 килограмм ҡағыҙ йыйылды. Уларҙы ҡайтанан эшкәртеүҙән килгән килем "Ҡаршылыҡтарҙы емереп" тип аталған хәйриә фондына күсереләсәк.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Башҡортостанда йөрөй торған юлға тәүге тапҡыр эксперименталь "шаҡмаҡ билдә" төшөрҙөләр. Ул Өфөлә Әй һәм Революция урамдары киҫелешендә барлыҡҡа килде. Үҙенсәлекле билдә шунан ғибәрәт: тығын ваҡытында киҫелештең уртаһындағы һары һыҙатлы шаҡмаҡҡа сығыу тыйыла. Ул тыйылған зона тип иҫәпләнә - унда туҡтарға ярамай. Әгәр водитель тығын ваҡытында ошо билдәгә сығып, арҡыры йүнәлештә килгән транспортҡа юлды ҡаплаһа, уға 1000 һум штраф һалына.

✔"Салауат Юлаев"та яңы ҡапҡасы. Өфө хоккей клубының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, килешеү ҡапҡасы Бен Скривенс менән төҙөлгән. Уның менән килешеү бер йылға иҫәпләнгән. Канада голкиперының хеҙмәт исемлегендә "Торонто Мейпл Лифз" (2011-2013), "Лос-Анджелес Кингз" (2013/14), "Эдмонтон Ойлерз" (2014/15), "Монреаль Канадиенс" (2015/16), КХЛ-да - Минск "Динамо"һы (2016/17).

✔Өфөнөң Совет районында туғыҙ законһыҙ сүплек юҡ ителде. "Өфө ҡалаһының экологик картаһына" вайымһыҙ булмаған кешеләрҙән уларҙың урынлашҡан урыны хаҡында ғаризалар килде. Атап әйткәндә, коммуналь хеҙмәттәрҙең эшселәре Пролетарҙар, Крупская, Генерал Горбатов, 3-сө Район, Баргузин урамдарында тәртип урынлаштырҙы, тип хәбәр итә район хакимиәте.

✔Башҡортостан Хөкүмәте "Башҡортостан Республикаһының административ-территориаль ҡоролошо" белешмәһен электрон төрҙә ҡайтанан баҫтырып сығарҙы. Белешмә рәсми баҫма булып иҫәпләнә. Унда башҡорт һәм рус телендә республика тураһында дөйөм мәғлүмәт, тораҡ пункттарҙың статусы һәм рәсми атамаһы, тимер юл станциялары һәм уларға тиклем арауыҡ, тораҡ пункттары араһында арауыҡ, халыҡ иҫәбе хаҡында мәғлүмәт бирелгән. Картала автомобиль, тимер юлдары, гидрография, эре һыу объекттары күрһәтелгән.

✔Рәсәй тарих ойошмаһы белгестәре ил тарихы буйынса бөтә дәреслектәрҙең үҙҙәре әҙерләгән концепцияға ярашлы булыуын тикшерҙе. "Һөҙөмтәлә федераль исемләктән концепцияға тап килмәгән 38 дәреслек төшөп ҡалды", - тип хәбәр итте Рәсәй мәғариф һәм фән министры Ольга Васильева. Исемлеккә 14 дәреслек өҫтәлде, улар буйынса уҡыусылар 2017 йылда яңы уҡыу йылын башлаясаҡ.

✓ *Беҙҙән бер ваҡытта ла - дөйөм ятаҡта йәшәгәндә лә, фатирға күскәс тә, кеше өҙөлмәне. Атайым менән инәйем һәр килгән кешегә ярҙам ҡулын һуҙҙы, байрамдарҙа ла ҡунаҡтар килеп тула ине.*

*ӨФӨ БАШҠОРТО*

# ИНГЛИЗ ТЕЛЕН...

## туған тел нигеҙендә өйрәнәбеҙ



**Был тормошта һәр кемдең яҙмышына яҙылған тәғәйенләнеше була. Кемдер дан артынан ҡыуа, кемдер эшенең, йәшәйешенең, хеҙмәтенең баһаһын уҡыусыларында күреп, уларҙың ҡаҙаныштары менән ҡыуанып, ғорурланып йәшәй. Эйе, бөгөнгө ауыр заманда ул да һөнәрен алмаштыра йәки аҡсалы эш артынан китә алыр ине, әммә уның тормош рәүеше - балаларға белем биреү. Рубрикабыҙҙың бөгөнгө әңгәмәсеһе - өс тиҫтә йылға яҡын ғүмерен балаларға инглиз телен өйрәтеүгә арнаған, Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала Башҡорт гимназияһының инглиз теле уҡытыусыһы Диана ЗАКИРОВА. Уның менән бала сағына сәйәхәт ҡылыуҙан башлап, телдәрҙе өйрәнеү мәсьәләләренә асыҡлыҡ индермәксебеҙ.**

➔ **Бөгөн ҡалала башҡорт мәктәптәре, етерлек булмаһа ла, бар, һеҙҙең осорҙа улар бик булмаған да. Ҡайһы мәктәптә белем алдығыҙ, уҡыу йылдары ни яғы менән хәтерегеҙҙә ҡалды?**

- Баш ҡаланың әле үҙем эшләгән 20-се башҡорт мәктәбендә белем алдым. Унда Ильяс ағайым уҡый ине, беҙҙән һуң Светлана һеңлем, өс ҡустым да ошо мәктәпте тамамланы. Мәктәп йылдарын әле лә һағынып, йылмайып хәтерләйем. Башланғыс класта һәйбәт уҡыһам да, уҡыуға бик әҙер булмағанмын, күрәһең, күберәк хистәргә бирелә торғайным. Инәйем: "Беренсе көн мәктәптән ҡайтҡас та, "Шуларҙың каникулдары ҡасан башлана һуң", тип һорАның", - ти. Икенсеме, өсөнсөмө синыфта иртән трамвайҙа сумкамды онотоп ҡалдырып киткәнемде лә яҡшы хәтерләйем, һуңынан инәйем менән депоға барып, эҙләп алып ҡайтҡайныҡ. Класташтарымдың күбеһе менән бер балалар баҡсаһына йөрөгәнлектән, бер-беребеҙҙе белә инек. Ата-әсәләребеҙ тиҫтер, йә курсташтар булды. Белеүемсә, улар ата-әсәләр йыйылышына күберәк берәүһен күрер, аралашыр өсөн йөрөгән, хатта йырлашып та ултырғандар.

Беренсе уҡытыусыма - Рәзинә Фәрхетдиноваға ҙур рәхмәтлемен, ул беҙгә ныҡлы белем биргән, бик талапсан ине, унан хатта ҡурҡа торғайным. Әлеге ваҡытта ла уның күҙҙәре менән генә йылмайған йөҙө, күлдәге күҙ алдымда ап-асыҡ тора. Үҙем мәктәптә эшләй башлағас, ни тиклем көслө уҡытыусыларҙа уҡығанымды бигерәк тә нығыраҡ аңланым. Урта һәм өлкән кластарҙа Марат Хафизовтың, Зөһрә Ҡотошованың - тарих, Фәнзиә Сәләховаҙың - рус һәм рус әҙәбиәте, Мөхәммәт Моратовтың, Мәүлиха Ислахованың, Вилүрә Йәнтүринаның - математика, Татьяна Реговаҡың, Фәриҙә Бикбаеваҡың, Рина Уразаеваҡың инглиз теле дәрестәрен яратып уҡыным. Уҡыусының мәктәпкә, уҡытыуға ҡарата һөйөүе көслө, тәрән белемле, эшен, балаларҙы яратҡан уҡытыусынан тора, бигерәк тә беренсе уҡытыусынан. Үкенескә күрә, әлеге ваҡытта ундай уҡытыусылар бик әҙ.

➔ **Бөтөн нәмә ғаиләләге тәрбиәнән килә, тиҙәр. Ғаиләлә ниндәй тәрбиә алдығыҙ, башҡорт яҙыусыларының китаптарын уҡый инегеҙме, ғаиләлә башҡортса һөйләштегеҙме?**

- Инәйем дә, атайым да эште беренсе урынға ҡуйҙылар. Атайым, Дияс Хатип улы Йәндүрин, бөтә көсөн, ғүмерен Башҡорт дәүләт университетына бирҙе, тарих фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы. Инәйем - Тәнзилә Аҫылғужа ҡыҙының сығышы Тәтегәс бей нәҫеленә барып тоташа, Юрматы ырыуынан, дүрт балалы ғаиләлә тыуып-үҫкән. Аҫылғужа олатайым 1942 йылда һуғышта хәбәрһеҙ юғала, бөтә ауырлыҡ Фатима әләсәйемә төшә. Йәйгенән беҙ уның янында йышыраҡ була, уға "әсәй" ти инек. Инәйем оҙаҡ йылдар балалар йортонда эшләне, унда аҡсаһы ла күберәк, иң мөһиме - күп балалы ҡатын өсөн эштең сменалы булыуы ҡулайлы булғандыр. Сөнки өй эше лә, магазинға йөрөү, бала ҡарау уның өлөшөнә күберәк төштө. Беҙ, ике ҡыҙ, уға бәләкәйҙән ярҙам итергә тырыштыҡ. Ул эштә ваҡытта одеалдарҙан, ултырғыстарҙан өй ҡороп уйнайбыҙ ҙа, уның ҡайтыр ваҡыты етә башлаһа, йүгереп йөрөп өй йыйыштырабыҙ. Иҙән йыуыу, туҙан һөртөү беҙҙең бурыс булды. Атайым инәйемдән иртәрәк ҡайта ла, тәмле итеп ашарға бешерә ине. Беҙҙән бер ваҡытта ла - дөйөм ятаҡта йәшәгәндә лә, фатирға күскәс тә, кеше өҙөлмәне. Атайым менән инәйем һәр килгән кешегә ярҙам ҡулын һуҙҙы, байрамдарҙа ла ҡунаҡтар килеп тула ине. Ғаиләбеҙ ҙур булһа ла, инәйемдең йүнселлеге һөҙөмтәһендә өҫтәлебеҙҙә ризыҡ һәр саҡ мул булды. Ағайымдың дуҫтары, минең, һеңлемдең әхирәттәре беҙгә килеп, ҡунып та ҡала инеләр. Бәлки, шуға ла беҙ ҙә кешеләргә ҡарата асыҡ, ярҙамға әҙер булып үҫкәнбеҙҙер.

Өйҙә бәләкәйҙән башҡортса һөйләштек, йәй ваҡытында инәйем яғына, Ғафури районының Яугилде ауылына ҡайта торғайныҡ. Бала саҡта инәйем һөйләгән "Саҡ-Суҡ" бәйетен илап, Туҡайҙың "Һыу инәһе"н иҫебеҙ китеп тыңлай инек. Инәйем шиғырҙарҙы ла матур итеп, үҙәккә үткәрерлек итеп һөйләне, йырға ла оҫта булды. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙгә, тегене уҡығыҙ, быны уҡығыҙ, тип тылҡып тороусы булманы. Өйҙәге ҙур китапханалағы китаптарҙы һәр беребеҙ үҙ ваҡыты, үҙ теләге менән уҡый башланы. Китаптарҙан тыш, һәр саҡ бер ҡосаҡ гәзит-журнал алдырҙыҡ. Атайым да, инәйем дә буш ваҡыттарында гел уҡыны.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ТАҒЫ ҮҘГӘРЕШ...

**"Страховка пенсиялары тураһында"ғы Федераль закондың 26.1-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" Федераль закон ҡабул итеү һөҙөмтәһендә 2018 йылдың ғинуарынан пенсияның тулы күләме бөтә индексацияларҙы иҫәпкә алып пенсионер эштән киткән айҙан һуңғы 1-се көндән алып түләнә башлаясаҡ.**

Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә аңлатыуҙарынса, пенсияның тулы күләме түбәндәгесә түләнә. Мәҫәлән, пенсионер март айында эштән китте, ти. Апрелдә Рәсәйҙең Пенсия фондына эш биреүсенән пенсионерҙың эшләүе хаҡында отчет килә. Майҙа Фонд пенсионерҙың эшләмәүе тураһында отчет ала. Июндә Пенсия фонды индексацияны тергеҙеү тураһында ҡарар ҡабул итә, һәм июлдә пенсионерға тулы күләмдәге пенсия, шулай уҡ алдағы өс ай - апрель, май, июнь өсөн пенсияның элекке һәм яңы күләме араһындағы аҡсалата айырма түләнә. Йәғни пенсионер эштән киткәндән һуң шул уҡ өс ай эсендә тулы пенсияһын ала башлай, ләкин ошо өс ай компенсацияланасаҡ.

## ҘУР ШЕШӘ ТЫЙЫЛДЫ

**1 июлдән Рәсәйҙә һыраны ҙур пластик шешәләрҙә һатыуға тыйыу үҙ көсөнә инә.**

Законды 2016 йылда Дәүләт думаһы ҡабул итте. 1 ғинуарҙан 1,5 литрҙан күберәк күләмдәге "пластик"та һыра етештереү тыйылды, 1 июлдән иһә ошондай һауытты һатыуға сикләүҙәр индерелде. Закон һыраға ғына түгел, 1,5 литрҙан күберәк күләмдәге башҡа спиртлы продукцияға ла ҡағыла. Был ҡағиҙәләрҙе боҙған компанияларға һәм уларҙың етәкселәренә ҙур штрафтар янай. Юридик берәмектәр өсөн ул - 300-500 мең, вазифалы кешеләргә 100-200 мең һум тәшкил итә. Закон проекты авторҙары билдәләүенсә, илдә "бик күп күләмдә" һыра эсеү күҙәтелә. Пластик һауыттың арзанлығы халыҡҡа ошо эсемлекте һатып алыу өсөн ҡулай, ҙур күләм иһә күберәк эсергә мәжбүр итә.

## АВТОҺӘҮӘҪКӘРҘӘРГӘ

**Рәсәйҙең Эске эштәр министрлығы Дәүләт автоинспекцияһында транспорт сараларын теркәү ҡағиҙәләрен үҙгәртте, шулай уҡ ведомствоның административ регламентына төҙәтмәләр индерҙе. Үҙгәрештәр 10 июлдән үҙ көсөнә инә.**

Документ иҫкереү, коррозия йәки идентификация номерҙары менән ремонтлау һөҙөмтәһендә үҙгәргән транспорт сараларын теркәү тәртибен аныҡлай. Ошондай транспорт сараларын идентификациялау мөмкин булғанда уларҙы теркәргә була. Яңы ҡағиҙәләр транспортты тикшереү һәм документтар йыйыу процедураһын төшөрөп ҡалдырып, уны ҡарау урынына тапшырыу мөмкинлеген күҙ уңында тота. Был Берҙәм дәүләт хеҙмәттәре порталы аша ғариза биргән осраҡта ғына мөмкин. Өҫтәүенә, транспорт сараһын теркәү өсөн мотлаҡ документтар исемлегенән ОСАГО полисы алынған. Ошо хаҡта мәғлүмәттәрҙе электрон тәрҙә алыу ҡаралған. Яңы ҡағиҙәләр мөмкинлектәре сикле кешеләр өсөн транспорт сараларын теркәүҙе лә ябайлаштыра.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Үҫемлек майы

❖ Үҫемлек майын төрлө ауырыуҙарға ҡаршы ҡулланырға була. Ангина, курылдай, тамаҡ ауыртыуын бөтөрөү өсөн 1 ҡалаҡ үҫемлек майын ауыҙға ҡабаһың һәм 15 минут буйына яй ғына һурАһың, йоторға ярамай. Һауыҡҡансы көнөнә 2-3 тапҡыр эшләргә.

❖ Һәр кем йәш булып ҡалырға теләй. Көнбағыш майы менән зәйтүн майын көн һайын ашарға кәрәк. 2-3-әр ҡалаҡ майҙы салаттарға, бутҡаларға өҫтәгеҙ. Икмәк киҫәген майға манып ашарға ла була. Быны ошо ябай ғына ризыҡ ҡартайыуҙы йылата, атеросклероз үҫешен туҡтата, аппетитты аса, иммунитетты нығыта.

❖ Теш ҡаҙнаһы сирҙәренән, ауыҙҙан килгән насар еҫтән 2 ҡалаҡ үҫемлек майына 1 балғалаҡ диңгеҙ тоҙо өҫтәргә һәм ашағандан һуң һәм йоҡлар алдынан 5 минут буйы ауыҙҙы сайҡатырға. Һәр ваҡыт яңыһын әҙерләргә.

❖ Үксә тибенгеһе ваҡытында 1 ҡалаҡ үҫемлек майына бер аҙ нашатыр спирты өҫтәргә. Мамыҡты манып, ауыртҡан урынға һалырға, йылытып бәйләргә, ярты сәғәткә ҡалдырырға. Бер нисә компрестан һуң үксә тибенгеһе бөтә.

❖ Ҙур булмаған яраларҙы ла дауалай. Талғын утта 30 грамм майҙы йылытырға, 20 грамм балауыҙ өҫтәргә, ҡатнашма тигеҙ болғанғансы утта тоторға, ағас ҡалаҡ менән болғатып торорға. Һыҙырылған урындарға һөртөргә, бинт менән бәйләргә. Майҙы һыуытҡыста һаҡларға.

### Колит

❖ Колит - йыуан эсәк лайлалы тиресәһенең шешеүе. 1 литр йылы һыуға 150 грамм бал, 30 грамм ҡорт һеркәһе өҫтәп, бүлмә температураһында әсегәнсе торорға. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 100-әр мл эсергә. Дауалану курсы 1,5-2 ай. 5-10 көн дауаланғандан һуң, дауалану курсын ҡабатларға.

### Диабет

❖ Диабеттан һаҡланыу өсөн 1-әр стакан бәпембә, көртмәле, кесерткән япрағын ваҡлап, 2-3 ҡалаҡ ҡатнашмаға 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойорға, 2-3 сәғәттән һөҙөргә һәм көнөнә 4-5 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Үлән ҡатнашмаһын ҡуланып бөткәнсе дауаланырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Үҙ телен яҡшы белгән кеше сит ил телен дә яҡшыраҡ үҙләштерә. Инглиз һәм башҡорт телдәрендә оҡшаш өндәр бар - был яҡтан башҡорттарға һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә, дөрөҫ ятларға еңелерәк.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Ислам динен таратыуҙа тәүге аҙымдар

Оҙаҡламай Ислам динен Әбү Бәкер исемле бик абруйлы сауҙагәр ҡабул итә. Ул Ҡөрәйш ырыуының Тайм нәҫеленән, Хашим нәҫеленә ҡарамаған мосолмандарҙан тәүгеһе була. Әбү Бәкер Ислам тәғлимәттәрен вәғәзләү эшмәкәрлеген туғандары менән дуҫтары араһында бик әүҙем алып бара. Унан һуң Ислам диненә Әбд Шәмс нәҫеленән булған утыҙ йәшлек Осман әл-Аффан килә.

Кешеләр элек тә, әлеге ваҡыттағы кеүек үк, яңы ҡараштарҙы, яңы тәғлимәттәрҙе бик ауыр ҡабул иткән. Ислам динен дә ҡабул итергә ашыҡмағандар. Өс йыл эсендә ни бары иллегә яҡын кеше генә мосолман булыу теләген белдерә. Уларҙың да байтаҡ өлөшөн Әбү Бәкер күндерә.

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: тәүге мосолмандарҙың төп өлөшөн урта хәлле, сағыштырмаса йәш, көстәре ташып торған, әүҙем, әммә йәмғиәттә тейешле урын алмаған кешеләр тәшкил итә. Ислам диненең тарихынан артабан күренеүенсә, уларҙың күбеһе, ысынлап та, ойоштороу оҫталығы, хәрби һәләт, оратор маһирлығы һәм башҡа сифаттары буйынса милләттәштәре араһында юғары вазифалар биләүгә лайыҡлы булған.

Был осорҙа улар көн һайын осраша, берәйһенең өйөндә йәки Мәккәнән ситкә сығып, намаҙ уҡый, Ислам ҡанундарының аңлашылмаған урындарын Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән һораша.

Оҙаҡламай Ислам динен ҡолдар күпләп ҡабул итә башлай, сөнки Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең өйрәтеүе буйынса, мосолмандар - рухи туғандар, ә туғандар бер-береһенең ҡоло була алмай. Мосолман булмаған ҡолдарҙы ла иреккә ебәреү - сауаплы эш, тип өйрәтә ул. Үҙе иһә, бөтөн ҡолдарына ла азатлыҡ бүләк итә. Уның элекке ҡолдарының күбеһе иреккә ебәрелгәндән һуң ғына Ислам динен ҡабул итә. Башҡа мосолмандар ҙа ҡолдарының Ислам динен ҡабул иткәндәренә азатлыҡ бирә. Ул ғына ла түгел, Исламды ҡабул иткән башҡа ҡолдарҙы ла хужаларынан һатып алып, иреккә сығара.

Тик шулай ҙа Исламдың һүлпән таралыуы Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе ҡәнәғәтләндерә алмай. Шуға ла ул көндәрҙең береһендә Мәккә халҡын йыйып, бөтөн халыҡ алдында сығыш яһарға ҡарар итә.

Был осорҙа Мәккә ҡалаһының дөйөм бер идараһыһы булмай. Ҡала менән нәҫел башлыҡтарының Юғары кәңәшмәһе етәкселек итә. Шул уҡ ваҡытта ҡаланың һәр кешеһе бөтөн халыҡты йыйып алып, мөһим һәм ашығыс белдереү яһау хоҡуғына эйә була. Саҡырыу тауышын ишеткән һәр кешегә майҙанға килеү мотлаҡ һанала. Мәккә кешеләре, ғәҙәттә, ҡала янында ҡоралды кешеләрҙе күреп ҡалған осраҡта ғына халыҡты йыйып алып, белдереү яһай торған булған. Мөхәммәт бәйғәмбәр был хоҡуҡты вәғәз өсөн файҙаланырға ҡарар итә.

Таң менән ул Мәккә уртаһындағы бейеклеккә барып баҫа ла халыҡты саҡыра башлай. Бөтөн нәҫелдәрҙе исемләп атап саҡыра. Таңғы ҡалала уның тауышы шул тиклем көслө яңғырай, йоҡоларынан уянып өлгөрмәгән кешеләрҙең күбеһе, һуғыш башланған икән, тип уйлап, майҙанға ҡоралдарын тотоп килеп етә.

Халыҡ күп йыйыла. Мөхәммәттең ниндәй иғлан яһауын бөтөнөһө лә түҙемһеҙлек менән көтә.

Мөхәммәт бәйғәмбәр Берҙән-бер Алла, Ислам тәғлимәттәре һәм ҡанундары тураһында телмәр тота. Халыҡ тыңлай, әммә ошо хәбәрҙе һөйләү өсөн генә кешеләрҙе ҡара таңдан уятыуына ҡәнәғәтһеҙлек белдерә. Мөхәммәт үҙенең бәйғәмбәр икәнлеген әйткәс, уны әрләргә тотоналар. Оҙаҡламай майҙан тулыһынса әрләү, һыҙғырышыу, хахылдап көлөү тауышына күмелә. Мөхәммәткә артабан һүҙ әйтергә ирек бирмәйҙәр.

Мөхәммәт бәйғәмбәр ҙә, уның тоғро юлдаштары ла, тәүге ҙур сығыштың былай тамамланырын көтмәй, әлбиттә. Тик нисек кенә булмаһын, был сығышы менән Мөхәммәт бәйғәмбәр Мәккәгә генә түгел, бөтөн ғәрәп донъяһына үҙенең яңы тәғлимәттәрен асыҡтан-асыҡ белдерә.

**(Дауамы бар).**

ӨФӨ БАШҠОРТО

# ИНГЛИЗ ТЕЛЕН...

## туған тел нигеҙендә өйрәнәбеҙ



**(Башы 5-се биттә).**

➔ **Тыуған ерҙән торған ер яҡшы, тиҙәр. Ҡалала иң яратҡан урынығыҙ? Мөмкинлегегеҙ булһа, нимәне үҙгәртер инегеҙ?**

- Атайым менән әсәйем университетты тамамлағас, Ильяс ағайымды күтәреп, үҙ теләктәре менән атайымдың ауылына эшкә киткәндәр. Мин - Лағырҙа, Светлана һеңлем Малаяҙҙа тыуа. Атайым аспирантураға уҡырға ингәс, ҡабат Өфөгә ҡайтҡанбыҙ, шуға ла аңлы йылдарым Өфө менән бәйле. Ун йылдан ашыу БДУ-ның беренсе дөйөм ятағында йәшәнек, һуңынан - Октябрь проспектында, аҙаҡтан Ғафури урамына күстек. Шуға ла баш ҡалала яратҡан ерҙәрем ошо урындар менән бәйле - Ғафури, Луначарский парктары, Ағиҙел буйы, Салауат Юлаев монументы, Коммунистик урамын бик ныҡ яратам. Мөмкинлегем булһа, Вәлиди урамындағы элекке заводты һәм әлеге "Мир фирмаһы"ндағы тегеү фабрикаһын ҡабаттан тергеҙер инем, сөнки халыҡҡа эш урыны булдырырға кәрәк. Юҡһа, хәҙер бөтөн кеше һатыу итә, үҙҙәре текмәй, етештермәй, өйҙәр төҙөй - һатып ала алмай, ир-егеттәр эшһеҙ эсеп йөрөй, ауырлыҡ күберәген ҡатын-ҡыҙ иңенә төшә.

➔ **Ул осор башҡорт интеллигенцияһына хас булғанса, һеҙ күп балалы ғаиләлә тәрбиәләнгәнһегеҙ. Бөгөн һәр кем үҙе өсөн генә йәшәгәндә, нимә ул һеҙҙең өсөн туғанлыҡ хисе, туғанлыҡ тойғоһо?**

- Ысынлап та, беҙҙең ата-әсәләр, күп ваҡытта хатта балаларын, ғаиләләрен иғтибарҙан мәхрүм итеп, "эш", тип, "халҡым", тип йәшәне. Бөгөн кеше матди яҡҡа күберәк иғтибар бирә. Минеңсә, иң тәүҙә үҙеңде, ғаиләңде хәстәрләргә кәрәк, аҙаҡ инде хәлеңдән килгәнсә, туғандарыңа, яҡындарыңа һәм халҡыңа хеҙмәт итеү бурыс булып торорға тейеш. Йәһүдтәрҙе алайыҡ - улар балаларына бәләкәйҙән үк дөрөҫ йүнәлеш бирергә тырыша. Атайым менән инәйем ғүмер буйы намыҫлы эшләп, дача, машина, бүтән байлыҡҡа эйә булманылар, уларҙы маҡсат итеп тә ҡуйманылар, кешеләргә ярҙам итеп, үҙҙәре ярҙам һорай белмәнеләр. Беҙҙә лә ундай сифаттар юҡ, бөтә нәмәне үҙ көсөбөҙ, тырышлығыбыҙ менән яулайбыҙ. Һеңлем менән арабыҙ бик яҡын, сит илдә йәшәһә лә, йыл һайын тигәндәй бер-бер артлы уның янына ҡунаҡҡа барабыҙ. Салауат ҡустым да бөтәбеҙгә лә ярҙам итергә әҙер. Ҡалған ике туғаным үҙҙәре ярҙамға мохтаж, фатирҙары юҡ, атай-инәй менән торалар. Шулай итеп, арабыҙҙа ҡайсаҡ төрлө мөнәсәбәттәр булһа ла, бер-беребеҙгә ярҙам итеп, терәк булып йәшәйбеҙ.

➔ **Һеҙ - инглиз теле уҡытыусыһы. Башҡорт телен белһәң, инглиз телен өйрәнеүе еңелерәк, тиҙәр. Ошо фекергә ҡарашығыҙ нисек? Ғөмүмән, телдәрҙе өйрәнеү өсөн нимә кәрәк?**

- Башҡорт дәүләт университетының роман-герман бүлеген тамамлағас, туған мәктәбемә ҡайтып, хәҙер инде унда 27 йыл эшләйем. Тәүге йылдар бик ауыр булды - кабинетым юҡ ине, кабинеттар эҙләп ҡаттан-ҡатҡа йүгергән ваҡыттар ҙа булды, барыбер бирешмәнем, сыныҡтым ғына. Уҡытыусыларымдан өйрәнергә тырыштым, йәш булғангалыр, үҙемә лә ышанысым ҙур ине. Аҙағыраҡ биш йыл инглиз теле буйынса директор урынбаҫары булып, Хәйбуллин Хисам Салауат улының ҡулы аҫтында эшләнем. Талапсан, көслө администратор, алдынғы ҡарашлы, баш эйməҫ кеше менән эшләргә, бер яҡтан, ауырыраҡ булһа ла, күп нәмәгә унан өйрәнеп ҡалдым. Әлбиттә, үҙ телен яҡшы белгән кеше сит ил телен дә яҡшыраҡ үҙләштерә. Инглиз һәм башҡорт телдәрендә оҡшаш өндәр бар - был яҡтан башҡорттарға һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә, дөрөҫ ятларға еңелерәк. Икенсе яҡтан, башҡорт телен белгән кеше генә инглиз телен еңелерәк өйрәнә, тип тә әйтеп булмай. Телде өйрәнеү күп нәмәнән тора: беренсенән, уҡытыусынан, икенсенән, кешенең һәләтенән, өсөнсөнән, иң мөһиме - уның тырышлығынан. Уҡытыусы йүнләп уҡытмаһа, башҡорт теле һиңә нисек ярҙам итһен? "Башҡорт теле аша инглиз телен уҡытабыҙ", тигән фекер ҙә йөрөй. Мин бының менән һис тә риза түгелмен, башҡорт теле нигеҙендә, тиһәк - дөрөҫөрәктер. Беҙҙең осраҡта ҡала балалары күберәк русса аралаша, шуға ла башланғыс синыфта инглиз телен күп осраҡта рус теле нигеҙендә индерәбеҙ. Ғөмүмән, инглиз телен тик инглиз теле аша ғына өйрәнеп була. Бында шуны ла әйтеп китер инем: 2004 йылда гимназия нигеҙендә Рәсәйҙә беренсе булып халыҡ-ара гуманитар программаны тормошҡа ашырыу башланды. Был программаның маҡсаты - Өфө ҡалаһының социаль яҡтан аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрендә тәрбиәләнгән үҫмерҙәр өсөн инглиз телен бушлай өйрәтеү, уларҙың лидерлыҡ сифаттарын үҫтереү ине. Был эштең уңышлы булыуына элекке директорыбыҙ Хисам Хәйбуллин, Америка-Башкорт интерколледжы директоры Вячеслав Швайко күп көс һалды. Гимназиянан проекттың координаторы булып эшләү бәхете миңә тейҙе. Әлеге ваҡытта был халыҡ-ара программа Рәсәйҙең утыҙҙан ашыу төбәгендә уңышлы алып барыла. Ошо йылдар эсендә үҫмерҙәр аҙнаһына ике тапҡыр инглиз телен төрлө ысулдар аша үҙләштерҙе. Программаның иң күңелле өлөшө булып йәйге лагерь тора. Быйыл ул 13-сө тапҡыр үҙенең ишеген 28 бала өсөн асты. Ошо программа арҡаһында балалар йыл буйы американдар менән аралаша, телмәрҙәрен үҫтерә, үҙҙәренең телен, мәҙәниәтен сит ил мәҙәниәте менән сағыштырып өйрәнә ала. Уҡытыусылар өсөн дә был программа бик файҙалы, йыл һайын йәйге лагерь эсендә Өфө ҡала инглиз теле уҡытыусылары өсөн Интерколледж менән берлектә Американан йәки икенсе инглиз телендә һөйләшкән илдән саҡырылған лектор-ҡунаҡтар ҡатнашлығында семинарҙар ойошторола.

Шулай итеп, йыл һайын гимназияла инглиз теленән дәүләт имтихандары иң юғары һөҙөмтә бирә. Күп уҡыусыларыбыҙ инглиз телен үҙҙәренең һөнәре итеп һайлай. Бының менән нимә әйтергә теләйем, беҙ, башҡорттар, үҙ телебеҙҙе генә түгел, мотлаҡ рәүештә сит ил телдәрен, башҡа фәндәрҙе яҡшы белергә тейешбеҙ. Шул саҡта ғына әлеге ысынбарлыҡта юғалып ҡалмаясаҡбыҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

✓ ***Ҡыҙыл Армияға ярҙамға тағы ла һуғышсан, дисциплиналы башҡорт ғәскәрҙәре кәрәк булып сыға. Ленин менән Троцкий бөтә башҡорт ғәскәрҙәрен тиҙ арала Петроградҡа ебәрергә тигән фарман бирә.***



УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!

# ХӘЛИМ ӘМИРОВ

**Автономия өсөн көрәштең башында торған эшмәкәрҙәрҙең күбеһен әле белеп бөтмәйбеҙ, үкенескә ҡаршы. Башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе Зәки Валиди менән иңгә-иң терәп, Башҡортостан мөхтәриәтен булдырыуҙа фиҙаҡәр хеҙмәт күрһәткән шәхестәрҙең күбеһе 30-сы йылдарҙа Сталин репрессияһы ҡорбаны булып, уларҙың яҡты исемдәре нисәмә тиҫтә йылдарға онотолоуға дусар булды. Ошондай шәхестәрҙең береһе Хәлим Насретдин улы Әмиров тураһында һүҙебеҙ.**

Троцкий бойороғо буйынса Башревком май аҙағында Саранск ҡалаһына барып төпләнә. Бында Башҡорт хөкүмәте, тәү сиратта, ҡыҙылдарға сыҡҡандан һуң таратылған ғәскәрҙе тәртипкә килтереү эшенә тотона. Тиҙ арала ғәскәрҙәрҙе туплап, Башҡортостанға ҡайтыу, дошман ҡулында ҡалған йөмһүриәтте азат итеү көнүҙәк маҡсат була.

Хәрби комиссар Зәки Вәлиди элекке башҡорт ғәскәрҙәренән ике кавалерия һәм ике уҡсы полктар ойоштора. Полктар Айырым Башҡорт бригадаһына берләштерелә. Яңы башҡорт ғәскәренә сәйәси комиссар итеп Вәлиди ышаныслы көрәштәштәренең береһе булған, һалдаттар араһында абруй ҡаҙанып өлгөргән эшмәкәр Хәлим Әмировты тәғәйенләй. Сәйәси комиссар булараҡ, Әмировҡа ярайһы уҡ ауыр мәсьәлә йөкмәтелә: яңы шарттарҙа милли ғәскәрҙең рух ныҡлығын тәьмин итеү, башҡорт һалдаттарына автономия өсөн көрәштең ҡатмарлы юлдарын төшөндөрөү. Башҡорт ғәскәрҙәре Көнсығыш фронтҡа барып, йәғни Башҡортостанға ҡайтып, Колчак армияһына ҡаршы һуғышырға ашҡынып тора. Ләкин 1919 йылдың июнендә Троцкийҙың башҡорт полктарын Украинаға ебәреү тураһындағы фарманы башҡорттар өсөн аяҙ көндә күк күкрәгәндәй була. Украинала Ҡыҙыл Армияның хәле мөшкөлләнеү сәбәпле, Троцкий Саранскийҙағы башҡорт полктарын Көньяҡ фронтҡа, Деникин армияһына ҡаршы ебәрергә теләй. Башҡорт вәкилдәре был мәсьәлә буйынса Лениндың үҙенә үк инеп һөйләшеп, аңлатып сыға. *"У меня были представители башкир; просят назначать их войска на восток, а не на юг. На востоке в своем крае они могут, дескать, помочь быстро взять Челябинск, ибо и киргизы пойдут с ними; на юге же они бессильны и боятся, что ничего не поделают. Очень прошу взвесить эти доводы, по-моему, серьезные"*, - тип Троцкийға яҙа Ленин. Әммә Реввоенсовет рәйесе үҙ уйынан кире ҡайтмай.



*Башҡорт кавалерия дивизияһы штабында Петроградҡа яҡынлашҡан генерал Юденич ғәскәрҙәренең һөжүмен кире ҡағыу өсөн план төҙөлгән ваҡыт. Һулдан уңға ултыралар: ВЦИК-тағы Башҡортостан вәкиле Әбдрәшит Бикбауов, дивизия начальнигы Ахлау Ахлов, дивизия комиссары Нуриәғзәм Таһиров, комиссар урынбаҫары Передрий. Һулдан уңға баҫып торалар: дивизияның сәйәси бүлеге мөдире Һиҙиәт Сәғәҙиев, полк командиры Чанышев, Башҡорт республикаһының башҡорт ғәскәрҙәрендәге махсус вәкиле Хәлим Әмиров (Нуриәғзәм Таһировҡа таянып тора), дивизия табибы Козловский. Петроград, 1919 йылдың октябре.*

Әле аҙағынаса ойоштоpолоп бөтмәгән, хәрби кәрәк-яраҡтар менән тейешенсә тәьмин ителмәгән килеш башҡорт полктары Харьков ҡалаһына юллана. Килеп тыуған ҡатмарлы хәлде иҫәпкә алып, хөкүмәт сәйәси комиссар Хәлим Әмировҡа Башревкомдың махсус вәкәләтле вәкиле хоҡуҡтарын бирә, йәғни Украинаға киткән ғәскәрҙәр менән идара итеү бурысы йөкмәтелә. Сөнки башҡорт полктарының берҙәм командалығы булмай, Троцкий иһә, улар Харьков ҡалаһында гарнизон хеҙмәте генә үтәрҙәр, тип ышандыра Вәлидиҙе.

1919 йылдың июнь уртаһында башҡорт ғәскәрҙәре генерал Деникиндың армияһы менән ҡаты һуғышҡа инә. Комиссар Әмиров полк командирҙарын йыйып, кәңәшмә үткәрә һәм 1-се Башҡорт уҡсы полкы командиры Сөләймән Ишмырҙинды бригада командиры итеп һайлайҙар. Ҡыҙылдарҙың 14-се армияһының тулыһынса тарҡалып, тәртипһеҙ рәүештә сигенеүе, Харьковтың улар менән идара иткән оборона Советының аҡтарға һатылыуы арҡаһында Башҡорт бригадаһына ауыр юғалтыуҙар кисерергә тура килә. Фронт тотҡан күрше ҡыҙыл частарҙың сигенеүе арҡаһында башҡорт ғәскәрҙәре аҡтарҙың ҡамауында ҡала. Уның өҫтәүенә, Харьковтың аҡтар ҡулына күсеүендә башҡорттарҙы ғәйепләп, Оборона Советы Сумы ҡалаһында Башҡорт бригадаһының штабын, шул иҫәптән Х. Әмировты ҡулға ала. Бындай хәл башҡорт ғәскәрҙәрендә ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Башҡорт һалдаттары ҡулға ҡорал алып, командирҙарын ҡотҡарырға әҙер була. Быны күреп, Оборона Советы башҡорт командирҙарын ирекке сығарырға мәжбүр була. *"Мы с боем и дорогой, ловя дезертиров, начали пребывать на Сумы. По прибытию первого эшелона - Штаба Башкирской бригады приказом члена Совета Обороны Зайцева, который так позорно раньше всех бежал из Харькова, Сумский отряд во главе с милицией и чрезвычайкой арестовал и разоружил весь Штаб Бригады во главе меня и командиров. Нас представили в округ Военком. Во время ареста наш эшелон подвергался обстрелу, хотя мы не сопротивлялись, потом нас освободили и за свои незаконные действия извинились. Во время ареста оставшиеся караул в нашем эшелоне, назначенный Чрезвычайкой произвел полную очистку вагонов от собственных вещей служащих Штаба Бригады. Пропали: масса денег, вооружения, белья, одежды и т. пр. Это явление на наши части, которые кровью, честно защищали свободу пролетариата Украины, сильно повлияло и нам с трудом удалось их успокоить. Нами Совету Обороны сданы более 10-ти эшелонов с ценностями народного достояния, которые нами были задержаны, так как они следовали без хозяина. Кроме того, проезжало много вагонов с деньгами тоже без хозяина. При таких условиях работать и оперировать на Южном фронте невозможно. Просим сейчас же принять меры к переброске нас на Восточный фронт"*, - тип яҙа бригада командиры С.Ишмырҙин менән комиссар Х.Әмиров республиканың хәрби комиссары Вәлидигә.

1919 йылдың июль башында Көньяҡ фронтҡа хәрби комиссар Зәки Вәлиди килә. Бында яңы килгән һалдаттар командирҙар менән тулыландырылып, Башҡорт бригадаһы Айырым Башҡорт кавалерия дивизияһы тип үҙгәртелә. Ул дивизияның сәйәси комиссары итеп Нуриәғзәм Таһировты тәғәйенләй. Ә Хәлим Әмиров Саранскийға, Башревком ҡарамағына ҡайтарыла. Әммә уға хәрби эштәрҙән оҙаҡ айырылырға тура килмәй.

1919 йылдың сентябрендә Петроград фронтында Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәренең хәле мөшкөлләнә. Юденич армияһы ҡыҙылдарҙы борҡотоп, революцияның бишеге - Петроград ҡалаһына яҡынлаша. Ҡыҙыл Армияға ярҙамға тағы ла һуғышсан, дисциплиналы башҡорт ғәскәрҙәре кәрәк булып сыға. Ленин менән Троцкий бөтә башҡорт ғәскәрҙәрен тиҙ арала Петроградҡа ебәрергә тигән фарман бирә. "Троцкий Бәләбәйҙә ойошторолған өсөнсө һәм дүртенсе йәйәүле, өсөнсө һыбайлы полктарҙы Петроградҡа һөжүм итеүсе генерал Юденичҡа ҡаршы ебәреүҙе талап итә. Мин ул ғәскәрҙе өйрәтеү, бөтә кәрәк-яраҡтар менән тәьмин итеү эштәренең әле тамамланмауын әйтеп, хәҙергә ике батальонды берике аҙна эсендә әҙерләргә полковник Әхмәровҡа әмер бирергә вәғәҙә иттем. Бәләбәйҙәге полковникты телеграфҡа саҡыртып, хәлде аңлаттым. Ул хәҙергә хатта ике батальондың да әҙер түгеллеген белдерҙе. Мин быны иртәнсәк Троцкийға еткерҙем. Был иһә башҡорт ғәскәрҙәренең Юденичҡа ҡаршы һуғышта ҡатнашыуының башланғысы ине", - тип яҙа Зәки Вәлиди.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**
**(Дауамы. Башы 27-се һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Һары ҡыпсаҡтар - половецтар

1078 йылда һары ҡыпсаҡтарҙы ҡомандар тип йөрөткәндәр. XII быуаттың 1-се яртыһында ҡомандар менән һары ҡыпсаҡтар айырыла, һәр урҙаның үҙ биләмәһе була. Урҙа башында хакимлыҡ иткән ырыу һәм уның ханы торған. XII быуат йылъяҙмаларында өс хан хаҡында әйтелә: Селек (1128й.), Бонаҡ (1140й.), Башҡорт (1159 й.) Плетнева Башҡорт хандың урыҫ еренә 20 мең кеше оҙатыуында килеүе хаҡында яҙа. Урҙала йәшәүселәрҙең һанына килгәндә, 1128 йылда Селектең Черниговҡа 7 мең яугиры менән килеүе хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәк. Төп ғәскәрҙең тыуған ерендә тороп ҡалыуын күҙ уңында тотҡанда Селектең урҙаһы 40 мең кешене тәшкил итеүе хаҡында әйтергә була. Далала тағы ла эрерәк урҙалар йәшәгән. Мәҫәлән, Башҡорт хандың янында һәр ваҡыт 20 мең яугир йөрөгән, ә урҙаның төп өлөшө төп йортта ҡалып, бының менән хандың йылдам хәрәкәтен тәьмин иткән. Ошоларҙан сығып урҙаларҙың һаны 20-40 мең кешенән торған тип әйтергә нигеҙ бар. Был һан ул заман өсөн ярайһы уҡ вәкәләтле берләшмә һаналған.

Һары ҡыпсаҡтар Русҡа тәүге һөжүмде 1061 йылда яһай. Урыҫ кенәздәре үҙ-ара ыҙғышыу арҡаһында дружиналарын бер йоҙроҡҡа туплай алмаған. Һары ҡыпсаҡтар урыҫ кенәздәренең Киев Русында тыныс йәшәүендә ҙур роль уйнаған. Киев тәхетенә кенәз билдәләүҙә лә улар төп һүҙҙе әйткән. 1093 йылда һары ҡыпсаҡтар кенәзе Бонаҡ Выдобичтағы Всеволодтың ҡыҙыл һарайын, монастырын үртәп, Киевты баҫып ала. Киев янында икенсе тапҡыр ҡыйратылған Святополк ике яугиры менән генә иҫән ҡала. Святополк икенсе юл һайлай һәм 1094 йылда һары ҡыпсаҡтар кенәзе Туғархандың ҡыҙына өйләнә. Һары ҡыпсаҡтар Русь менән килешеү төҙөү өсөн илселәрен ебәрә. Әммә кенәз үҙенең туғаны Вячеслав менән 1099 йылда ғәскәре менән ҡоро ер һәм һыу буйлап көньяҡҡа ҡуҙғала. Йылъяҙмасы теркәүенсә, быны көтмәгән һары ҡыпсаҡтарҙың ғәскәре ҡыйратыла. Өлкән хан Урыҫаба һәм 19 хан яуҙа башын һала. Уларҙың береһе Билдөҙәне Святополкҡа алып килеп тураҡлайҙар.

Икенсе йылына ҡурҡыу белмәҫ Бонаҡ Шарухан менән Переяславскийҙың йылҡы өйөрөн ҡулға төшөрөп, Русҡа яу менән килә. Мономах ике улы менән уларға ҡаршы торорға өлгөрмәйенсә, бар мөлкәтен һары ҡыпсаҡтарға ҡалдырып ҡасып ҡотола. Олег менән Мономах, Святополктың өлгөһөндә, улдарын шул йылда уҡ хандарҙың ҡыҙҙарына өйләндерә. Һары ҡыпсаҡтар уларҙы баҫып алып, уларҙың ерҙәрендә йәшәй башлай. Мономахтың улы Андрей Туғархандың ҡыҙына 1123 йылда өйләнә.

Святослав һары ҡыпсаҡтар менән солох төҙөп, Игорҙы әсирлектән ҡотҡарыр өсөн хандың яугирҙары менән Новгородҡа килә. Ул Киевты һаҡлаусы ғәскәрҙе ҡыйрата, Игорҙы әсирлектән ҡотҡара, әммә тәхет өсөн көрәш дауам итә. 1151 йылда Изяслав Киев тәхетен ҡулға төшөрөр өсөн Игорға ҡаршы баш күтәрә.

**(Дауамы бар).**

✓ *Был сараларға эләгеүе ауыр, ҡала ерендә уҡыған йәштәрҙең генә мөмкинлеге бар, тип уйлап, көсөн һынап ҡарауҙан ҡурҡмаһын ине йәштәр. Ауыл йәштәренең ҡыҙыҡлы идеялары күберәк була ул хатта.*

# ТОРМОШТА хыялдарҙан,

**Башҡорт йәштәренең Рәсәй, халыҡ-ара кимәлдә үткәрелгән сараларҙа һирәк ҡатнашыуы тураһында һәр ваҡыт борсолоу белдерәбеҙ. Ни өсөн аҡыллы, белемле йәштәребеҙ шундай ваҡиғаларҙан ситтә ҡала, үҙ ҡаҙанында ҡайнап йәшәүҙе дауам итә, тигән һорауҙы күптәргә биргәнебеҙ булды. Был юлы ошо мәсьәләгә асыҡлыҡ индереү өсөн Башҡортостан Республикаһы Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығының баш белгесе Розалия Мортаева, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты башҡорт филологияһы факультеты деканының уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары Азалия Хурамшина һәм Башҡорт дәүләт университеты студенты Ильяс Таштимеров менән тап ошо хаҡта әңгәмәләштек.**

**Йәш быуындың бөгөн нимә менән ҡыҙыҡһыныуын белеүе ауыр түгел, күбеһе компьютер һәм телефон артында, тиҙәр. Һеҙ йәштәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләгән, үҙегеҙ төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашҡан кешеләр булараҡ, уларҙың ҡыҙыҡһыныуҙары тураһында яҡшыраҡ беләһегеҙ һымаҡ...**

**Р. Мортаева:** Күңеленә ятҡан шөғөлө булған йәштәр бөгөн төрлө йүнәлештә эшләй, уларға спорт та ҡыҙыҡ, бизнес та, мәҙәниәт тә. Ә бына IT технологиялар менән ҡыҙыҡһыныусы башҡорт йәштәре, ысынлап та, һирәк. БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы үҙ эшен яратып башҡарған, үҙе һайлаған йүнәлештә үҫешергә теләп, тырышып йөрөгән әүҙем йәштәр менән эшләй. Сөнки улар үҙен дә, эшен дә күрһәтә белә.

**А. Хурамшина:** Йәштәр компьютер артында файҙаһыҙға, ваҡыт үткәреү өсөн генә ултырмай. Һуңғы ике йылда студенттар менән күп эшләйем, улар интернет донъяһынан төрлө йүнәлештәр буйынса үҙҙәренә кәрәкле мәғлүмәтте эҙләй икәнен яҡшы беләм. Был уларға үҙҙәренең тормош маҡсатын ғәмәлгә ашырыуға ярҙам итә. Спорт һәм сәләмәт тормош буйынса Рәсәй кимәлендә лә, республика тарафынан да яҡшы пропаганда алып барылғанға күрә, йәштәр ошо өлкәлә әүҙемләште. Хәҙер төрлө спорт төрҙәре буйынса ил һәм хатта донъя кимәлендәге чемпиондарыбыҙ бар. Спорттан тыш, йәштәр ғилми һәм социаль проекттарын тормошҡа ашыра, мәҡәләләр яҙа, яңы асыштар яһай. Шул уҡ ваҡытта мәҙәни саралар ҙа үткәрәләр, бейеү-йырға маһирҙар күп.

**И. Таштимеров:** Беҙгә барыһы ла ҡыҙыҡ, һәр өлкәлә үҙеңде һынап ҡарағы килә, шуға ла төрлө эштәр менән шөғөлләнәбеҙ. Үҙем спорт яратам, мәктәп йылдарынан уҡ видео төшөрәм, фотолар редакторлау программаларын өйрәнә башлағайным, әле дизайн эшен үҙләштерәм. Дизайн кешенең ижади фекерләү ҡеүәһен үҫтерә, берәй сараны рекламалау өсөн үҙенсәлекле, креатив, зауыҡлы һәм иҫтә ҡалырлыҡ афишалар булырға тейеш бит. Хәҙер техник белемлеләр заманы, тиһәләр ҙә, йырсы, бейеүсе, йәш шағирҙар ҙа күп арабыҙҙа.

**Әйткәндәй, башҡорт йәштәре өсөн үткәрелгән күп саралар һабантуй формаһына ҡоролған. Был уларҙың ихтыяжына ҡарап тыуған сарамы? Белем алыу мөмкинлеге биргән етди сараларҙа үҙебеҙҙең йәштәр ҡатнашамы?**

**Р. Мортаева:** Һуңғы бер-нисә йылда Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы Рәсәй кимәлендә үткәрелгән форумдарға республика йәштәрен йәлеп итеү буйынса форумдар ойоштора башланы. Йәштәргә белемен камиллаштырырға, идеяларын тормошҡа ашырырға һәм фекерҙәштәр табырға булышлыҡ иткән сараларҙы тағы ла әүҙемләштерергә иҫәп тотабыҙ. Былтыр, мәҫәлән, "Уфа-форум"ды үткәрергә ярҙам иткәндә йәштәргә ниндәй йүнәлештәр ҡыҙыҡлы, ниндәй шәхестәр менән осрашып, тәжрибә уртаҡлашырға теләктәре барлығын белдек. Ул форумда йәштәргә тарих, әҙәбиәт, мәҙәниәт өлкәләре менән берлектә бизнес, уңышлы кеше булыу серҙәре, IT технологиялар өлкәһе, PR һәм башҡа йүнәлештәр буйынса лекциялар ойошторолдо, һәр кем үҙенә кәрәкле мәғлүмәт алды. Беҙҙең йәштәр Рәсәй кимәлендәге форумдарҙа әүҙемерәк ҡатнашһын һәм проектарын яҡларға өйрәнһен өсөн район кимәлендә форумдар үткәреп сыҡтыҡ. Тәүге эш - кәүеш, тигәндәй, ҡайһы бер урындарҙа был саралар тейешле кимәлдә ойошторолмағандыр ҙа, бәлки, әммә әүҙем йәштәр үҙенә кәрәкле, файҙалы мәғлүмәт алды. Шунан, алынған белемдәрҙе нығытыу ниәтендә апрелдә Өфөлә "Смарт-тау" төбәк форумын үткәрҙек, унда дүрт йөҙгә яҡын кеше ҡатнашты. Былтыр Волга буйы округының "iВолга" йәштәр форумында ҡатнашырға теләп, 500-ҙән ашыу ғариза килһә, быйыл 700-ҙән ашыу кеше ҡатнашырға теләк белдерҙе. "Территория смыслов на Клязьме" форумында ла ҡатнашып, проекттарына финанс ярҙам алды егеттәр. Был сараларға эләгеүе ауыр, ҡала ерендә уҡыған йәштәрҙең генә мөмкинлеге бар, тип уйлап, көсөн һынап ҡарауҙан ҡурҡмаһын ине йәштәр. Ауыл йәштәренең ҡыҙыҡлы идеялары күберәк була ул хатта. 2014 йылда Октябрьск ҡалаһынан Александр Юдин исемле егет беренсе тапҡыр "Йыл волонтеры" республика конкурсына тәҡдим ителде, шунан 2015 йылда "iВолга" форумына "Лица Победы" проекты менән барып ҡайтты. Унан һуң Волонтерҙарҙың төбәк штабын етәкләне, хәҙер Мәскәүҙә эшләп йөрөй. Бына шулай, иң мөһиме, үҙ көсөңә ышанырға, ниндәйҙер идея булһа, шуны башҡаларға еткерергә кәрәк. Теләгән кешегә мөмкинлектәр күп, "Росмолодежь" Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлығы 30 йәшкә тиклемге йәштәр араһында төрлө конкурстар, форумдар, тренингтар үткәреп тора. Улар ҙа беҙҙең йәштәрҙең иғтибар үҙәгенән төшөп ҡалмаһын ине.

**А. Хурамшина:** Мин байтаҡ форум, конкурс, ғилми конференция һәм башҡа сараларҙа әүҙем ҡатнашам, уларҙа үҙеңә кәрәкле йүнәлеш буйынса һәр ваҡыт мәғлүмәт, белешмә табырға була. Берәй проект буйынса эш башлар алдынан тәүҙә ғилми етәксем Луиза Сәмситоваға мөрәжәғәт итәм. Дәүләт тарафынан ярҙам кәрәк булһа, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы диалогҡа һәр ваҡыт асыҡ, ҡасан мөрәжәғәт итһәң дә, ярҙам итергә әҙер торалар. Һәр хәлдә, дәүләт йәштәргә идеяларын, проекттарын тормошҡа ашырырға башланғыс ярҙам күрһәтмәй тип әйтеп булмай. Бары тик, күптәр ниндәй һорау менән ҡайҙа, кемгә мөрәжәғәт итергә белеп бөтмәй. Ҡағыҙ мәшәҡәтенән, күп кабинеттар үтеүҙән ҡурҡып ҡалыусылар бар йәштәр араһында. Әлбиттә, уларға йомошон ниндәйҙер әҙер схемалар буйынса йомошларға мөмкин булыуы тураһында махсус лекциялар уҡылһа, яҡшы булыр ине. Сөнки хатта эш башлаған бизнесмендарға ла бизнес төҙөү юлдарын, ҡайһы инстанцияға мөрәжәғәт итергә, ниндәй документтар йыйырға икәнен аңлаталар. Йәштәргә лә шундайыраҡ ярҙам кәрәк ине ул.

**И. Таштимеров:** Ысынлап та, кәңәшләшергә кәрәк булған саҡта кемгә мөрәжәғәт итергә белмәгән осраҡтар була. Миңә Йәш яҡташтар берлектәре ассоциацияһы егеттәре-ҡыҙҙары ярҙам итте, ундағы әүҙем йәштәр менән аралашып, һорашып белеп, форумдар һәм проект эштәре менән ҡыҙыҡһынып киттем. Әлегә "Смарт-тау" төбәк форумында ҡатнаштым, был сара тәжрибә уртаҡлашырға, яңы танышлыҡтар булдырырға ярҙам итте. Тырыш йәштәргә ҡарап, киләсәктә шулай уҡ тырыш, әүҙем булырға, уңыштар яуларға маҡсат ҡуйҙым үҙемә.

**Р. Мортаева:** Күп йәштәр министрлыҡтарға йә башҡа дәүләт ведомстволарына мөрәжәғәт итә һәм йыш ҡына идеяһын тормошҡа ашырыу өсөн аҡсалата ярҙам һорай. Әлбиттә, кемгә бина, кемгә транспорт, кемгә кәңәш менән ярҙам иткән хәлдә лә, аҡсалата ярҙамға өлгәшеү бик үк еңел хәл ителмәй. Шуны аңларға кәрәк: әгәр ҙә дәүләттән матди ярҙам алаһығыҙ икән, һеҙ атҡарасаҡ эш дәүләт өсөн икеләтә файҙалы булырға тейеш. Шуның өсөн, дәүләт тарафынан шарттар тыуҙырылмай, тип йә башҡа сәбәптәргә һылтанмау, үҙ идеяңды тормошҡа ашырыу юлдарын эҙләгәндә ныҡышмал һәм тырыш булыу кәрәк йәштәргә. Бер тапҡыр килеп сыҡманы икән, яңынан эш башларға ҡурҡмаһын ине улар. Әйткәндәй, маҡсатлы башҡорт йәштәре юҡ түгел. Мәҫәлән, "Воркаут үҙәге"асырға грант алып, Воркаут фестивале үткәргән егеттәр тәүҙә Әлшәй районы Раевка ауылында ғына эш башлағайны. Александр Гизалов әйтмешләй, лифт менән беренсе ҡаттан икенсеһенә күтәрелгән арала ла үҙ проектын һата белергә тейеш кеше. Әгәр ҙә был эш кемгә, нимә өсөн, ҡайҙа кәрәк икәнен үҙең белһәң, уны башҡаларға ла аңлатып, маҡсатҡа ашырыу мөмкин.

**Ә бына ниндәй проекттарың яҡлау табасаҡ, ҡайһы идеяңды хуплаясаҡтар, ниндәй йүнәлештә эшләгәндә уңыш яуларға була икәнен һәр кем һиҙемләп белергә тейешме?**

**А. Хурамшина:** Мәғариф форумдарында ҡатнашып ҡарамаған йәштәр проект һүҙенән ҡурҡа, был көс етмәҫлек эш тип уйлап яңылыша. 2004 йылдан алып төрлө форумдарҙа ҡатнашам, "Селигер" - хәҙер "Территория смыслов", "Таврида", "Мы - россияне", "iВолга" мәғариф форумдары - иҫкә төшкәндәре генә. Тәүге шарт: һин ҡатнашасаҡ сарала һинең проектыңдың эстәлеге күрһәтелгән йүнәлештәрҙең береһенә тап килергә тейеш. Ҡайһы бер форумда ҡатнашыусы йәштәрҙең кимәле беҙҙең студенттарҙың белем кимәленән дә түбән, проекттары ла мөһим, эстәлекле булмауы бар. Әммә уларҙың проекты еңеү яулай, сөнки улар форумға проектын камиллаштырырға, еренә еткереп эшләргә тип килгән. Әгәр ҙә проектың үҙеңә лә оҡшай, уның буйынса артабан эшләргә теләгең дә бар икән, форумдың һәр көнөндә шул турала башҡаларға һөйләйһең, фекер уртаҡлашаһың, ҡайһы бер етешһеҙлектәрен камиллаштыраһың һәм бөтәһен дә нәҡ һинең проектың еңеү яуларға тейеш, тип күндерәһең. Проектың көслө булмаҫҡа ла мөмкин, ләкин башҡалар шунан да шәп идея юҡ икән, тип уйларға тейеш.

**Р. Мортаева:** Йөҙ кешене ебәрәбеҙ икән форумдарға, шуларҙың унауһы көнө-төнө проекты буйынса эшләп, һөҙөмтәләргә өлгәшеп ҡайта. Күп йәштәр турист булып ҡына бара. Беренсе тапҡыр ҡатнашҡанда проекттары булмаһа, аңларға була әле уларҙы, әммә проекттар конвейерын үтмәйенсә, спикерҙар менән һөйләшмәйенсә, үҫеш тә юҡ. Ә бына ниндәй йүнәлештә эшләнгән проект еңеү яуларға, жюри ағзаларының күңеленә ятырға мөмкин, тигән һорауға килгәндә инде, Азалия әйткәнсә, күңеленә ятҡан һәм ваҡытыңды сарыф итеүе йәл булмаған йүнәлеште һайларға кәрәк. Мәғариф форумдарына барғанда үҙең ҡатнашҡан секцияның темаһына ярашлы һуңғы яңылыҡтар менән мотлаҡ таныш булырға кәрәк.

**А. Хурамшина:** Һәр нәмәнең һөҙөмтәһе булырға тейеш, матди яҡтан ғына түгел, рухи йәһәттән дә. Ҡайһы бер форумдарға мин яңы идеялар ишетеп, үҙебеҙҙә шуларҙы тормошҡа ашырыу юлдарын эҙләргә дарманланып, дәртләнеп ҡайтыу өсөн барам. Һәр нәмә сағыштырыуҙа күренә, тәжрибә туплап йөрөргә һәм файҙалы танышлыҡтар булдырырға кәрәк. Һуңынан ул таныштар менән берлектә берәй ҙур, халыҡ-ара кимәлдәге проект эшләйбеҙ, ғилми хеҙмәт яҙабыҙ, кәңәшләшеп торабыҙ.

**Бынан бер-нисә йыл элек башҡорт йәштәре араһында лидер һаналған йәштәр бөтөнләй башҡа сифаттарға эйә ине. Бөгөн йәштәр өлгө алған лидерҙар ниндәй?**

**Р. Мортаева:** Бөгөн йәштәр аҡыллы, белемле һәм һәр һүҙен уйлап әйткән, күренерлек эштәр башҡарған йәштәштәрен лидер тип күрә. Башҡорт йәштәре араһында тиҫтерҙәренең көс-дарманын позитив, ыңғай, файҙалы яҡҡа йүнәлтә белгән шәхестәр бар. Беҙ уларҙы "Уфа-форум" мәғариф форумы барған саҡта күрҙек, улар һымаҡ маҡсаттарына өлгәшә, үҙ позицияһын дөрөҫ ҡуя белгән лидерҙар менән эшләүе лә еңел. Былтыр ҡайһы бер башҡорт йәштәренең Рәсәй, халыҡ-ара мәғариф форумдарында ҡатнашыуы һәм еңеүҙәр яулап ҡайтыуы ла шундай лидерҙар барлыҡҡа килеүенә бәйле. Республиканың, халыҡтың киләсәген ҡайғыртҡан йәштәр мәғрифәтселек, белем алыу юлына өҫтөнлөк бирә башланы.

**А. Хурамшина:** Әгәр ҙә лидер тип үҙ артынан башҡаларҙы эйәртерлек кеше тураһында әйтһәк, өлкәнерәк бер шәхесте күҙ алдына баҫтырырға кәрәк, минеңсә. Йәш кешегә үҙ тиҫтере артынан барыу перспективалы түгел һымаҡ. Минең өсөн лидер - ул мине шәхес итеп үҫтереүсе ғилми етәксем. Ә йәштәштәр араһында партнерлыҡ, тигеҙ аралашыу мөнәсәбәттәре генә булыуы мөмкин. Борон да башҡорт халҡының лидерҙары аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр булған, улар менән кәңәшләшкәндәр, улар аҡылын тыңлағандар. Сөнки улар донъя күргән, тәжрибәле кешеләр, һәм йәштәрҙе лә нимәгәлер өйрәтә ала. Шуға ла тиҫтерҙәрҙе, үҙемдән йәшерәктәрҙе партнер итеп күрәм, берәй эшкә өйрәтһәм, кәңәш бирһәм дә, тиңдәшем менән мәғлүмәт бүлешеү итеп кенә ҡабул итәм.

***✓ Һуңғы йылдарҙағы һөҙөмтәләр буйынса, 20 йәшкә тиклемге йәштәр араһында тәмәке тартҡан егеттәр һаны кәмей, ә ҡыҙҙар күбәйә. Тәмәке тартыусылар араһында баш ҡалаға ауылдан уҡырға килгән йәштәр күп.***

# ҮҘ УРЫНЫҢДЫ ТАБЫУ...

## ҡыҙыҡһыныуҙарҙан баш ала



Хәҙер күп йәштәр ошолай фекер йөрөтә, һәр кемдең үҙ фекере бар, һәр кем уйлай белә, хатта аралашыу даирәһен дә уйлап һайлай беләләр. Элекке кеүек, берәүҙе лидер тип күреп, бер һүҙһеҙ уның артынан эйәреү, уны юғарыға күтәреү күренеше беҙҙең быуынға хас түгел.

**И. Таштимеров:** Лидер тигәндә, ул кешене башҡаларҙың йөрәгендә үҙ идеяһы менән ут тоҡандыра алған, күңелендә берәй уй, ынтылыш уята белгән шәхес, тип таныйым. Мәктәптә уҡығанда үҙемдән өлкән синыфтарҙа белем алған әүҙем, өлгөлө уҡыусылар минең өсөн лидер булараҡ һынлана ине. Сөнки мин тап уларға ҡарап, шундай уҡ тырыш, белемле, маҡсатлы булырға өйрәндем һәм нәҡ улар кеүек Өфөлә уҡыуымды дауам итергә хыялландым. Мине һоҡландырған, үҙҙәрендәге утты миңә күсергән, шундай уҡ идеялар менән янырға булышлыҡ иткән йәштәр -минең өсөн лидерҙар. Мине лә, минең тиҫтерҙәремде лә ошондай ыңғай, позитив фекерле кешеләр ылыҡтыра ла инде.

**Ә шулай ҙа хәҙерге йәштәр, һеҙ әйткәнсә, үҙҙәренән олораҡтарҙы лидер итеп һанап, уларҙың һүҙенә ҡолаҡ һала, кәңәшләшеп эшләй беләме? Әллә заман башҡа - заң башҡа, тип һанаған йәштәр ололар менән бигүк аңлашып бармаймы?**

**А. Хурамшина:** Бөтәһе өсөн дә әйтә алмайым, ләкин мин белгән йәштәр һәр ваҡыт оло йәштәге тәжрибәле ағай-апайҙарҙың һүҙенә ҡолаҡ һалырға әҙер. Хәҙер бит хис-тойғоларға таянып түгел, төптән уйлап, һәр нәмәнең асылына төшөнөп эш итә торған заман. Һәр ишеткән яңылыҡты, кешенең һүҙен, ҡылығын анализлап, сәбәбенә төшөнә белергә, һүҙенде үлсәп һөйләргә кәрәк. Шуға күрә, ололарҙан кәңәш һорау, проблемаларҙы хәл иткәндә кәңәшләшеү мөһим.

**И. Таштимеров:** Ололар, тигәндә, мин үҙемдән өлкәнерәк йәштәге, ләкин йәш ағай-апайҙарҙы күҙҙә тотам, уларға ҡарап үҙемдә лә лидерлыҡ сифаттары тәрбиәләргә тырышам, уларға ҡарап өйрәнәм. Баш ҡалаға уҡырға килгәндә нindәй сараларға йөрөргә, нindәй эштәр менән шөғөлләнергә икән, тигән һорау килеп тыуғас та, интернет селтәре аша БР Йәштәр берлектәре ассоциацияһы ағзаларының эшмәкәрлеге менән танышып, уларға ылығып киттем. Әле мин ниндәйҙер сараларҙа ҡатнашам, эштәр эшләйем икән, нәҡ шул ағай-апайҙар өлгөһөнә таянам...

**А. Хурамшина:** Был урында бәхәсләшергә була, сөнки мауығып китеү һәм лидер артынан эйәреү - икеһе ике төрлө нәмә. Дуҫтар, таныштар берәй сарала ҡатнашырға саҡырһа, ниндәйҙер эш тураһында һөйләһә, мин дә мауығып китеп, уларға эйәрәм. Улар мине дәртләндерә, сәмләндерә ала һәм беҙ ярышып, берәй эште башҡарырға мөмкинбеҙ. Ә лидер минең шәхесемде үҫтерергә ярҙам итеүсе, үҙенең тормош тәжрибәһенән сығып кәңәштәр биреүсе, юл күрһәтеүсе, аңлатыусы оло йәштәге кеше. Ололар, әлбиттә, йәштәр кеүек һәр яңылыҡты ҡыҙыҡ күреп ҡабул итеп, мауығып китмәй. Сөнки уларҙың донъяға ҡарашы формалашҡан. Ә шулай ҙа ул заман заңын тоя, үҙенә таныш булмаған мәғлүмәтте инҡар итмәй, ә төбөнә төшөп өйрәнә, фекер йөрөтә. Бына шундай заман менән бергә атлаусы оло йәштәге лидерҙар бар һәм мин улар артынан эйәрә торған, уларҙы һанлаусы йәштәрҙәнмен.

**Р. Мортаева:** Гөлфиә апай Янбаева менән бер һөйләшкәндә, ул: "Киске Өфө" гәзите редакцияһында башлыса йәштәр эшләй, тимәк, мин уларға нимә оҡшай, улар нимә тураһында фекер йөрөтә, улар нимә теләй икәнен белергә тейешмен", - тигәйне. Бына шундай үҙенән кесе булғандарҙың һүҙенә, фекеренә ҡолаҡ һала белгән, үҙ тәжрибәһенән сығып, кәңәш итә алған оло быуын кешеләре бар һәм уларҙы үҙеңә өлгө итеп ҡуйырға кәрәк. Донъянан артта ҡалған оло кешеләрҙең һүҙен йәштәр тыңламай, шуға ла, әгәр ҙә лидер оло йәштәге кеше тип фекер йөрөтһәк, уның заман менән бергә атлаған шәхес булыуы мөһим.

**Башҡорт йәштәрен туплаған төрлө йәмәғәт ойошмалары бар, шуларҙың береһе - БР Йәштәр берлектәре ассоциацияһы. Ошондай ойошмалар булыуы йәштәр өсөн нимәһе менән әһәмиәтле, уларҙың эшен нисек баһалайһығыҙ?**

**Р. Мортаева:** Беҙ бөгөн шундай проблемаға килеп терәлдек: йәштәрҙең насар ғәҙәттәргә бирелеп китеүен иҫкәртеүсе органдар бөтәһе лә 18 йәшкә тиклемге балалар менән эшләй. Балалар баҡсаһында, мәктәптә балаларҙы һәм үҫмерҙәрҙе ҡаты контролдә тотабыҙ ҙа, унан һуң уларға иғтибар кәмей. Юғары уҡыу йорттарында иң әүҙем студенттарға ғына иғтибар итәләр, ҡалғандар күҙ уңынан ысҡына. Шуға күрә, 18-30 йәшкә тиклемге йәштәрҙе йәлеп иткән йәмәғәт ойошмалары булыуы бик тә ыңғай күренеш, иң мөһиме, улар дәүләт ведомстволары менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш. БР Йәштәр берлектәре ассоциацияһы беҙҙең министрлыҡ менән дә, башҡа инстанциялар менән дә хеҙмәттәшлек итә, һәр район хакимиәте менән бәйләнеш булдырғандар. БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығында йыл да сәләмәт тормошто пропагандалау, наркоманияны иҫкәртеү буйынса социаль тикшеренеүҙәр үткәрәбеҙ. Һуңғы йылдарҙағы һөҙөмтәләр буйынса, 20 йәшкә тиклемге йәштәр араһында тәмәке тартҡан егеттәр һаны кәмей, ә ҡыҙҙар күбәйә. Тәмәке тартыусылар араһында баш ҡалаға ауылдан уҡырға килгән йәштәр күп. Шуға, ул йәштәрҙе спортҡа ылыҡтырырға, файҙалы эш менән шөғөлләндерергә теләп эшмәкәрлек алып барған БР йәштәр берлектәре ассоциацияһы менән беҙ бәйләнештә булырға тырышабыҙ. Йәштәргә тылҡып, аңлатып тороу кәрәкмәй, уларҙы бары тик ҡыҙыҡһындыра алыу ғына мөһим бит.

**А. Хурамшина:** БР Йәштәр берлектәре ассоциацияһында төрлө район йәштәре бергә тупланған. Быйыл Мәскәү ҡалаһында уҡып ҡайтҡан, Өфөләге алдынғы ҡарашлы йәштәрҙе саҡырып, ойошманың киләһе биш йыллыҡ маҡсатын билдәләр өсөн форсайт-сессия үткәрҙек. Киләсәктә ойошма биш йүнәлеш буйынса эш алып барасаҡ: мәғрифәт, спорт, мәҙәни саралар үткәреү, профориентация, ауыл йәштәре менән эште әүҙемләштереү. Өфөгә уҡырға килгәс тә йәштәр юғалып ҡала, уларҙы үҙ мөхитебеҙгә йәлеп итеп, насар йоғонтоға бирелеп йөрөмәһендәр өсөн һәр кемгә үҙенә оҡшаған йүнәлеш буйынса эшләргә, үҫешергә мөмкинлек бирәсәкбеҙ. Мин Балаҡатай районы йәштәре берлеге рәйесемен, Ильяс Мәләүез ҡалаһы йәштәре берлегендә әүҙем эшләй. БР Йәштәр берлектәре ассоциацияһына күҙҙәре янып торған, республика һәм тыуған төйәктәренә файҙа килтерергә, күтәрергә теләгән, башҡорт халҡының киләсәген ҡайғыртҡан йәштәр тупланған.

**И. Таштимеров:** Мин был ойошмала бик күп йәштәр менән таныштым, дуҫтар таптым, яҡташтарым менән осрашып, тығыҙ аралашып йәшәйем. Иң мөһиме, буш ваҡытты файҙалы, үҙеңә ҡыҙыҡлы итеп үткәреү форсаты табылды. Беҙгә һәр ваҡыт яңы проекттарҙа ҡатнашырға, төрлә саралар үткәрергә, идеялар менән бүлешергә мөмкинлек бирәләр һәм уларҙы тормошҡа ашырыу юлдарын күрһәтеп торалар. Әле мин "Йүгереү клубы" тип аталған проектты тормошҡа ашыра башланым, кискеһен йыйылып, бергәләп йүгерергә һәм физик күнекмәләр эшләргә паркка сығабыҙ.

**Үҙебеҙҙең башҡорт йәштәренә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

**Р. Мортаева**: Ниндәйҙер эш тураһында хыялланып та, уны тормошҡа атҡарыу өсөн бер нәмә лә эшләмәһәң, ул хыял булып ҡына ҡала бирә. Хыялды тормошҡа ашырыу өсөн нимәләр эшләйһең икән, тимәк, ул маҡсатҡа әүерелә. Маҡсаттар билдәләп тә, хыялдарын тормошҡа ашырырға ялҡауҙары килеп, йоҡлап ятмаһындар йәштәребеҙ, тип әйтмәксемен. Халҡыңа, тыуған илеңә файҙалы булырға тырышыуыңды күкрәк һуғып йөрөп кенә түгел, эштәрең менән иҫбатларға кәрәк. Беҙҙе маятник кеүек төрлө яҡҡа тартҡылаған көстәр күп, шулар йоғонтоһона бирелмәҫ өсөн мәктәп йылдарында уҡ үҙеңдә ныҡлы характер тәрбиәләргә, тормошта дөрөҫ юл һайларға һәм тағы... һәр ерҙә үҙ фекереңде белгертеүҙән ҡурҡмаҫҡа өйрәнергә кәрәк. Төрлө сараларҙа ҡатнаш, камиллаш, сығыштар яһа, башҡаларҙы тыңлай, ишеткән-күргән мәғлүмәттәрҙе анализлай бел. Теләк һәм тырышлыҡ менән бөтә ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға була икәнен белһен йәштәребеҙ.

**А. Хурамшина:** Бөтә Башҡортостан йәштәренә мөрәжәғәт итеп, шундай теләгемде еткерер инем: һәр ваҡыт үҙ өҫтөңдә эшләргә, камиллашырға тырышығыҙ. Бының өсөн форумдарҙа ҡатнашыу иң яҡшы вариант икәнен иҫтә тотоғоҙ. Унда ҡатнашып, һөнәрең буйынса яңы белем тупларға, хыялдарыңды тормошҡа ашырырға, алған белемеңде ғәмәлдә ҡулланырға өйрәнергә мөмкинһең. Был форумда ун һигеҙ йәштән алып, утыҙ йәшкә тиклем бөтәһе лә ҡатнаша ала, тип яҙылған икән, һин ауылданмы, ҡалананмы, эшһеҙһеңме, эшләһеңме, яҡшы уҡығанһыңмы, икелегәме - ҡурҡмайынса ҡатнашырға кәрәк. Унан һуң, үҙеңде тейешенсә баһаларға өйрәнергә лә кәрәк беҙҙең йәштәргә. Үҙен кәмһетеп, комплекстарынан арына алмағандар бихисап беҙҙекеләр араһында. Йәштәргә үҫешер өсөн дәүләт тарафынан да бөтә мөмкинлектәр тыуҙырылған, ғаиләһендә лә атаәсәһе балаһын уҡытырға, ярҙам итергә тырышып тора. Матди яҡтан да, рухи яҡтан да үҫешергә ярҙам бар, теләк кенә кәрәк. Шуға, үҙегеҙҙе күрһәтегеҙ, үҫегеҙ, донъя кимәленә күтәрелегеҙ һәм башҡорт халҡын танытығыҙ, тип әйткем килә. Бер башҡорт юғары уңышҡа өлгәшә икән, шуның менән ул милләтен дә таныта - беҙгә шундай шәхестәр кәрәк.

**И. Таштимеров:** Үрҙә әйтелгән һүҙҙәргә ҡушылып, бары тик пассив булмаҫҡа һәм һәр ваҡыт алдынғы кешеләр араһында ҡайнап йөрөргә, үҙеңде төрлө йүнәлештә һынап ҡарарға кәрәк, тимәксемен. Әлбиттә, ололар, тәжрибәлерәк кешеләр әйткән тәнҡитте дөрөҫ ҡабул итә белеү мөһим. Бөгөн республикаға туризм, спорт, иҡтисад, мәҙәниәт, ауыл хужалығы, инвестициялар, башҡорт халҡының йолаларын, рухи ҡиммәтәрен һаҡлауға һәм популярлаштырыуға йүнәлтелгән проекттар кәрәк. Тырышып эшләүселәр беҙ, башҡорт йәштәре, үҙебеҙ булырға тейешбеҙ, сөнки башҡаларҙың беҙҙең мәнфәғәттәрҙе ҡайғыртыуы икеле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уйлыға - уй, тип, фекер йөрөтә белгән, аҡыллы йәштәребеҙгә фәһемле мәғлүмәт булһын өсөн ойошторҙоҡ был әңгәмәне. Әңгәмәләштәребеҙҙең һүҙҙәрефекерҙәре башҡорт йәштәренең күңеленә инһә, сәмләндерһә, дәртләндереп ебәрһә, бик ҡәнәғәт булыр инек.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Тик йөрәге уйнамай ине. Ул ҡаты булып ҡыланырға тырышып маташҡан хужабикәһенә ысынлап асыуланғайны. Үҙен тулатҡан һәм ҡанһыратҡан хәсрәтте эсенә һыйҙыра алмауын нисек итеп аңламаҫҡа була?*



## Сауап

Сәғиҙә ҡарсыҡ туған тейешле берәүҙәрҙең түшәгендә ҡаршы алды ҡыҙын. Терәлеп ултырыр хәле юҡ, әммә үҙ иҫендә ине әле. Асалаҡ-йомалаҡ күҙҙәре менән оҙаҡ текәлеп ҡараны ул ҡыҙына. Иламаны, сарбауламаны, әммә таныуын белдереп, әленән-әле ҡулын ҡыҫҡыланы. Унан ишек яғына ҡулын иҙәне, алып ҡайтыуын, өйөнә күсереүен теләне. Хәтирә бер яҡ ситкә аушайып барған иҫке йортоноң арҡыс-торҡос таҡта ҡатылған тәҙрәләрен асып, ярты көн саң баҫҡан стеналарҙы, өҫтәл-һикеләрҙе йыуҙы ла, ҡалған ҡаралды-түшәкте ҡаҡҡылап, арбаға һалып алып ҡайтты әсәһен. Күрше-тирә, туғандар ярҙамы менән ике айҙай ҡарап ҡалды, бер иртәлә тауыш-тынһыҙ ғына китеп, Аллаһы ҡаршыһына баҫты Сәғиҙә ҡарсыҡ. Сабыр ғына булып йәшәп, үлгәндә лә шулай китте, тип уйланы ҡыҙы, унын вайымһыҙ булып йоҡлап ятҡандай тойолған аҡ сырайлы йөҙөнә ҡарап.

Әсәһен тәрбиәләп ҡуйғас, колхоз рәйесенә барып эш һораны ла, ҡымыҙ һауыуға сыҡты. Ауылдан биш саҡрымдай ятҡан фермаға йәйәү йөрөп эшләй башланы. Кеше менән артыҡ аралашыуҙан тартынған, ҡырҙараҡ, яңғыҙыраҡ йөрөргә тырышҡанға таман булды. Барғансы бер үҙе урман хозурлығына һоҡланып, уйланып барып еткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Йәйләүҙә ятып эшләгән Зәлифә исемле был килендең артыҡ ваҡыты ла юҡ, бер түгел, өс ваҡ балаһы эргәһендә буталанып йөрөй. Ирен дә, бәләкәстәрен дә тәрбиәләү, аш-һыу йүнәтеү, шул арала батман-батман ҡымыҙ менән булыу унын бөтөн көнөн ала. Бейә һауыу һыйыр һауыу түгел ул, бейә малы тауышланғанды яратмай. Бында шулай уҡ мыштырлап йөрөү ҙә бармай. Барыһын да йәһәт-йәһәт, йылдам башҡарырға кәрәк. Юғиһә, бейәләр нисек эйгән булһа, шулай уҡ йәһәт эйһенә лә. Шул арала өлгөрөп ҡалһаң, ҡалаһың, ҡалмаһаң, улар буш имсәкте тартҡылатмай, арт һындарын сойорғотоп, тынысһыҙлана башлайҙар.

Өс көнгә бер ҡырҙа, урманда эшләүсе колхозсыларға ҡымыҙ алып барып килә Хәтирә. Арба егеп, көбөләрҙе шунда нығытып бәйләп ултыртып, Зәлифәнең ике өлкән балаһын иптәшкә алып, урап йөрөп килә.

Бер саҡ бесән эшләүселәргә ҡымыҙ таратып торғанда, таныш тауыштан тертләп, сүмесен көбө эсенә төшөрөп ебәрҙе. Уныһы, тимер нәмә, сумды ла батты.

- Миңә ҡымыҙ не положеномы әллә? - тип шаяртты һаман үҙенә боролғанын көтөп торған Сәғит.

Хәтирә, башҡа сараһы булмай, бороларға мәжбүр булды. Бер секундҡа ғына бер-береһенә күҙ һирпеп алдылар. Ҡатын көсәнеп йылмайҙы:

- Положено ла ул... Сүмес ҡымыҙ төбөндә бит әле.

- Ҡымыҙ төбөндә? Хәҙер беҙ уны... - ир йүгерә-атлай йылға буйына төшөп китте лә, итек ҡуңысынан кинжал сығарып, тал сыбығы ҡырҡып алып, уны япраҡтарынан таҙалай-таҙалай кире килде. - Ҡана, ошоноң менән алып ҡарайыҡ.

Сәғит тырыша торғас сыбыҡ менән сүмес һабының элмәгенән эләктереп килтереп сығарҙы.

- Бына сүмесең, - тип һуҙҙы ла, эҫе ҡояш аҫтында йөрөп ҡарайған йөҙөнә хас булмаған ап-аҡ тештәрен күрһәтеп, тағы көлдө, - ҡулындан әсе ҡымыҙ булһа ла эсәйем әле был ғүмерҙә.

Шул ваҡыт, икеһен дә һиҫкәндереп, мыҫҡыллы тауыш яңғыраны:




- Кеше ирҙәрен ҡарап тороп һуғарған өсөн дә түләйҙәрме әллә?

Сәғиттең ҡатыны Бибигөл ине был. Хәтирә менән яҡындан таныш булмаһа ла, улар тарихты белә. Белә генә түгел, иренең эске кисерештәрен тойоп йәшәй. Нисә йылдар бер түшәк бүлешеп тә, күңеленә үтеп инә алмағанына бары тик ошо "төрөмщик" ҡатынды ғына ғәйепләй. Әллә ҡайҙа йөрөһә лә, унын бәхетен, тыныслығын урлайсы ҡараҡ. Белмәгән көйө күрә алмай, күрмәгән көйө юҡ итергә теләй ул уны.

Ыжламаны шулай ҙа Сәғит. Ҡатынына артыҡ һан бирмәй, күрәһең. Ашыҡмай ғына эсеп бөттө лә, рәхмәт әйтеп, һауытын кире тапшырғас, ҡабаланмай ғына тәмәкеһен ҡабыҙып, китеп барҙы. Хәтирә сүмесен тултырып, Бибигөлгә лә һуҙғайны:

- Шул бер бейә һыҡраһын үҙегеҙ эсегеҙ. Ҡутара һыу ҡушалар ҙа, эсте күптерәләр, - тип ҡул һелтәгән булды. Улай тигәс, Хәтирә лә ҡабат боролоп баҫты, икенселәрҙең һауытын тултырыу менән мәшғүл булды. Тик талағы ташып килгән ҡатындың китә һалырға уйы юҡ булып сыҡты. Сиратҡа баҫҡан ҡатындарға өндәшкән булып, тағы сәнсте:

- Мынау уаҡ балларҙы нимуйҙар эҫелә алып йөрөмәк кәрәк? Кеше балаһын кеше уйҙаймы инде, - арбалағы Зәлифәнең ҡыҙҙары хаҡында әйтеүе. Яуап биреүсе булмауында эше юҡ, һаман тыҡыны:

- Үҙеңдең балаң булһа, шулайтып йөрөтмәҫ инең инде. Төрмәләрҙә йөрөп, бисә йәне ҡалмағандыр.

Йыйылып тороусылар араһында "Аһ" итеп ҡалыусылар булһа ла, береһе лә бәхәскә ҡыҫылманы.

Шул саҡ Хәтирәнең дә теле сыҡты:

- Минең, ярай, төрмәләрҙән төрмәләргә йөрөп балам юҡ, ә һинең, ир яҫтап ятҡан бисәнең, нишләп үҙ балаһы юҡ һуң?

Ике-өс ҡатын тағы "Аһ" итте лә, йәһәт-йәһәт өлөштәрен алып, китеү яғын ҡараны. Бибигөл ярһыны:

- Миндә ней эшең бар һинең? Ишшыу бында, төрөмщиклегән бер дан итеп тора әллә? Ғейверәт! Зат-ырыуыңа бирмәһен Хоҙайым!

Ат ҡуҙғалып киткәс тә тауышы ишетелеп торҙо әле:

- Бур булып төрмәлә ултырып ҡайтҡан кешене әллә нимәһен һаман кеше араһына эшкә алалар! Пирсидәтелгә әйтергә кәрәк йыйылышта! Алаҡанлап, ирҙәргә менеп бара, әй!

Бер ышандырып тотонғас, тип, ҡымыҙ мәле үткәнсе йөрөнө лә, ауылын ҡалдырып китте Хәтирә. Бында башҡаса ҡала алмай ине ул. Ил ҙур, илдә унын кеүектәр аҙ түгел, йәшәр, көн күрер әле. Был юлы Баймаҡ ҡалаһына етеп, үҙе һымаҡтарҙы эшкә урынлаштырыусы кантораға инеп теркәлгәйне, Темәс балалар йортона кер йыуыусы кәрәк булып сыҡты. Шул көндө үк эңер булһа ла йәйәүләп юлға сыҡты ла, таңға Темәскә барып та инде. Алдылар. Шунда ятаҡ мөйөшөнән сыйырсыҡ ояһындай бер бүлмә лә бирҙеләр. Ең һыҙғанып тотондо ла китте ҡатын. Ҡайнар мискәләр өҫтөндә тороп, парлы һауа һулап, ҡыштарын мәкелә кер сайҡап, ҡулдары ҡош тәпәйендәй булып бөткәндә лә, кире уйлар, ҡайҙалыр ынтылыр юлы булманы. Кистәрен детдом балалары менән булашты. Бәләкәйерәктәрҙең өҫтө-башын ямап-тегеп, олораҡтарына бәйләргә, сигергә өйрәтеп, шулар тормошон үҙенекенә ялғап, йыл артынан йыл уҙғарҙы.

Бер мәл генә ғәҙәттән тыш хәл булды булыуын. Ул ваҡиғаны иҫләмәҫкә тырыша Хәтирә, әммә шунда булған бер генә һүҙҙе лә, ҡарашты ла оното ла, хатта саҡ ҡынаға онотоп тора ла алмай.

Бер көн, уйламағанда, Сәғит килеп инде. Плитә өҫтөндәге тимер мискәләрҙә кер ҡайнатып торған Хәтирә, пар араһынан үҙенә яҡынлашып килгән кешене танып, ҡулындағы сепрәк менән тирләгән битен һөрттө лә, ҡаушап ҡарап ҡалды. Тегеләй килеп һаулашты, хәләүәл һорашҡан булды. Ике ҡулын йәйҙе генә ҡатын, бына бит, үҙең күреп тораһың, йәнәһе. Үҙе һаман килеүсенең йөҙөнә текәлгән: нимә кәрәк быға? Кәрәкмәгән нәмәләр һөйләп торғанына үҙенең дә йәне көйҙө, ахыры, ирҙең, ул ҡатындың ағас көрәген тартып алып, ситкә ташланы ла:

- Хәтирә, мин һиңә килдем, - тине, - йәшәргә...

Ҡатын аңламаны:

- Йәшәргә?.. Нишләп миңә?

- Ә кемгә атыу? Һинән башҡа атлығыр кешем юҡ.

- Бисәңде ҡайҙа иттең?

- Ҡайҙа итәйем мин уны... Ҡалды.

Мыҫҡыллы йылмайҙы ҡатын:

- Ҡалай инде, нисек итеп тота килеп кенә төрөмщиккә сығарып ебәрҙе һине?

Сәғит ялбарып ҡараны:

- Ярар инде, Хәтирә, онотайыҡ. Үткәндәрҙең барыһын да һыҙып ташлап йәшәйек, әйҙә.

- Ҡалай анһат, - үҙенең яһиллығына үҙе аптырай Хәтирә. - Ике ҡатын араһында иркәләнеп йөрөмәк булдыңмы? Иркә быҙау ике инәне имә, тип.

- Юҡ, һинең менән генә.

Ир - ҡатынға, ҡатын буғырлап ҡайнаған һыуына ҡарай биреп торғас, етдиләнеп, уйсан ҡарашын күтәрҙе икенсеһе:

- Юҡ, Сәғит. Үткәнемдән бер нәмәне лә онота ла, юя ла алмайым. Мин һиңә тиң түгел, бөгөн булмаһа, иртәгә барыбер кәмһетерһең. Һинән ундайҙы кисерә алмам.

- Хәтирә!.. Ашыҡма яуап менән, - ғорурлығына тейгән ир, ярһымаҫҡа тырышып, тешен ҡыҫа.

- Бында уйлап тораһы юҡ. Йөрөмә юҡ менән булып! Бар, ҡайт!

- Хәтирә!.. Телмә йәнемде... Мин һиңә кешесә әйтәм... Һуңғы тапҡыр.

- Булмай... Сәғит. Зинһар... кит.

Боролдо ла китте. Ике-өс аҙым эшләүе булды, быу пәрҙәһе ҡапланы. Әйтерһең, шул томан араһынан пәйҙә булған да, күҙгә күренер-күренмәҫтән юҡ булған. Мөғжизә йәки серле күренеш кеүек.

Иламаны был юлы Хәтирә. Үтә ҡыҙыулыҡ менән эшен дауам итеп алды ла китте. Бары йөрәгенең тора-бара ҡыҫып-ҡыҫып ауырта башлауына иғтибар итмәгәндә, уны был мәшәҡәттәренән туҡтатыр хәл дә булмағандай ине. Тик йөрәге уйнамай ине. Ул ҡаты булып ҡыланырға тырышып маташҡан хужабикәһенә ысынлап асыуланғайны. Үҙен тулатҡан һәм ҡанһыратҡан хәсрәтте эсенә һыйҙыра алмауын нисек итеп аңламаҫҡа була? Һәм һыйҙыра алманы йөрәк, тотто ла йыртылды. Дауаханала ай дауамында ятып, табиптың аңлатыуын тыңлап, хайран булып ултырҙы Хәтирә: йөрәк тә йыртылып китә икән...

* * *

Ай артынан ай, йыл артынан йылды ялғап, сираттағы Яңы йылды ҡаршыларға йөрөгәндә, хат ташыусы Хәтирәне юллап килеп инде.

- Ишмөхәмәтова Хәтирә, - тип ҡысҡырҙы ишек төбөнән үк.

Хәтирә уға ҡаршы сыҡты:

- Мин инем. Ни булды?

- Һеҙгә хат!

Ҡатын ашыҡманы:

- Миңә кемдән хат булһын ул? Яңылышҡанһығыҙҙыр...

Хат ташыусы асыуланғандай итте:

- Нишләп яңылышайым инде? Уҡый белмәйемме әллә?

Килеп алырға тура килде. Ҡараһа, ысынлап, уға төбәлгән. Почтальондың китеүе булды, ишек яңағына һөйәлеп, конвертты йәбештерелгән еренән асып, битте тартып сығарҙы. Ҡатын-ҡыҙ ҡулы. Хас Ғәлимәнеке кеүек тигеҙ, матур хәрефтәр менән яҙған. Әйләндереп-тулғандырып ҡарағас, яҡтығараҡ һуҙып, уҡый башланы. Уҡыған һайын күҙҙәре ҙурайҙы, ауыҙы асыла барҙы. Унан, тамам хәле бөтөп, тәнтерәкләп барып тыш яҡтағы эскәмйәгә терәлде. Ултырғас, яңынан башлап ҡабатлап уҡыны. Тағы күҙ йүгертеп сыҡҡас, ҡырҙағы тау түбәләренә төбәлеп ҡалды. Хат таныш булмаған ҡатындан ине. Ул күршеһе хаҡында яҙа. Күршеһе, ике аяғы ла эшлектән сыҡҡан ир, бер үҙе донъя көтә икән. Уны, инстульттан һуң, аяҡтары йөрөмәҫ булғас, ҡатыны, ике балаһын алып, ташлап киткән. Хәҙер инде ул хәлгә өс йыллап ваҡыт үткән. Түше менән шыуып йөрөп эштәрен башҡара, хатта баҡса үҫтереп маташа, тигән. Ҡайһы саҡ улар һөйләшеп ултыра.

Ғәриптең ике һүҙенең береһендә - Хәтирә. Шуға күршеһенең хәлен белгертеү өсөн Хәтирәне күптән эҙләгән был ҡатын. Ғәрип ир - Ғимран. Хат эстәлеге ҡыҫҡаса шулай ине.

Икенсе көн директорға ғариза менән инде Хәтирә. Етәксе, унын яҙмаһын ҡарап сыҡҡас, ултырырға урын күрһәтте.

- Ниндәй сәбәптән улай?

- Ирем хаҡында хат алдым... Аяҡһыҙ ята, тиелгән.

- Ирең? Ирең бар инеме ни һинең? - Директор, оло йәштәге ҡатын, күҙлеген төшөрә биреп төбәлде. - Нисә йыл эшләнең әле һин беҙҙә? Арыуыҡ түгелме?

- Ете йыл була яҙҙы.

- Ете йыл буйына... ирең ҡайҙа булды һуң?

- Ул... Өфө эргәһендә йәшәне. Икенсе ҡатын менән...

Етәксе аңларға теләй:

- Һуң?..

- Ҡатыны киткән, тип яҙалар. Бер үҙе, тиҙәр.

- Хәтирә! Хәтирәкәй... Ҡатыны ташлаған ғәрип иргә ҡабаттан бармаҡсыһыңмы? Бигерәк уйһыҙ хәл итәһең бит, балаҡай!..

Ҡатын алдына ҡарап, яуапһыҙ ҡалды. Нык ҡымтылған иренәнән уның уйынан кире ҡайтмаҫы билдәле ине инде.

- Йәл, бик йәл... - балалар йорто директоры, ҡулына ҡәләмен алғас та һаман һүҙҙы. - Өйрәнешеп бөткән инек бит әле...

Унан, ниһайәт, имзаһын һалды.

- Әгәр... бер-бер хәл булһа, тим инде, ҡайт кире, урыныңа ваҡытлыса ғына алырмын кешене лә.

Хәтирә дәртләнеп тороп баҫты:

- Рәхмәт, Әлмира апай. Ҡайтмаҫмын инде... көтмәгеҙ.

Оло ҡатын ашығып сығып барыусыны бошонҡо ҡараш менән оҙатып ултырып ҡалды. Дә-ә, тормош...

* * *

Хәтирә әбейҙең Бетерә буйындағы кескәй бер йортто һатып алып күсеп ҡайтыуына сәйерһенмәне ауылдаштары. Күптәр шулай ҡартайып ҡайтып төшә бит тыуған ерҙәренә. Үлергә тип...

Етмешенә аяҡ баҫҡан инәй әле шәп, күнәкләп һыу ташып мейесен йүнәтеп алды, тыш яҡтан бүрәнә араларын һыланы. Ҡойма-аҙбарҙарына ирегеттәрҙе ялланы, яңы бәҙрәф яһатып ҡуйҙы. Иртәгәһе көн картуфлығына трактор ҙа инеп сыҡты. Сәсеүгә һуңлаһа ла, ҡыйы күпереп ултырмаһын, тигәндер.

Ауылда йәштәр уны танымай ҙа инде. Яҡынса ғына кем булыуын беләләр белгәндәр. Унда ла, шуларҙың туғаны, тип кенә. Бабайы үлгән дә, шуға күсеп ҡайтҡан, тиҙәр. Унығының ҙурайтылған кәртешкәһен түрәнә элеп ҡуйған. Ингән кешегә күрһәтеп һөйләп ҡала: "Ғимран бабайың ошо... Партийный работник булды... Настаящий камунис ине... Егерме йылдан ашыу кәләскелә ултырһа ла, бирешмәне. Үлә торған көн дә, һайлауға барып ҡайтып, ятып үлеп китте... - Шунан тағы: - һайлауҙа ошо дикламасияны һөйләне, - тип ҡулдарын һелтәп ебәреп, Ленин бабайға бағышланған шиғыр уҡып ебәрә. - Шулай шәп булды ул минең бабай..."

Мунсаға ҡусты тейеш кешеһенә йөрөй әбей. Кышҡы кис, мунсанан һуң, хужаларҙың үҫмер ҡыҙы уны санаға ултыртып алып китеп бара. Сана менән тиҙерәк, ҡыҙ клубка ҡабалана, унда әбей ҡайғыһы юҡ. Шуға йүгерттереп килә. Оло урам аша үткәндә, Хәтирә, һәр ваҡыттағыса, йырларға куша:

- Ҡыҙым, манау тәңгәлдә аҡрынлаҫәле. Йырлайыҡ! Бибекәй беҙҙә байрам итеп йөрөй тип уйлаһын. Эсе көтөрҙәһен әле.

Ҡыҙы инде нисә ҡат әйткәнен ҡабатлай:

- Бибекәй әбей һаңғырау ҙа инде!

- Үҙенә кәрәген ишетә ул! - ти ҙә, йырлап та ебәрә:

Витир дуйыт, витир дуйыыт!
Кагда дуйыт, кагда ни-ит!
Мой любимы-ый... һарактерны-ый!
Кагда лювит, кагда ни-ит!
Э-эй!

Унан, дебет бейәләйле ҡулы менән ауыҙын ҡаплап хихылдай, күнеле шаҡтай күтәрелеп һөрәнләй:

- Эй, ҡылдыҡ бит, ҡыҙым, Бибекәйҙе! Ярыла яҙып ултыра микән!

Йәш ҡыҙ был инәйенең оҙаҡ йылдар ҡайҙарҙалыр урыҫ араһында йәшәп ҡайтҡанын белә, шунлыҡтан унын шаярғанда ошондай таҡмаҡтар йырлауына ла, беҙҙең халыҡҡа ятыраҡ булған мәрәкәләренә лә иғтибар итмәй, етдигә алмай уны. Шуға ла инде был күренешкә көлмәй ҙә хатта.

Сана елдерә генә. Әбейҙең сибек тауышы тәтән менән ыҫланған ҡышҡы ауыл урамында һибелеп ҡала. Әлбиттә, уны Бибигөл әбей, шулай уҡ күптән бабайын юғалтып, балаһыҙ ҡартайған ҡортҡа, ишетмәй. Әммә был йыр ошонан үткән һайын башҡарыла килә. Ысынында, Хәтирәнең үҙе өсөн йырланалыр ул йыр.

- Мой люви-имый... һаракте-ерный... - тип мөңгөрләй әле ул, тунҡанлай-тунҡанлай тупһаһынан күтәрелгәндә лә, - Кагда лю-ювит... кагда нит...

Ә бәләкәй өйө алдында, ҡалын боҙ ҡатламы аҫтында, унын йырына шаршы ҡушыла. Бетерә шаршыһы. Үҙе кеүек теремек һәм тиктормаҫ, көслө һәм бошонмаҫ, үткен һәм сая балаһының тауышын танып, тойоп, ауаздаш булыуы. Был моң, йылға уртаһына уйылған мәкенән урғып сығып, яр буйҙарына, ҡаршы тауҙағы ҡарағайҙарҙы шартлатып һалҡын һауаға, йылтыр йондоҙҙар баҙырашҡан салт күккә тарала. Был моңдо ул бынан меңәр йыл әүәл дә моңлаған, бынан меңәр йыл элек тә уны һыуын һыулағандарҙың барыһы ла тыңлаған. Әле лә сылтырай, әле лә тыңлайҙар. Һәм... сылтырар ул, моңланыр, йырлар... Тыңларбыҙ.

(Аҙағы. Башы 16-27-се һандарҙа).

ЗАУЫҠ

Салауат ӘБҮЗӘР

# ШИҒЫР - МӨХӘББӘТ КЕҮЕК УЛ,

## Һөйөү утылай илһам...

### Һөйәк

...Йөрөнөм инде мин дә ижад, тиеп, -
Яҙғандарым ыуаҡ-төйәк булды.
Ҡайнап торған шиғыр баҙарына
Сығарғаным итһеҙ һөйәк булды.

Күптәр ыңғайына быҫҡып йәшәп,
Әүерелдем мин дә "уртаса"ға.
Ә шулай ҙа... (әгәр ҡайнатҡанда),
Һөйәктән дә татлы һурпа сыға...



### Шар

Ел осорған шар артынан
Йүгергән малай кеүек,
Минең йөрәгем һаман да
Хыял ҡыуалай кеүек.

Ана тотам, бына тотам
Тик бер генә уҡталһам...
Мин йүгергән һайын ҡаса,
Туҡтай, әгәр туҡталһам.

"Тота яҙып ҡына ҡалдым!"-
(Шуға ла шатланаһың!)
Өмөтләнеп, тағы ҡыуаң, -
Шар ғына шартламаһын...

* * *

Йоҡлай халыҡ, йоҡлай милләт,
Йоҡлай әле батырҙар...
Йоҡлаһындар!.. Бер көн килеп,
Типкеләп уятырҙар!..

### Беҙ!

Беҙ - ирекле ирекһеҙҙәр,
Беҙ - ҡол түгел ҡолдарбыҙ!
Беҙ - хоҡуҡлы хоҡуҡһыҙҙар,
Беҙ - юлсылар юлдарһыҙ!

Беҙ - күҙле килеш һуҡырҙар,
Беҙ - телле көйө телһеҙ!
Беҙ - ишеткән һаңғырауҙар,
Беҙ - илле көйө илһеҙ!

Беҙ - тоҡанмаған уттарбыҙ,
Беҙ - йәйә, ләкин уҡһыҙ!
Беҙ - йөрәкле йөрәкһеҙҙәр,
Беҙ - була тороп, юҡбыҙ!

### Аладдин шәме

Теләктәреңде үтәрмен,
Һин әйт кенә, йәме!
Минең күкрәгемдә ята
Аладдин шәме.

Бар теләгең ҡабул булыр,
Мин - ҡолоң һинең!
Йөрәкте асып сығарҙың
Мөхәббәт енен...

* * *

...Әллә нишләне лә ҡуйҙы, -
Ара тора боҙолоп.
Бөгәрләнеп кенә ята
Ҡуйынымда боҙ булып.

Йыуатып һүҙ әйткән булам,
Ҡарайым инәлеп тә...
Әллә нишләне лә ҡуйҙы, -
Килмәгәс килмәй ипкә.

Һөйләшмәй бына нисә көн,
Йылмаймай нисәмә ай.
Ни ҡылырға ла белмәйем
Артабан барһа былай.

Әллә... ғашиҡ булды микән,
Ташларғамы самалай?..

Уйламаған уй ҡалманы,
Баш ҡатты инде, малай.

Тағы күпме ғазаплар ул,
Йөрәкте күпме һығыр?..
Әллә нишләне лә ҡуйҙы...
Ни булды һиңә, Шиғыр?

### Ҡәҙерле кеше

Минән ҡәҙерле кеше юҡ,
Китерлек иҫең!
Күпме халыҡ башын вата
Тик минең өсөн.

Ҡайҙан беләләр хәлемде -
Ултыр ҙа ила...
Һәр бер әйткән һүҙҙәренән
Күңелем тула.

Иҫәпләйҙәр эш хаҡымды:
"Әҙ!" - тип көйәләр.
Хатта талашып китәләр,
Өҫтәл төйәләр...

Тыңлай-тыңлай, үҙ-үҙемде
Ҡуям йәлләп тә:
Мин йәшәргә тейеш икән
Күптән йәннәттә!

Төшөмдә түгел был хәлдәр,
Бара өнөмдә.
Иң ҡәҙерле кешемен мин
Һайлау көнөндә...

### Шиғыр

Шиғыр - мөхәббәт кеүек ул,
Һөйөү утылай илһам...
Ғүмергә яныр йөрәгең,
Бер тапҡыр ғашиҡ булһаң.

"Яратам!" тип әйтмәй генә
Яраттыра ул шиғыр.
Йоҡоларыңдан уятып,
Йөрәк майыңды һығыр.

Көсләп ғашиҡ итеп булмай,
Яратып булмай көсләп.
(Ул утта яныу ләззәте
Татылмай шиғыр "эшләп").

Шиғыр - мөхәббәт кеүек ул,
Күҙгә эркелгән йәштәй...
Улар ике игеҙәк булып,
Йөрәк түрендә йәшәй!

* * *

...Борондан ата-бабалар
Эшләгән башын эйеп:
"Матур тормошто, исмаһам,
Балалар күрер", - тиеп.

Ғүмер буйы килә шулай,
Үҙгәрмәй донъя хәле.
Эшләйбеҙ: "Беҙҙең балалар
Матур йәшәрҙәр әле..."

* * *

Хоҙай алдында тигеҙбеҙ,
Бер кемгә айырма юҡ.
Батшаға ла шул бер ҡояш,
Ҡотоусегә лә шул уҡ.

Бер үк йыһан, бер Ер шары,
Бер үк һыу, бер үк һауа.
Бер үк ҡоштар моңон түгә,
Бер үк ямғырҙар яуа...

Был һүҙҙәрем асыш түгел,
Быны һәр кем дә белә.
Тик ҡотоусе булғы килмәй,
Батша булаһы килә...

### Бөйөктәр

Илем тулы музей, һәйкәл:
Ҡайҙа ҡарама - бөйөк.
Шул бөйөктәрҙе күрергә
Барабыҙ башты эйеп.

Уларҙан ҡалған мираҫты
Ҡайҙан, нисек табалар?
Кейеп йөрөгән ҡатаһы,
Өҫтәл, һауыт-һабалар...

Әйтәләр: бынау ҡайынға
Һөкланып, һөйөп киткән.
Ә бынау ҡыуаҡ төбөнә
Туҡталып, һейеп киткән...

Киләсәктең бөйөктәре
Арала йөрөй бөгөн.
Бер һүҙем дә юҡ уларға -
Илдә күп әле сөгөн.

Тик башҡа һыймай шуныһы:
(Оҡшамаҫ минең ҡылыҡ).
Ниңә бөйөктәр илендә
Йәшәйбеҙ меҫкен булып?

* * *

Кеше битлек менән йәшәй, -
Бер кемде булмай танып.
Мәмерйәнән сыҡтыҡ та беҙ,
Йәшәйбеҙ маймылланып.

Хәҙер атом бомбаларын
Тотторҙоҡ беҙ маймылға:
Бәхет, шатлыҡ, ҡыуаныстар
Теләп киләһе йылға.

Дарвинизм тәғлимәте
Һаман да аңды быуа.
Маймылдан кеше тыумай ул,
Кешенән маймыл тыуа!

### Ҡунаҡсыллыҡ

Ҡунаҡсыл ул беҙҙең халыҡ.
Ҡунаҡ килһә, табын ҡорған
Һәм ҡалъяның иң һимеҙен
Ҡунағына һоғондорған.

Халҡыбыҙҙың был йолаһы
Ҡаныбыҙға һеңгән һымаҡ.
Күпме тапҡыр һыйлаһаҡ та,
Туя белмәҫ булды ҡунаҡ.

Һоғондо ул бар байлыҡты,
Иркебеҙҙе һоғондо ул...
Нәфсеһенә хужа булмай,
Еребеҙгә йоғондо ул.

Кикерә-кикерә һыйланды ла,
Маҡтай-маҡтай ашыбыҙҙы,
Хәҙер килеп, һоғонорға
Теләй беҙҙең башыбыҙҙы!

Шапылдата ябырлыҡ бер
Юҡ бит шунда ишеге лә!..
"Беҙ - ҡунаҡсыл", тигән һүҙҙәр,
"Беҙ - ҡол", тиеп ишетелә!..

*✓ Көн һайын биш сынаяҡ татлы сәй эсәһегеҙ икән, йылына бер килограмм артыҡ ауырлыҡ йыяһығыҙ. Был сәйҙән генә, уға ҡушып тәмтом да ашайһығыҙ икән, хәл тағы ла ҡатмарлаша.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЯЛ КӨНӨ...

## оҙағыраҡ йоҡла

■ Америка ғалимдары диеталар, ябығыу темаһына яңы тикшеренеүҙәр уҙғарған. Һомғол буй-һын тураһында хыялланғанда рациондан сәйҙе тулыһынса алып ташларға кәрәк, ти улар. Сәй сәләмәтлеккә зыян килтерә алмай, әммә йыш ҡына сәй эсеү ғәҙәте бөтөн тырышлыҡты юҡҡа сығара. Етмәһә, сәйгә шәкәр һалып эсеү ғәҙәте зыянлы. Бер сынаяҡ сәйгә 1-2 балғалаҡ шәкәр һалаһығыҙ икән, был организмға кәрәкле уртаса калорияларҙың өстән бер өлөшөн тәшкил итәсәк. Шулай итеп, көн һайын биш сынаяҡ татлы сәй эсәһегеҙ икән, йылына бер килограмм артыҡ ауырлыҡ йыяһығыҙ. Был сәйҙән генә, уға ҡушып тәм-том да ашайһығыҙ икән, хәл тағы ла ҡатмарлаша. Шуға ла ғалимдар сәйгә ҡушып бер нәмә лә ашамаҫҡа кәңәш итә.

■ Икмәк, маргарин, тәм-том һәм башҡа аҙыҡтарға өҫтәлгән киң билдәле өҫтәмәләр эсәк яман шешенә килтереүе бар, тип иҫкәртә ғалимдар. Эшкәртелгән күпселек ризыҡтың һаҡлау ваҡытын оҙайтыу өсөн тәғәйенләнгән был эмульгаторҙар эсәк микрофлораһын үҙгәртә. Һөҙөмтәлә ялҡынһыныу барлыҡҡа килә, был иһә яман шеш үҫеүенә шарттар тыуҙыра. Джорджия университеты ғалимдары лаборатор сысҡандарға ике төр эмульгатор ашата. Уларға полисорбат 80 йәки карбоксиметилцеллюлоза биргәндәр. Был микрофлораны ныҡ үҙгәрткән, шешеү барлыҡҡа килгән һәм һөҙөмтәлә яман шеш күҙәнәктәре күберәк бүленгән.

■ "Ярылған йөрәк синдромы", ул шулай уҡ Такоцубо синдромы булараҡ билдәле. Яҡын кешеңде юғалтҡанда, йәки башҡа берәй көслө эмоциональ хис кисергәндә йөрәк мускулы зыян күрә. Был ваҡытта йөрәк өйөнәге кисергәндәге кеүек билдәләр була. Быға тиклем стрестан һуң йөрәк нормаға килә, тип иҫәпләйҙәр ине. Әммә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, йөрәктәге был "яралар" оҙаҡ һаҡлана, хатта хроник форма ала. Абердин университеты ошо синдромлы 52 кешене тикшергән. Һынауҙар 4 ай барған. Был синдром һөҙөмтәһендә йөрәктең ҡан ҡыуыу һәләте түбәнәйгәне асыҡланған. Йөрәк көсһөҙөрәк ҡыҫылған, ҡайһы бер урындарҙа барлыҡҡа килгән йөйҙәр шулай уҡ йөрәктең һығылмалылығын түбәнәйткән. Йәғни йөрәк өйөнәге кисергәндәге кеүек билдәләр теркәлгән.

■ Етерлек йоҡламау гормональ балансты һәм метаболизмды боҙа, был һимереүгә, ҡан баҫымы күтәрелеүгә, йөрәктең ишемик ауырыуына алып килә. Йоҡоһо туймағандар күберәк ашай һәм аҙ хәрәкәтләнә. Ял көндәрендә туйғансы йоҡлап алыу балансты тергеҙергә мөмкинлек бирә, тип белдерә Корея ғалимдары. Йоҡо мәлендә тән бөтөн система һәм функцияларын тергеҙә. Шуға ла ялдарын йоҡлап алыу бик кәрәк. Тикшеренеүҙәрҙә 2 мең кеше ҡатнашҡан. Уларҙың иң йәшенә 19 йәш, ә иң олоһона 82 йәш булған. Уларҙың буйы, ауырлығы, йоҡо тәртибе һәм сифаты, кәйефе, ауырыуҙары менән ҡыҙыҡһынғандар. Ҡатнашыусыларҙың 43 проценты ял көнө ғәҙәттәгенә ҡарағанда яҡынса 2 сәғәткә оҙағыраҡ йоҡлаған. Уларҙың йоҡо туйҙырмаусыларға ҡарағанда кәйефе лә яҡшыраҡ, ауырлыҡтары ла нормала булып сыҡҡан.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ЭСӘКТӘРЕҢДЕ...

## паразиттар зарарламаһын

**Лямблиялар - нәҙек эсәкте һәм бауырҙы зарарлаусы паразиттар. Улар һыу (һыуҙы таҙартыу өсөн файҙаланылған хлор лямблияларҙы үлтермәй), аҙыҡ-түлек, йыуылмаған еләк-емеш аша күсә. Көнкүрештә кейем-һалым, һауыт-һаба, балалар уйынсыҡтары, йорт хайуандарының йөнө, кимереүселәр аша йоғоуы мөмкин. Түбәндә уларҙан ҡотолоуҙың халыҡ дауаларын тәҡдим итәбеҙ, әммә шуны иҫегеҙҙән сығармағыҙ: үҙ аллы дауаланыуҙан алда, табип менән кәңәшләшегеҙ!**



● Баҡсала сүп үләне булған, картуфҡа, ҡыуаҡтарға үрелеп үҫкән эт эсәген йыйып алығыҙ. Уны күләгәлә киптерегеҙ. Бер ус кипкән үләнгә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтегеҙ. Сәй кеүек эсегеҙ.

● Йәй буйы һәр көн иртән ас ҡарынға 0,5 стакан тоҙло кәбеҫтә менән эт эсәгенән эшләнгән сәй эсегеҙ. 20 минут үткәс кенә иртәнге ашты ашағыҙ. Эт эсәге сәйен беренсе пунктта яҙылғанса әҙерләгеҙ.

● Гөлбаҙрандың (пижма) 1 стакан киптерелгән сәскәләренә 2 стакан ҡайнатылған йылы һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә. Биш көн дауамында ашар алдынан 15 минут элек көнөнә өс тапҡыр стакандың 1/3 өлөшө ҡәҙәре эсергә.

● Керән һутын эсергә: балаға - 1 балғалаҡ, оло кешегә - 1 ҡалаҡ.

● 3-5 керән тамырын таҙартырға, ваҡ ҡына итеп турап, шешәгә һалырға. Өҫтөнә бер литр араҡы ҡойоп, ҡараңғы урында 12 көн төнәтергә. Һарҡыткас, иртән ас ҡарынға 1 балғалаҡ эсергә. Дауаланыу курсы: 10 көн эскәндән һуң, 10 көн ял итергә һәм тағы 10 көн эсергә. Аҙаҡ бер ай ял итергә. Өс йыл дауамында шулай ҡабатларға.

● Июль һуңында - август башында йәшел, аҡ ыҫмала менән ҡапланған ҡарағай тубырсыҡтары йыйығыҙ. Уларҙы һыуыҡ һыу менән сайҡап, ҙур иҫке кәстрүлгә һалып, тубырсыҡтар өҫтөнә 15 - 20 см һыу булғансы шишмә һыуы ҡойоғоҙ. Ҡапҡас менән ҡапламайынса, талғын утта 8 сәғәт ҡайнатығыҙ. Ҡайнатма өҫтөн алған кеүек, түбеген алып тороғоҙ. Һарҡыткас, тубырсыҡтарҙы ташлағыҙ, шыйыҡсаға 1:1 нисбәтендә шәкәр өҫтәгеҙ. Һәм бер сәғәт дауамында ҡайнатма ҡайнатығыҙ. Һөҙөмтәлә ҡурай еләге еҫе сығып торған ҡайнатма барлыҡҡа килер. Уны ас ҡарынға 2 балғалаҡтан артыҡ ашамағыҙ. Әгәр организмығыҙ ас ҡарынға шәрбәт ашарға теләмәй икән, ашағандан һуң ҡабып ҡуйығыҙ. Был ҡайнатма шулай уҡ ашҡаҙан-эсәк трактын да таҙарта.

● Лямблиоз булғанда миҙгел ваҡытында мөмкин тиклем күберәк күк көртмәле ашағыҙ.

● Лямблиялар, описторхтар булғанда укроп һәм аҡ әнистең ваҡланған орлоҡтарын бер күләмдә болғарға. Көнөнә өс тапҡыр 1 балғалаҡ ҡатнашманы бер стаканға тиклем һыу менән эсергә. Дауалау курсы ауырыуҙың хәл-торошона бәйле. Ҡайһы ваҡыт ул ярты йылғаса дауам итә. Йәки дауаханала һатылған карвипар препаратын ҡулланырға кәрәк.

● Ҡәнәфер төнәтмәһе бик һөҙөмтәле. 1 ҡалаҡ ҡоро үләнгә 1 стакан тоҙло һыу ҡойорға. Көнөнә стакандың 1/4 өлөшөн өс тапҡыр, симптомдар бөткәнгә тиклем эсергә.

● 100 грамм ҡоро әремде ваҡлап, онға әйләнгәнсе төйөргә. Тәүге өс тәүлектә һәр 2,5 сәғәт һайын (хатта төндә лә) балғалаҡтың 1/4 өлөшө ҡәҙәре ҡабул итергә. Аҙ ғына һыу эсергә лә мөмкин. Артабанғы көндәрҙә шул уҡ дозаны тәүлегенә 5-6 тапҡыр ҡабул итергә. Курс бер аҙнаға иҫәпләнгән. Бынан тыш, әрем төнәтмәһе менән клизмалар һәм микроклизмалар эшләргә кәрәк. Ҡатын-ҡыҙға спринцевание эшләү ҙә мотлаҡ. Ҡоро ваҡланған әремдән 1 балғалаҡ онтағына 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға ла, 30 минут төнәтергә. Тән температураһы кимәленә еткергәс, 100 мл һарҡытып алырға. 900 мл менән клизма эшләргә. Тура эсәк таҙарғандан һуң, 50 мл төнәтмәнән, эстә оҙағыраҡ тоторға тырышып, дауа бөтөн эсәккә таралһын өсөн, тағы бер клизма яһарға. Ҡалған 50 мл менән спринцевание эшләргә.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

# ЙОД ЕТӘМЕ? ТИКШЕРЕП ҠАРА!




**Ҡалҡан биҙе - муйындың алғы яҡ өлөшөндәге күбәләк формаһындағы 30 грамлыҡ биҙ. Дәүмәле ҙур булмаһа ла, ул тотош организм өсөн мөһим әһәмиәткә эйә, сөнки матдәләр алышыныуына, кешенең буйына һәм үҫешенә, шулай уҡ тән температураһына яуап бирә.**

Ҡалҡан биҙенең дөрөҫ эшмәкәрлеге ике минерал - йод һәм магний менән көйләнә. Улар араһынан йод ҡалҡан биҙенең нормаль эшләүе һәм сәләмәтлеге өсөн күберәк яуаплы. Организмда йод кимәлен тикшереүҙең ябай ғына ысулы бар. Мамыҡты йодҡа манып алығыҙ ҙа, уны беләҙек һөйәгенең эске яғына һөртөгөҙ. Әгәр көрән тап 24 сәғәттән иртәрәк юҡҡа сыҡһа, тимәк, организмға йод етешмәй. Составында йод булған препараттар ҡулланыу ғына был минералдың организмығыҙҙа етерлек күләмдә булыуына гарантия була алмай.

### Тесты нисек үткәрергә?

Иң яҡшыһы - иртәнге душтан һуң. Таптың теләһә ниндәй күләмдә булыуы мөмкин. Иң мөһиме - ул беләҙектән ситкә сыҡмаһын. Тест эшләгән ваҡытығыҙҙы яҙып ҡуйырға онотмағыҙ. Таптың төҫө үҙгәреүен тәүлек әйләнәһенә күҙәтегеҙ.

### Тест һөҙөмтәләре нимә аңлата?

Дөйөмләштереп әйткәндә, тап ни тиклем тиҙ юҡҡа сыға, организмығыҙға шул тиклем йод етешмәй. Әгәр тап ағара башлап, 24 сәғәт эсендә бөтмәй икән, тимәк, барыһы ла тәртиптә.

Тап 18-24 сәғәт эсендә юйылһа йәки тулыһынса юҡҡа сыҡһа - ниндәйҙер дәрәжәлә дефицит бар, әммә был ул тиклем ҡурҡыныс түгел.

12-18 сәғәт эсендә тап юйылып бөтә яҙһа йәки тулыһынса юйылһа - дефицит бар, тиҙ арала ниндәйҙер сара күрергә кәрәк.

6-12 сәғәттә юйылып бөтһә йәки тулыһынса юҡҡа сыҡһа - етди дефицит бар, тиҙ арала табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ.

6 сәғәттән алдараҡ бөтһә - бик етди дефицит күҙәтелә, кисекмәҫтән табипҡа йүгерегеҙ.

### Әгәр тест кире һөҙөмтә бирһә...

Бындай тикшереүҙе 2 аҙнаға бер тапҡыр эшләргә мөмкин. Шулай итеп һеҙ йодҡа ихтыяжығыҙҙы яҡшыраҡ контролләй алаҫаҡһығыҙ.

Шулай ҙа, организмығыҙ йодҡа ҡытлыҡ кисерә икән, ғәҙәти тоҙҙо йодланғаны менән алмаштырығыҙ, мейестә бешкән картуф ашағыҙ, мүк еләге, ҡара емеш, тәрәс балығы (треска), креветка, консерваланған тунец балығы ашағыҙ. Шулай уҡ балыҡ таяҡсалары, кипкән ылымыҡ, күркә ите, һөт, бешкән йомортҡа, йогурттар, банан, баҡса еләге лә файҙаға булыр.

Бер аҙна дауаланыу барышында диета һаҡларға: ит, балыҡ ашамаҫҡа, һөт һәм һөт ризыҡтарынан, йомортҡанан, кондитер изделиеларынан баш тартырға. Бутҡа, емеш-еләк, картуф, үҫемлек майҙары ҡулланырға.

• Бауырҙа һәм үт ҡыуыҡында лямблиялар, описторхтар һәм башҡа гельминттар булғанда имән йәки йүкә көлө менән дауаланырға. Бер нисә ботакты мейестә киптереп, яндырырға. Көлдө күмерҙән таҙартып, 14 балғалаҡ көл алырға. Дауаланыуҙың 1-3-сө көндәрендә 1 балғалаҡ көлдө көнөнә ике тапҡыр - иртән һәм кисен ярты стакан йылы һөт менән эсергә. 4-се көндә 1 балғалаҡ көлдө ярты стакан һөт менән бары тик иртән генә эсергә. Был көндәрҙә шәрбәт, бал, шәрбәтле емеш ашарға ярамай. 4-се көндөң кисендә ҡыҙыл көртмәлә япраҡтарының төнәтмәһен эсә башларға кәрәк. 1 ҡалаҡ япраҡтарға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоғоҙ һәм төнәтегеҙ. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашар алдынан ярты сәғәт алда ярты стакан эсегеҙ. Дауаланыуҙы ике аҙна дауам итегеҙ. Һуңынан дауаланыу курсын ҡабатлағыҙ - 7 балғалаҡ көлдө 4 көндә ҡабул итегеҙ һәм ике аҙна ҡыҙыл көртмәлә төнәтмәһен эсегеҙ. Курсты һуңынан 4-6 айҙан һуң ҡабатларға мөмкин. Ҡыҙыл көртмәлә япрағын дарыухананан алырға була. Бер курс өсөн 150-200 грамм япраҡ кәрәк.

• Ауыр формалағы лямблиоз холециститты 6 сәғәтлек 10 процентлы ҡайын япраҡтары быуында дауаларға мөмкин. Ағып торған һыуыҡ һыу аҫтында эмаль таста 50 г ҡайын япрағын тиҙ генә йыуырға (япраҡтарҙы миндектән дә алырға мөмкин). Һуңынан уларҙы эмаль кәстрүлгә һалып, 500-600 мл ҡайнар һыу ҡойоп бешекләп, өҫтөн тәрилкә менән баҫтырып, кап-ҡасын ябып урап ҡуйырға һәм төнгөләккә ҡалдырырға. Иртән һарҡытып, һыуыҡтыҡта ҡуйырға. Көн һайын аш алдынан 30-40 минут элек стакандың 1/3 өлөшө кимәлендә эсергә. Дауаланыуҙы ай-ай ярым дауам итергә.

• Кискеһен сәй бешереү сәйнүгенең 2/3 өлөшөн ҡайын япраҡтары менән тултырырға. Өҫтөнә 200-250 г ҡайнар һыу ҡойоп, төнгөләккә ҡалдырырға. Иртәнге алтыла төнәтмәне һарҡытып, бер аҙ йылытырға. Балаларға стакандың 2/3 өлөшөн (доза йәшенә ҡарап билдәләнә) эсерергә. Һуңынан баланы яткырып, бауырына йылы грелканы шәлгә урап һалырға. Ике сәғәт йоҡлап алырға ла була, һуңынан бүлмә буйлап 10 минут йөрөргә, шунан инде тағы ла ятырға. Был юлы арҡаға ятырға ла мөмкин. Бер аҙ ятҡас, торорға була. Был процедураны йәкшәмбе һайын эшләгеҙ, өс йәкшәмбенән һуң анализдар тапшырығыҙ.

• Иртә яҙҙан, ҡулға йәбешеп торған һәм бер тин аҡсанан ҙур булмаған ҡайын япраҡтарын йыйырға. 2 балғалаҡ япраҡты 200 мл ҡайнар һыу һалып, 30 минут төнәтергә. Бер ай дауамында ашарҙан алда ярты сәғәт элек көнөнә өс тапҡыр 50 грамм эсергә.

• Йәш ҡайын япраҡтарын йыйырға. Ике ҡалаҡ ҡоро япраҡты 1 стакан ҡайнар һыу һалып бешекләргә һәм ярты сәғәт төнәтергә. Һарҡытып, шыйыҡсаны ас ҡарынға эсергә һәм уң яҡ ҡабырғала ярты сәғәт ятырға. Дауаланыу курсы - 15 көндән 45 көнгәсә.

• Ҡайын бөрөһө, гөлбаҙранды - дүрт өлөш, меңъяпраҡ менән ҡырҡбыуынды - ике өлөш, 1 өлөш сөйәл үләне алып, барыһын бергә ҡушабыҙ ҙа, бер балғалаҡ ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләйбеҙ. Һарҡытып, иртән һәм кисен ашарҙан ярты сәғәт алда ярты стакан эсәбеҙ. Дауаланыу курсы: 2-3 аҙна эскәндән һуң, 2 аҙна ял итәбеҙ, артабан бер аҙна дауаланабыҙ, бер аҙна ял итәбеҙ. 3-4 курс үткәрергә кәрәк. Бер үк ваҡытта бөтнөк һәм мелисса ҡушылған сәй эсергә кәрәк.

• Бабаҫырҙан, солитерҙан, лямблияларҙан ҡотолоу өсөн иртән ас ҡарынға 1 стакан таҙартылған ҡабаҡ емешен, ауыл тауыҡы һалған йомортҡаның ике һарыһын сей килеш, бәләкәй кисәк селедка ашарға кәрәк. Грелка һалып, ике сәғәт уң яҡ ҡабырғала ятырға. Ярты сәғәт һайын 1 кисәк селедка ашарға. Барлығы дүрт кисәк булырға тейеш. 5-6 көн дауамында дауаланырға. Дауаланыу барышында өйҙә тыныс булһын.

• Ҡабаҡтың сей емештәрен 1 стакан итеп таҙартырға һәм бер ултырыуҙа ашап бөтөргә. Мөмкин тиклем күберәк һыу эсергә. Ҡайһы бер осраҡта өс стакан ҡабаҡ емешен ашағандан һуң лямблиялар сығып бөтә.

• 0,25 мг Трихопол төймәләрен көнөнә өс тапҡыр 10 көн дауамында эсергә. Һуңынан бер аҙна ял итергә.

• Ярты стакан йылы һөткә 1 теш һарымһаҡ һутын һығырға һәм уны көн дауамында эсергә. Курс - бер аҙна.

• Ярты стакан һелтеле минераль һыуҙы ашарҙан 1 сәғәт алда эсергә. Курс - 10 литр. Бер үк ваҡытта бауырға тюбаж эшләргә. Минераль һыу эскәс, 30-40 минутҡа уң яҡ ҡабырғаға ятырға. Процедураны 2 аҙна эшләргә. Һуңынан 3-4 ай дауамында һәр ял көнө ҡабатларға. Профилактика өсөн һәр көҙ йылы һөт менән һарымһаҡ һуты эсергә.

• АЗС-тан аҡ солидол алығыҙ. Бауыр тирәһенә һөртөгөҙ һәм ҡағыҙ һалып, целлофан менән ябып бәйләгеҙ. Компресты иртән һәм кисен алмаштырығыҙ. Дауаланыу барышында йыуынмағыҙ, бауыр тирәһенә һыу бөтөнләй теймәҫкә тейеш. Бәләкәй банкалағы солидол бөткәнсе компресс эшләгеҙ. Дауаланыу тамамланыу менән үт ҡыуыусы йәки эс йомшартыусы таблеткалар эсегеҙ.

• Орлоҡҡа тип ҡалдырған ныҡ өлгөргән ҡыярҙарҙы турап, 2 литрлыҡ кәстрүлдең өс өлөшөн тултырырға, һуңынан өҫтөнә сыҡҡансы ҡайнар һыу һалырға. Төнәтмәне һарҡытмай ғына һыуыҡтыҡта һаҡларға. Уны күпме эсә алаһығыҙ - шунса эсергә.

• Ярты литр һөттө ике стаканға ҡойоғоҙ. Иртән бер стакандағы һөттө ҡайнатып, уртаса башлы һарымһаҡты таҙалап, иҙеп, ҡайнар һөткә һалырға һәм өҫтөн ҡапларға. 10 минут тотҡандан һуң, һарҡытырға. Танауығыҙҙы баҫып, шыйыҡсаны бер тынала эсергә һәм мендәрһеҙ генә бер сәғәт ятырға. Ике сәғәттән һуң шыйыҡ манный бутҡаһы ашарға. Икенсе көн тағы ла шул рәүешле ҡабатларға.

• Кокоста өс тишек тишергә, һутын ағыҙырға. Һуңынан уны ярып, тышынан таҙартырға һәм ҡырғыста ҡырырға. Кокос бутҡаһын иртән ас ҡарынға ашарға һәм 4-5 сәғәт дауамында бер нәмә лә ашамаҫҡа. Бер йылдан дауаланыуҙы профилактика өсөн ҡабатларға мөмкин.

• Тоҙланған кәбеҫтә һыуын ашағанға тиклем ярты сәғәт элек көнөнә өс тапҡыр эсергә.

• 1 литрлыҡ банкаға 1 стакан ваҡ ҡына итеп туралған һарымһаҡ һалып, 1 литр араҡы ҡойорға. Йылы урында 10 көн төнәтергә. Төнәтмә алтынһыу төҫөнә инер. Көнөнә өс тапҡыр ашағандан һуң 1 ҡалаҡ эсергә.

НИӘТ ИТ!

# ҮҘГӘРЕШ БУЛМАЙ ҠАЛМАҪ



**Йыбанмағыҙ, ниәт итеп, бер ай дауамында ошо кәңәштәрҙе ҡулланығыҙ һәм үҙегеҙҙәге үҙгәрештәр менән ҡәнәғәт булырһығыҙ.**

◆ Иртән торғас та ас ҡарынға 1 ҡалаҡ етен орлоғо ашарға. Ныҡлап сәйнәргә һәм 1 стакан йылы һыу менән эсеп ҡуйырға. Ярты сәғәттән ашарға ярай. Етен организмды таҙарта. Тире матурая, бер аҙ ябығырһығыҙ ҙа. Тик организмда таштар булғанда етен орлоғо ҡабул итергә ярамай.

◆ Көн һайын бешкән ҡыҙыл сөгөлдөр ашарға. Иртәнме, көндөҙмө, кисенме - мөһим түгел, үҙегеҙгә ҡулайлы ваҡытты һайлағыҙ. Сөгөлдөр ҡанды таҙарта. Ҡан сәләмәт булһа, бөтөн организм һау була. Ҡыҙыл сөгөлдөр тиреңең торошона, шулай уҡ эске ағзалар эшмәкәрлегенә ыңғай йоғонто яһай.

◆ Көн һайын йоҡлар алдынан бит тиреһенә глицерин менән Е витамины ҡатнашмаһы һөртөргә. 30 грамм глицеринға 10 капсула витамин өҫтәйбеҙ. Бит тиреһен таҙартып, ошо витаминлы глицеринды һөртәбеҙ. Тирегеҙ шымарып китер, бигерәк тә күҙ эргәһендәге һырҙар юҡҡа сығыр.

◆ Көн һайын 50 грамм сәтләүек ашағыҙ. 2 аҙнанан һуң сәс һәм тырнаҡтар торошо яҡшырыр.

◆ 3 көн һайын ҡоро горсис порошогын һыуҙа иҙеп, бер аҙ үҫемлек майы өҫтәп, ҡоро сәстәргә һөртөгөҙ. 20-30 минуттан йыуырға. Бер ай буйынса даими ҡулланһаң, сәстәр йомшарып, ялтырап китә.

◆ Аҡ майға бер нисә тамсы бөтнөк майы өҫтәргә, йоҡларға ятыр алдынан үксәләргә һөртергә һәм мамыҡ-кизе ойоҡ кейергә.

◆ Йоҡлар алдынан керпектәргә бойҙай шытымы майы (дарыуханаларҙа һатыла) һөртөргә.

◆ 1 стакан диңгеҙ тоҙона 1 стакан ҡаймаҡ өҫтәргә. Йыуынып сыҡҡас, ошо тоҙ менән тән тиреһен ыуып, йылы һыу менән йыуып төшөрөргә. Ҡатнашманы һыуыҡтыҡта һаҡларға. Тоҙ тирене таҙарта, дезинфекциялай. Ҡаймаҡ тоҙҙоң тәьсирен йомшарта, күҙәнәктәрҙе туҡландыра.

◆ Дарыухананан амарант майы һатып алығыҙ. Ул тирегә яҡшы һеңә, йыйырсыҡтарға ҡаршы көрәшә, янған, өшөгән тирене дауалай. Көн һайын төнгә, бит тиреһенә һөртөргә.

◆ Сәсте сайҡаған һыуға ментол майы өҫтәгеҙ (1 литр һыуға - 5 тамсы). Баш тиреһе ҡауаҡланыуын булдырмай, уны сафландыра, хатта баш ауыртыуын бөтөрә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Ҡайһы берҙәребеҙгә хатта аҡса турала һөйләшеүе шул тиклем ауыр. Мәҫәләң, кемгәлер бер аҙналыҡ эш хаҡын бурысҡа биреп торабыҙ ҙа, һуңынан, улар үҙебеҙгә кәрәк булып киткәс, нисек һорап алырға белмәйбеҙ. Әгәр эштә, ғаиләлә уңайһыҙлыҡ тойһаң, иртәме, һуңмы, ул эште йәки тормош иптәшен ҡалдырырға тура киләсәк. Әгәр уңайһыҙлыҡ сығанағы булып аҡса торһа, һиңә ул турала һөйләшергә йәки уларҙың булыуы уңайһыҙлыҡ тыуҙырһа, аҡса менән хушлашырға тура киләсәк. Быны сәбәбе аңлы ғәмәлдәребеҙгә түгел, ә төпкө аңыбыҙға бәйле. Сөнки беҙ һәр саҡ уңайһыҙлыҡ тыуҙырған нәмәләрҙе урап үтергә тырышабыҙ. Ҡыҫҡаһы, тормоштан нимәләр алып, уны юғалтмаҫ өсөн, бөтөн нәмәгә тыныс ҡарарға кәрәк. Аҡса эшләп, уларҙы юғалтмаҫ өсөн уларға тыныс ҡарағыҙ!

## Мин ни тиклем бай, башҡалар шул тиклем ярлы

Бынан да алйотораҡ нәмә уйлап сығарыу мөмкин түгел. Бала саҡта "миңә күп булһа, башҡаларға нимәнәндәр баш тартырға тура киләсәк" йәки "мин бай йәшәһәм, башҡалар хәйерселектә йәшәргә тейеш була" тигән уйҙарҙы күп һеңдерҙеләрме? Был фекерҙе бер нәмәһе лә булмағандар ғына тарата! Әгәр ҡапыл миллион доллар аҡсаға эйә булһағыҙ, нимә эшләр инегеҙ? Аҡсаны матрас аҫтына йәшереү гәҙәтегеҙ юҡ, тиҙҙән уның бер өлөшө урындағы автодилер, бер өлөшө турагент, күпмеһелер яҡындағы ресторан, сәскә магазины, бутик хужаларына һәм һалым хеҙмәте иҫәбенә күсәсәк. Тирә-яҡтағыларҙың барыһы ла отасаҡ. Шуға ҡарамаҫтан, һәр кемебеҙҙә бала саҡтан, бай йәшәү - насар, сөнки башҡаларға хәйерселектә йәшәргә тура килә, тигән инаныу һеңдерелгән. Был - уйҙырма! Беҙҙең байлығыбыҙ башҡаларға зыян килтермәй, киреһенсә, ярҙам итә ала.

## Үҙеңде иркәләтергә кәрәк!

Донъя һиңә яҡшы мөнәсәбәттә булһын тиһәң, үҙ-үҙеңә яҡшы мөнәсәбәттә булырға кәрәк. Эске кейемең тишек булып, нисек үҙеңде донъя батшаһы итеп хис итергә мөмкин? "Эске кейемемдә берәү ҙә күрмәй бит", - тиер бәғзеләр. Эш шунда, унда тишектәр бар икәнен һин үҙең беләһең һәм бөтөн күҙәнәктәрең менән тояһың. Үҙеңдән башҡа берәү ҙә һиңә үҙеңдә үҙенсәлекле кеше итеп тойорға ярҙам итмәйәсәк. Әгәр үҙеңә ихтирамың юҡ икән, уға бер ҡайҙа ла өйрәнә алмаясаҡһың.

Үҙебеҙҙе баһалауға өйҙәге күренеш тә йоғонто яһай. Уны өйөңә ҡайтҡың килеп торорлоҡ, ҡайтыу менән күңелең күтәрелерлек итеп эшлә. Ул башҡаларҙыҡына оҡшамаһын, һинеке генә булһын. Таҙалыҡ һәм тәртип өсөн аҡса түләргә кәрәкмәй. Таҙартылмаған һарайҙа йәшәгәнсе, бөхтә бер бүлмәле фатирҙа йәшәү яҡшыраҡ.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

✓ ***Энергияны һаҡлаусы, терегөмөшлө лампаларҙа терегөмөш - баш мейеһе, нервылар системаһы, бөйөрҙәр, бауырҙы зарарлай торған юғары токсик матдә бар.***



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# УЧАЛЫ РАЙОНЫ ТӘБИҒӘТЕ





Мулдаш күле икенсе төрлө

Йоко (иҫк.)

Күптең антонимы

Эш һәм документтарҙы теркәү кенәгәһе

Иҫке Байрамғол ауылы эргәһендәге күл

Шүрәленең бармағын ҡыҫҡан хәйләкәр

Шәкәр итеп әйткән һүҙ

Оҙон һаплы, башы һеңгә айбалта

Тарихи ваҡиға тураһында хикәйәт

Инглизсә "ситтә тороп ҡалыусы"

Операла яңғыҙ йыр

Учалы районына ингән Көньяҡ Уралдағы тау һырты **(1)**

Вулкандан урғылып сыға

АҠШ-тың 31-се штаты

Һөттө ҡайнатып, ойотҡо һалып эҙерләнә

Йылы яҡҡа осмаған ҡоштар

Шағирҙың хеҙмәте

Урланған менән (...) тулмаҫ

Өйөндә - әтәс, (...)да - себеш

Этик, мораль тәрбиә үҙебеҙсә

Тунлыҡ (...) - ише менән

(...) тамаҡ туйҙырмай

Ҡаҙаҡкол ауылы эргәһендә емешле тау

Яйыҡ йылғаһының хәҙерге атамаһы **(2)**

Цитрус емеш

Эрмитаждағы ҙур Учалы вазаһы нимәнән

Тәбиғәттән өҫтөн, серле, тылсымлы хис

Башҡортостандағы йылға

I донъя һуғышында тыл хеҙмәтен үтәгән ғәскәр

Көньяҡ Уралдағы йылға

Учалы еренән сыҡҡан сәсән





Был күл буйында пар тирмәне бар **(3)**

Болан йәки эт егелгән сана (берлектә)

Эштең тамамланған мәле

Учалы "Стоунхенджы" **(4)**

Ете көн

Майһыҙ (...) ҡулмай

Ат юҡ (...)да, ҡайғы юҡ буранда

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**22-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Өршәк. Елкәлек. Нагак. Батша. Парад. Трибуна. Баллада. "Налим". Матрос. Финал. Әсә. Ҡайны. Йыла. Кеҫә. Балиғ. Тау. Лена. Лөғәт. Ҡунаҡ. Риүәйәт. Әйтеш.

**Вертикаль буйынса:** Ботфорт. Балҡантау. Асылыкүл. Емеш. Өйөрмә. Атама. Өлкән. Әрәсә. Тәмәке. Гөбөргәйел. Еренә. Кәкүк. Тел. Пан. Ҡабаҡ. Алға. Илен. Дим. Ырғаҡ.

*КИҪӘТӘБЕҘ!*

# ТӘБИҒӘТТЕ ЛӘ...

## үҙебеҙҙе лә һаҡлайыҡ!

ТАБИГАТ РБ

**Ҡулланыу ваҡыты сыҡҡан батарейкалар, аккумуляторҙар, терегөмөшлө градусниктар, энергияны һаҡлаусы лампаларҙы гәҙәти сүп менән ташларға ярамай икәнен беләһегеҙҙер. Был предметтар тирә-яҡ мөхиткә һәм һаулығыбыҙға ҙур зыян килтереүе ихтимал. Бына шуға ла уларҙы дөрөҫ утилләштереү мөһим.**

Бигерәк тә һуңғы ваҡытта көнкүрештә энергияны һаҡлаусы, терегөмөшлө лампаларҙы күпләп тотонабыҙ. Оҙайлы ҡулланыу ваҡыты, энергияны әҙерәк тотоноуы - уларҙың ыңғай яҡтары. Тик янып сыҡҡас, быныдай лампалар хәүеф сығанағына әүерелә. Энергияны һаҡлаусы, терегөмөшлө лампаларҙа терегөмөш - баш мейеһе, нервылар системаһы, бөйөрҙәр, бауырҙы зарарлай торған юғары токсик матдә бар. Әлбиттә, ул бик аҙ күләмдә, шулай ҙа сәләмәтлеккә зыян килтереү өсөн ошо миҡдар ҙа етә. Лампа ярыла икән, терегөмөш быуы өйгә тарала һәм бер нисә аҙна дауамында һаҡлана ала. Лампалар тейешенсә утилләштерелмәгән осраҡта терегөмөш быуҙары һыуҙы, һауаны, тупраҡты зарарлай.

2010 йылда республиканың "Тәбиғәт" предприятиеһы Тәбиғәтте ҡулланыу һәм экология министрлығы менән берлектә составында терегөмөш булған лампаларҙы йыйыу буйынса "Экомобиль" тип аталған социаль проект эшләгәйне. Уның төп маҡсаты - халыҡ араһында экологик мәҙәниәтте үҫтереү генә түгел, ә терегөмөш кеүек хәүефле ҡалдыҡтар менән эш иткәндә яуаплылыҡ тойғоһо булдырыу ҙа. Йыл һайын 7 мең тирәһе лампа, термометрҙар йыйыла һәм был һан йылдан-йыл арта ғына бара. Йәғни, "Экомобиль" үҙе һеҙҙең йәшәгән урынығыҙға барып, терегемөшлө һәм энергияны һаҡлаусы лампаларҙы йыйып ала. Быйыл август уртаһында "Экомобиль" республиканың төньяғына сығасаҡ, ауылдар исемлеге һуңыраҡ билдәле буласаҡ. Сентябрь урталарында төньяҡ-көнсығыш райондарҙа - Мәсәғүт, Оло Ыҡтамаҡ, Яңы Балаҡатай, Үрге Ҡыйғы, Малаяҙҙа буласаҡ.

Бер кеше йылына бер генә терегөмөшлө лампа ташлаһа ла, тирә-яҡ мөхит өсөн был ҙур хәүеф. Шуға ла был мәсьәләгә битараф булмаһағыҙ ине. Тәбиғәтебеҙҙе бындай бысраныуҙарҙан һаҡлайыҡ.

**Ғәлиә РАМАҘАНОВА,**
**"Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһының матбуғат секретары.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (23) дүшәмбе | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 20:09 | 21:39 | 23:09 |
| 18 (24) шишәмбе | 3:35 | 5:05 | 13:30 | 20:08 | 21:38 | 23:08 |
| 19 (25) шаршамбы | 3:37 | 5:07 | 13:30 | 20:07 | 21:37 | 23:07 |
| 20 (26) кесе йома | 3:38 | 5:08 | 13:30 | 20:05 | 21:35 | 23:05 |
| 21 (27) йома | 3:40 | 5:10 | 13:30 | 20:04 | 21:34 | 23:04 |
| 22 (28) шәмбе | 3:41 | 5:11 | 13:30 | 20:02 | 21:32 | 23:02 |
| 23 (29) йәкшәмбе | 3:43 | 5:13 | 13:30 | 20:01 | 21:31 | 23:01 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒЛАН*

**4 йәшлек балаға** бер йыл самаһы ваҡытҡа (ярты йылдан һуң отпуск биреләүе ихтимал) Мәскәү ҡалаһына күсеп китергә, ғаилә менә йәшәргә риза булған, балаларҙы яратҡан, миһырбанлы, бурысына яуаплы ҡараған һәм башҡорт телен яҡшы белгән (ҡаҡлы ялдағы, йәше бик оло булмаған) **ҡатын-ҡыҙ бала ҡараусы эҙләйбеҙ.** Юл, һәм туҡланыу сығымдары - эш биреүсенән. **Эш хаҡы - 20 мең һум самаһы.**

Педагогия йәки башҡорт филологияһы факультетын тамамлаған, динде ихтирам иткән, Өфө һәм баш ҡалаға яҡын райондарҙан булыусылар, һеҙҙе көтәбеҙ!

**Телефон: 8-987-49-53-350**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ТЫЙНАҠЛЫҠ БУЛМАҺА...

## күркәм холоҡ булмаҫ

**Ғүмәр ибн әл-Хаттабтан ҡалған хикмәттәр:** "Ун нәмәнән башҡа ун нәмәгә урын юҡ: күңелең паҡ булмағанда - зиһенгә; ғилемең булмағанда - һәләткә; ҡурҡыу тигәнде белмәгәндә - ҡотолоп ҡалыуға өмәт бағлауына; гәҙеллек булмағанда - әмирлеккә; тәрбиә булмаған ерҙә - күркәм холоҡ һәм намыҫҡа; аманатҡа тоғролоҡ булмаған ерҙә - именлек менән тынғылыҡҡа; йомартлыҡ һәм фәкирҙәргә ҡарата хәйер-хаҡлыҡ булмаған ерҙә - муллыҡҡа; бары менән байҙарса йәшәргә өйрәнмәгән ерҙә - хәйерселектән арыныуға; тыйнаҡлыҡ булмаған ерҙә күркәм холоҡҡа; Аллаһы Тәғәлә ярҙамы булмаған ерҙә Хаҡ динде таратырға тырышыуға урын да юҡ, мәғәнә лә тапмаһың", - тигән ул.

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһе иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

71. **Али Карнай "Беҙ ҡайтырбыҙ" повесы.** "Заман заңы сағылған әҫәрҙәрҙе уҡырға теләгән китап һөйөүселәр Али Карнайҙың ижадына мөрәжәғәт итегеҙ. Унын очерк, хикәйә йыйынтыҡтары бар. Әммә үҙе йәшәгән осор тураһында яҙған иң әһәмиәтле әҫәре - "Беҙ ҡайтырбыҙ" повесы. Был повеста һүҙ 1918 йылдың яҙ һәм йәй айҙарында барған бик көсөргәнешле ваҡиғалар тураһында бара. Ауыл халҡының көнкүреше ысынбарлыҡ менән тап килтереп һүрәтләнә. "Беҙ ҡайтырбыҙ" повесында Совет әҙәбиәтенә хас һыҙаттар ҙа күҙәтелә - синфи көрәш, ҡараштар төрлөлөгө, хыялдар башҡалығы сағылдырыла. Башҡортостандың бер ауыл халҡы тормошо аша илдәге үҙгәрештәр бөтәһенен дә аңына, көнкүрешенә нисек йоғонто яһауын, яҙмышын үҙгәртеүен күрәбеҙ. "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына Али Карнайҙың был әҫәре инһә, уны уҡыған яңы быуын кешеләренә халҡыбыҙҙың үткәненә күҙ һалырға һәм шул осор кешеләре ниндәй ынтылыштар менән йәшәүен аңларға ярҙам итерлек әҙәби әҫәр булыр, тип уйлайым", - тип яҙа Айгөл Ғәйниәхмәтова.

72. **Рамазан Өмөтбаев "Ысыҡтан эйелә ҡылған" романы.** "Бөгөн ас-яланғас, бер телем икмәккә тилмереп ултырыуҙы күҙ алдына ла килтереп булмай. Ә бына Рамазан Өмөтбаевтың "Ысыҡтан эйелә ҡылған" романы иң оҙайлы, иң ауыр йот йылдары булып халыҡ хәтерендә ҡалған осор тураһында бәйән итә. Әҫәр һәр быуын кешеһенә тарих биттәрендә ҡалған ваҡиғаларҙы сағылдырыуы менән генә түгел, иненә төшкән ауырлыҡтарҙы күтәрә белеү йәһәтенән дә фәһемле. Янынан-яны әйбер, кейем, тәмлерәк ашарға, уңайлыраҡ йәшәргә ынтылып торған замандаштарға ла күп тә түгел, 100 йыл тирәһе элек кенә йәшәгән кешеләр кисергәндә, күткән тормошто күҙ алдына баҫтырып ҡарау ғибрәтле булыр", - тип яҙа Гөлдәр Дәүләтбаева.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы**
**Сәриә ҒАРИПОВА**
**алып бара.**

УӘТ БИТ ӘЙ!

# ҠАЙҘА? ҠЫРЫМҒА!



Рәсәйҙә йәшәүселәр икенсе йыл рәттән Ҡырымда ял итергә теләүен белдерә. Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәгенең рәсәйҙәрҙең йәйге миҙгелгә пландарына арналған мәғлүмәттәре ошондай.

Кавказдың Ҡара диңгеҙ буйындағы курорттары тәүге тапҡыр исемлектә икенсе урынды биләй. Халыҡтың 13 проценты Төркиәне алдағы йылдарҙа потенциаль ял итеү урыны булараҡ ҡарай. Рәсәйҙәге һәр икенсе кеше тиерлек (47 процент) быйылғы йәйҙе өйөндә уҙғарырға ниәтләй.

Быйыл һәр ғаилә ағзаһына йәйге ял өсөн сығымдар яҡынса 40 мең һум тәшкил итәсәк. Респонденттарҙың 48 проценты сәфәргә махсус аҡса туплай, ҡалғандар сәйәхәт өсөн ағымдағы аҡсаһын (22 процент), йәки өҫтәмә рәүештә йәлеп ителгән аҡса: өҫтәмә эш, премиялар иҫәбенә түләй (13 процент).

ВИКТОРИНА

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР



**Был юлы Миләүшә Ҡаһарманованың "Күңелем йылы теләй" китабы буйынса викторина һорауҙары тәҡдим итәбеҙ.**

1. **М.Ҡаһарманованың бер әҫәрендә ниндәй күлдәк герой образына күтәрелә?**
а) ебәк;
б) шифон;
в) ситса;
г) крепдишин.

2. **Мистик әҫәрҙәре:**
а) "Ҡарағош";
б) "Ҡарғыш";
в) "Һынау";
г) "Әүерпә һөйөүе".

3. **"Күңелем йылы теләй" ҙә героиня ниндәй телде өйрәнә?**
а) башҡорт телен;
б) инглиз телен;
в) француз телен;
г) немец телен.

4. **"Юғалтыу-табыштарым"да героиня күпме ваҡыт яңғыҙ йәшәй?**
а) 2 ай, 4 көн, 5 сәғәт;
б) 3 ай, 6 көн, 2 сәғәт;
в) 3 ай, 8 көн, 10 сәғәт;
г) 2 ай, 9 көн, 8 сәғәт.

**Ҡәҙерле дуҫтар!** Кем дә кем 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул Миләүшә Ҡаһармановаҙың автографы ҡуйылған "Күңелем йылы теләй" китабын алып һөйөнәсәк. Әйткәндәй, авторҙың был китабын һатып алырға теләүселәр ҙә шылтырата ала. Йәгеҙ, кем алыҡ?

**Рубриканы**
**Иҙел РӘХИМОВ**
**алып бара.**

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

# ЯҠШЫ ӘҘӘМ БУЛЫУҘАН...

## ғалим булыу еңелерәк

- Ерендә eләк бул - кешеләр ләззәтләнһен.
- Тыуып-үҫкән өйөңә, тура килһә, туғыҙ кил.
- Ҡулыңдан яҡшы эш килмәһә, күңелеңдә яҡты уй булһын.
- Йомарт кеше үҙ малын үҙе ашай, һаран малы һарандың үҙен ашай.
- Үҙеңдән аҡыллылар барҙа үҙеңде маҡтама.
- Кеше ҡылығын күҙәт, үҙеңдекен төҙәт.
- Яҡшы әҙәм булыуҙан ғалим булыу еңелерәк.
- Иҙән ярығы сүп өсөн, алама һүҙ ғәйбәтсе теле өсөн.
- Йыртҡыс януар тертләп тешләй, яуыз бәндә уйлап эшләй.
- Тыуған илең - үҙ әсәң, сит ил - үгәй әсә.
- Туған телен һаҡлай алыусы, иң ҙур уңышҡа ирешеүсе.
- Туған тел - тәрән дарья, төбөндә ынйымәрйен бар: белгәндәр сумып ала, белмәгәндәр ҡоро ҡала.
- Илен белмәгән - игелекһеҙ, халҡын белмәгән - холоҡһоҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИҪЕРЕК...

## айыҡты күрә алмай

Бер ҡыҙ кейәүгә сыҡһа, ҡырҡ ҡыҙ төш күрә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Йә кешелек һуғышты бөтөрә, йә һуғыш - кешелекте.

**(Джон Кеннеди).**

Баш күтәреүҙәр - ул ишетелмәгән халыҡтың теле.

**(Мартин Лютер Кинг).**

Иртән торғанда мин гел генә тешемде таҙартам һәм телемде үткерләйем.

**(Оскар Левант).**

Ғәжәп: һәр кеше үҙенең нисә һарыҡ тотҡанын еңел генә әйтә ала, ә дуҫтарының һанын һораһаң, бер кем дә әйтә алмай. Шул тиклем дә дуҫтарҙың ҡиммәте юҡ...

**(Сократ).**

Ахмаҡ та, шым торһа, аҡыллы булып күренә ала.

**(Соломон).**

Кеше ҙурая барған һайын үҙгәрештәргә ҡаршы тора, бигерәк тә яҡшы яҡҡа үҙгәрештәргә.

**(Джон Стейнбек).**

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуҡтары беҙҙекеләр менән тиң, тик ул хоҡуҡтарҙы ҡулланмау ҡатын-ҡыҙ өсөн уңайлы.

**(Шарль Талейран).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Джалаliддин Руми суфизмдың ҙур белгесе булған. Уға кешеләр гел генә аҡыллы һүҙ, кәңәш артынан килә торған. Бер ваҡыт уға балалы ҡатын килгән дә: "Мин бөтәһен дә эшләнем, тик улым тыңлашмай, күп итеп шәкәр ашай. Зинһар, быныҡ зарарлы икәнен уға аңлатығыҙ. Ул һеҙҙе тыңлаясаҡ. Ул һеҙҙе ихтирам итә", - тигән. Руми балаға ҡараған да, өс аҙнанан килергә ҡушҡан. Ҡатын аптырашта ҡалған. Шулай ҙа өс аҙна үткәс тағы килгән. Руми балаға ҡараған да, тағы ла өс аҙнанан килергә ҡушҡан. Әсә ярһып быныҡ сәбәбен һораған, тик Руми әйткән һүҙҙәрен ҡабатлаған ғына. Өсөнсө тапҡыр килгәндә, Руми малайға: "Улым, кәңәшемде тыңла, шәкәрҙе күп ашама, был һаулыҡ өсөн бик зарарлы", - тигән. "Ярай, һеҙ кәңәш иткәс, бүтән улай эшләмәйәсәкмен", - тип яуап ҡайтарған малай. Һуңыраҡ әсә улына урамда көтөп торога ҡушҡан да, Румизан ни өсөн уның быны беренсе килгәндә үк эшләмәүен һораған. Джалаliддин ҡатынға ысынын төшөндөрөп биргән: "Мин үҙем дә шәкәр яратам, кәңәш бирер алдынан, үҙемә был көсһөҙлөктән арынырға кәрәк. Тәүҙә өс аҙна етәрлек булыр тип уйлағайным, ләкин..."**

**Ысын белгес кешегә үҙе үтмәгәнде өйрәтмәҫ шул".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 12 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1416/07